РАҪЛАНДЫ:
Бала үҫтереү үҙәге – “Аҡбуҙат”
балалар баҡсаһы мөдире
_________Р.Ғ. Иҙрисова
Бойороҡ №151
«09» сентябрь 2020 йыл

# КОМПЛЕКСЛЫ – ТЕМАТИК ПЛАН
# 2020-2021 уҡыу йылы

Башҡортостан Республикаһы
Сибай ҡала округы
Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге –
“Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы

**Иртә йәштәге икенсе кескәйҙәр төркөмө өсөн**
**яҡынса комплекслы тематик план (2 – 3 йәш)**

| Темалар | Йөкмәткеһе | Йомғаҡлау сараһы |
|---|---|---|
| Сентябрь<br>1 аҙна<br>“Балалар баҡсаһы”<br>“Был минең төркөм” | Балала үҙе тураһында, балалар баҡсаһына йөрөй башлауы, үҙенең үҫеүе тураһында күҙаллауын үҫтерерeү. Балалар баҡсаһына ыңғай ҡараш булдырыу, балалар баҡсаһына килеүҙән ҡыуаныс тойғоһо уятыу, ыңғай тәьҫораттар тыуҙырыу. Баҡса хеҙмәткәрҙәренең (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы) исемен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү, уларҙың хеҙмәте менән таныштырыу.<br>Төркөмдөң биҙәлешенә, уйынсыҡтарҙың, китаптарҙың күплегенә иғтибар иттереү. Төркөм бүлмәһендәге уйынсыҡтар менән ташыштырыу, атамаларын дөрөҫ әйттереү (уйынсыҡтар, һауыт – һаба, кейемдәр, аяҡ кейеме, йырт йыһаздары). Предметтарҙың төҫө, нимәнән эшләнгән (ҡағыҙ, ағас, балсыҡ, сепрәк), формаһын белдергән төшөнсәләрҙе үҙләштерeү. Тиҫтерҙәре менән татыу аралашыу, дуҫлашып уйнау теләге булдырыу, өлкәндәр менән дуҫтарса яҡшы мөнәсәбәт булдырыуға күнектереү. Төркөм бүлмәһендә, уйын майҙансығында (төркөм бүлмәһе, сисенеү, йоҡлау бүлмәһе, баҫҡыс, веранда, ҡом һауыты һ.б.) йүнәлештәрҙе табырға өйрәтеү. Балала ыңғай-эмоциональ хис-тойғо булдырыу. Үҙ һаулығына ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Актив һүҙлек запасын байытыу.<br>Коммуникатив уйын: “Марат балалар баҡсаһында”, “Дөрөҫ әйт” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “А.Барто “Айыуҙы иҙәнгә ҡолаттылар?”, “Танышыу” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Һин бөгөн ҡайһылай матур”, “Һинең исемең кем?”, “Һин кем менән килдең?”, “Һин ниндәй уйынсыҡ алып килдең?” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйындар: «Курсаҡҡа таҫма һайла» һ.б.<br>Дидактик уйындар: «Пирамиданы йый», “Нимә юҡ булды?”, “Тылсымлы моҡсай”, “Нимә шалтырай?” “Уйынсыҡты тап”, “Оҙон-ҡыҫҡа”, “Айыу беҙгә нимә алып килде?” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Кубиктарҙан башня” (кирбес, ҙур леголар, конструкторҙар ҡулланып төҙөү) һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Миңә йүгер?”, “Миңә алып кил”, “Ҡояш һәм ямғыр”, “Тупты ташла” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Бутыр - бутыр бутҡа бешкән”, “Шалҡан” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек ҡағиҙәһе: “Һаҡ бул, ишек!”, “Иғтибар, баҫҡыс!” һ.б. | Сюжет төҙөүсе уйындар<br>“Курсаҡты ашатайыҡ”<br>“Ҡунаҡтарҙы һыйлайыҡ”<br>“Балалар баҡсаһы” |
| 2 аҙна<br>«Хәүефһеҙлек донъяһы» | Машина, юл, урам һ.б. төшөнсәләр тураһында тәүге күҙаллауҙарын формалаштырыу. Ҡайһы бер транспорт төрҙәрен өйрәтеү. Юлда хәүефһеҙ йөрөү буйынса ябай ҡағиҙәләр менән таныштырыу. Светофорҙыңың төҫтәре менән таныштырыу. Бармаҡ, устар менән светофор төҫтәрен һүрәтләү, ваҡ ҡул моторикаһын үҫтереү.<br>Дидактик уйындар: “Светофор”, “Ниндәй төҫ?” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Автомобиль һәм турғайҙар” һ.б. | |

| | | |
|---|---|---|
| | Предметтар донъяһы менән таныштырыу, предметтар менән хәүефһеҙ уйнай белеү ҡағиҙәләрен өйрәтеү. “Ярай-ярамай”, “ҡурҡыныс” төшөнсәләре менән таныштырыу. Ҡом, һыу менән уйындарҙа хәүефһеҙлек ҡағиҙәләренең тәүге күҙаллауын формалаштырыу (бысыраҡ һыуҙы эсмә, ҡом менән ташлашма һ.б.).<br>Гигиена күнекмәләрен һәм файҙалы ғәҙәттәрҙе тәрбиәләү (таҙа итеп ашау, ҡулдарҙы йыуыу, шәхси таҫтамал, көршәк, ҡулъяулыҡ менән ҡулланыу һ.б.) | |
| 3- 4 аҙна<br>«Көҙ килә, көҙ!» | Тәбиғәткә һәм тәбиғәт күренештәренә балаларҙың ҡыҙыҡһыныуын формалаштырыуға шарттар булдырыу. Көҙгө күренештәр менән таныштырыу. Тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе күҙәтергә булышлыҡ итеү (майҙансыҡтағы ҡоштар, бөжәктәр һ.б). Тәбиғәттең матурлығын күрә белергә ярҙам итеү. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү; үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен өйрәтеү. Күңел күтәренкелеге, ыңғай эмоциональ тойғо үҫтереү. Тәбиғәттәге хеҙмәтте күҙәтеү.<br>Хеҙмәткә ҡарата ыңғай ҡараш тәрбиәләү. Нәфис әҙәбиәт менән таныштырыу, көҙ тураһында ҡыҫҡа ғына шиғырҙар, йырҙар тыңларға күнектереү. Ауыр булмаған фразаларҙы ҡабатлатыу, һүҙлек запасын байытыу. Тышҡы күренешенән йәшелсәләрҙе (помидор, ҡыяр, кишер һ.б.) һәм емештәрҙе (алма, груша һ.б.) айырырға өйрәтеү.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Төҫлө япраҡтар”, “Ҡояш һәм ямғыр” , “Япраҡтарҙы йый” , “Ҡоштар осалар” һ.б.<br>Дидактик уйындар:”Һары япраҡты тап”, “Япраҡтарҙан матур гөлләмә”, “Һуҡмаҡ буйлап” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: А. Йәғәфәрова “Көҙ” , “Шалҡан” әкиәте һ.б.<br>“Көҙ” миҙгеле буйынса һүрәттәр, иллюстрациялар ҡарау.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Йөк машинаһы йәшелсәләр ташый” (кирбес, ҙур леголар, конструкторҙар ҡулланып) һ.б.<br>Традицион булмаған алым менән һүрәт төшөрөү: “Көҙгә ямғыр”, “Көҙгө япраҡтар” һ.б.<br>Йәбештереү: “Һары япраҡтар”, “Көҙгө байлыҡ” һ.б.<br>Әүәләү: “Емеш- еләктәр”, “Беҙ йәшелсәләр әүәләйбеҙ” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, ағыулы бәшмәк!”, “Юлдан дөрөҫ сыҡ!”, “Ишектән һаҡ бул!” һ.б. | Ата-әсәләр менән берлектә фотокүргәҙмә «Беҙҙең ҡалабыҙҙа алтын көҙ» |
| Октябрь<br>1- 2 аҙна<br>“Мин һәм мине уратып алған донъя” | Балаларҙа үҙе тураһында тәүге күҙаллауҙарын формалаштырыу.<br>Үҙенең исемен һәм нисә йәш икәнен әйтергә өйрәтеү. Үҙенең ғаилә ағзалары буйынса тәүге төшөнсәләр биреү, ғаилә ағзаларының исемдәрен атап әйтеү күнекмәләрен үҙләштереү. Ата-әсәһенә һөйөү тәрбиәләү.<br>Нәфис әҙәбиәт менән таныштырыу: Гөлфиә Юнысова, Рәсимә Ураҡсинаның шиғырҙарын уҡыу.<br>“Был-мин” йыры менән таныштырыу, тыңлау, йырлап өйрәнеү.<br>Конструктив – модель эшмәкәрлеге: уйын барышында эре төҙөлөш материалдарының деталдәре менән таныштырыу (кубик, кирбес һ.б.). Өлгөгә ҡарап ябай төҙөлөштәр төҙөргә өйрәтеү, үҙ аллы төҙөүгә ҡыҙыҡһыныуҙарын хуплау.<br>Сюжет төҙөүсе уйындар: “Минең өйөм”, “Кемдең өйө ҙур?” , “Ғаилә”, “Ҡунаҡ килде” (күтәреңке | Папка- йәймә “Беҙҙең йәшәгән йорт” Ата-әсәләр менән берлектә менән фотокүргәҙмә ойоштороу «Минең ғаиләм» |

| | | |
|---|---|---|
| | кәйеф, үҙе уйлаған уйынды һайлап уйнауын хуплау)<br><br>Дидактик уйындар уйнау “Өйҙөң тәҙрәһен яп”, “Ҡуяндың өйө”һ.б.<br>“Минең ғаиләм” бармаҡ, устар менән һүрәт төшөрөү.<br>Бармаҡ уйындары “Минең ғаиләм” , “Өй” һ.б.<br>Хеҙмәт эшмәкәрлеге: өлкәндәр ярҙамында уйын аҙағынан уйынсыҡтарҙы йыйыштырырға күнектереү.<br>Хәүефһеҙлек: “Плитаға яҡын барма!” , “Дарыуҙарға теймә!” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Минең тыуған ҡалам” | Балаларҙа үҙҙәре йәшәгән ҡала (ҡасаба) тураһында күҙаллауҙарын формалаштырыу. Ҡаланың (ҡасабаның) атамаһын әйтергә өйрәтеү. Тыуған ҡалаға ҡарата, яҡын кешеләренең хеҙмәтенә һөйөү тәрбиәләү.<br>Транспорт төрҙәре, ябай юл ҡағиҙәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы хеҙмәте тураһында тәүге төшөнсәләр биреү (һауыт – һаба, иҙән йыуа, аш алып килә һ.б.). Өлкәндәр хеҙмәтен күҙәтеү даирәһен киңәйтеү, ярҙам итеү теләген хуплау.<br>Сюжет төҙөүсе уйындар: “Әсәй эшкә китте”, “Автобус”, “Әсәй бәлеш бешерә” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был нимә”, ”Айырып һал” һ.б.<br>Ҡоролмалар төҙөү: “Өй”, “Баҫма”,”Төлкө менән ҡуянға өй төҙө”, “Маратҡа нимә кәрәк?”(өҫтәл, карауат, ултырғыс, диван һ.б.). Иғтибарҙы, хәтерҙе, аралашыу оҫталығын үҫтереү, бергә уйнау теләге булдырыу.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Йорт” М.Дилмөхәмәтов, Р. Ураҡсина, Ә. Зиннурова һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Юл ҡағиҙәләре”, “Сит кешеләр!”, “Яңғыҙ өйҙә булғанда” һ.б. | “Тыуған ҡалам”<br>Ҡала тураһында альбом эшләү |
| Ноябрь<br>1-2 аҙна<br>“Йорт хайуандары” | Балаларҙы йорт хайуандары (бесәй, эт, һыйыр һ.б.) менән таныштырыу. Йорт хайуандарын һәм уларҙың балаларын (быҙау, көсөк, ҡолон һ.б.) һүрәттәрҙән, уйынсыҡтарҙан таныу һәм айырыу, атамаларын әйтә белеү. Хайуандарҙың үҙенә бер хас билдәләрен билдәләй белергә өйрәтеү (бесәй мырылдай, эт өрә, һыйыр баҡыра һ.б.), тауыштарынан айыра белергә өйрәтеү. Хайуандарға ҡарата йылы ҡараш, һөйөү тәрбиәләү.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Шалҡан”(рус халыҡ әкиәте), тел төҙәткестәр “Бесәй, бесәй бес кенә…” һ.б.<br>Дидактик уйын: “Был нимәнең өйө?” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйын: “Бүре һәм кәзә бәрәстәре” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Йорт хайуандары ҡайҙа йәшәй?”<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Йорт хайуандары өсөн ҡура” һ.б<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ат”А. Йәғәфәрова, “Аҡтүш” А.Игебаев<br>Сюжет төҙөүсе уйын “Өләсәйем ихатаһында” һ.б<br>Бармаҡ уйыны: “Ат” һ.б.<br>Уйын- күнекмә: “Бесәйемдең аяғы ауыртҡан...”, “Нимәнең тауышы?”<br>Һүрәт төшөрөү: “Бесәйгә йомғаҡ” һ.б. | Уйынлы ваҡиға<br>«Кем нисек тауыш бирә?» |

| | | |
|---|---|---|
| | Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Һаҡ бул,  эт“ һ.б. | |
| 3 - 4 аҙна<br>“Әсә күңеле балала” | Ғаилә тураһында белемдәрен нығытыу, камиллаштырыуҙы дауам итеү. Әсәйгә ҡарата ихтирам, йылы һөйөү, уны һаҡлау кеүек кешелек сифаты тәрбиәләү. Нәфис әҙәбиәт менән таныштырыу: әсәй тураһында шиғырҙар укыу, йырҙар өйрәнеү һ.б.<br>Сюжетлы уйындар: “Әсәйгә ярҙам итәм”, “Ҡурсаҡты йыуындырабыҙ” һ.б<br>Хәрәкәтле уйындар: “Себештәр”, “Бүре һәм кәзә бәрәстәре” һ.б.<br>Һөйләшеү ситуацияһы булдырыу: “Әсәй менән телефондан һөйләшеү” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: Р. Ураксина “Әсәйем”, “Курсағым”, Ф. Рәхимғолова “Беҙҙең әсәй”, Ф. Яхин “Тыңлауһыҙ ҡуян балаһы” һ.б.<br>Әүәләү: “Әсәйгә  бәлештәр” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү баҫма техникаһы: “Сәскәләр”  һ.б.<br>Конструктив -  модель эшмәкәрлеге:  “Әсәйгә  бүләк” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйын: “Әсәйемә ярҙам итәм”, “Йомро икмәк” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, плита” һ.б. | Күргәҙмә<br>“Әсәйҙең оҫта ҡулдары” |
| Декабрь<br>1-2 аҙна<br>“Гәлсәр ҡыш” | Ҡыш миҙгеле тураһында балаларҙың белемен камиллаштырыу.<br>Ҡышҡы тәбиғәткә балаларҙың ҡыҙыҡһыныуын  формалаштырыуға шарттар булдырыу. Ҡышҡы күренештәр менән таныштырыу. Тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе күҙәтеү (ҡар яуа һ.б). Тәбиғәттең матурлығын күрә белергә ярҙам итеү.   Үҙ -үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре менән таныштырыу (ҡарҙы ашарға ярамай, ул бысраҡ, һыуыҡ һ.б.). Ҡыр хайуандары   менән таныштырыу, һүрәттәрҙән, уйынсыҡтарҙан таныу һәм айырыу, атамаларын әйтә белеү. Ҡыр хайуандарының үҙенә бер хас билдәләрен билдәләй белергә өйрәтеү, хәрәкәттәрен ҡабатлатыу (ҡуяндың ҡолағы оҙон, төлкөнөң ҡойроғо йомшаҡ, тайыштабан айыу һ.б.).<br>Дидактик уйындар: «Кар бөртөктәре» һ.б. Бармаҡ уйындары; “Ағастар”, “Аҡ ҡуян” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: «Турғайҙар менән эт», “Ҡарҙар оса”,  “Аҡ ҡуян”,  «Ҡышҡы тау» һ.б.<br>Ҡыш тураһында шиғырҙар, йырҙар өйрәнеү “Аҡ ҡуян”, Г.Йыһангирова “Ап - аҡ ҡына ҡар яуа” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү  “Карҙар яуа” (устар, бармаҡтар менән). | Папка – йәймә<br>“Гәлсәр ҡыш” |
| 3-4  аҙна<br>“Ҡыш бабай килә!” | Балаларға «Яңы йыл»  байрамы  тураһында төшөнсә биреү. Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу тураһында һөйләү. Байрамға эмоциональ  ҡараш булдырыу, байрам кәйефе тыуҙырыу. Актив һүҙлек запасын байытыу.<br>Түңәрәк уйындары: «Кыш бабай», йырҙар Ә. Зиннурова “Кыш бабай”, “Яңы йыл килә” һ.б. йырҙар өйрәнеү.<br>Г. Юнысованың “Ҡыш бабай”, Д. Юлтый  “Ҡыш” шиғырын ятлау.  Фотоһүрәттәр ҡарау.<br>Дидактик уйындар: “Нимә артыҡ?”, “Был кемгә кәрәк?” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Туңдырам”, “Шалтырауыҡтар” һ.б. Ритмик уйындар: рус халыҡ уйыны | Байрам:<br>«Шыршыҡай беҙҙә ҡунаҡта» |

| | | |
|---|---|---|
| | “Әйлән- бәйлән” һ.б.<br>Әүәләү: “Шыршыға  уйынсыҡтар әүәләйбеҙ” һ.б.<br><br>Ата-әсәләр менән Яңы йыл сараһына әҙерләнеү:  шиғырҙар, йырҙар өйрәнеү, уйындар уйнау, байрамға кейемдәр, шыршы уйынсыҡтары әҙерләү, видеофильмдәр, фотоһүрәттәр, йәнһүрәттәр һ.б. ҡарау.Яңы йыл байрамын үткәреү, балала байрам ҡыуанысы тыуҙырыу. | |
| Ғинуар<br>1-2 аҙна<br>Каникулдар<br>3 - 4 аҙна<br>“Хайуандар донъяһы” | Ҡыр хайуандарын  ысынбарлыҡта, һүрәттә, уйынсыҡтарҙа (ҡуян, төлкө, айыу,  һ.б.)  танырға өйрәтеү. Ҡырағай хайуандар тураһында тәүге төшөнсәләр биреү, уларға хас булған сифаттарын һәм айырмалыҡтарын әйтергә өйрәтеү (ҡуяндың ҡолағы оҙон, төлкө йомшаҡ ҡойроҡло, айыу тайыштабан  һ.б.).<br>Үҫтереүсе диалог: “Тирмәкәй”<br>Нәфис әҙәбиәт: “Бүре менән кәзә” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын:  “Урманда”  (уйын өсөн кәрәкле атрибут)<br>Дидактик уйындар:  “Нимә ҡайҙа йәшәй?”, “Йәшәгән урынын тап” һ.б.<br>Бармаҡ уйыны: “Ҡуян”, “Төлкө” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар:“Айыу һәм ҡуян”, ”Айыу, бүре”, “Хайуандар уйнай” һ.б.<br>Әүәләү: “Тирмәкәйҙә кем йәшәй?”<br>Һүрәт төшөрөү: “Нимәнең эҙе?” һ.б. | “Хайуандар донъяһы”<br><br>Альбомдар эшләү |
| Февраль<br>1-2 аҙна<br>“Халҡым биҙәктәре” | Башҡорт халҡының кейем – һалымы  менән таныштыра башлау. Кейем-һалым  кеше тарафынан эшләнгәнен, зауыҡлы биҙәлгәнен,  уларҙың  йәшәү өсөн кәрәк булыуын балаға еткереү, һүрәт-иллюстрациялар ҡарау (түбәтәй, камзул, ҡашмау, күлдәк). Баланы бөҫтәлеккә, үҙендә булған етешһеҙлекте күрә белергә һәм төҙәтергә күнектереү, өлкәндәр хеҙмәтенә ихтирам тәрбиәләү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Әлиә ҡунаҡҡа килгән”  һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог:  “Һин ҡурсағыңды нисек кейендерҙең?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Сәлимәне байрамға кейендер”,  “Биҙәкте йый” һ.б.<br>Уйын – ситуация: “Ҡурсағыма күлдәктәр” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Ҡурсаҡтың күлдәген биҙә”  һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Сәлимә менән Азамат ҡунаҡҡа килгән” һ.б. (күтәренке кәйеф,  уйынға ҡыҙыҡһыныу уятыу, уйынды дауам итеп үҫтерергә өйрәтеү).<br>Әүәләү: “Картатайым түбәтәйе” һ.б.<br>Йәбештереү: “Милли кейемдәр” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ҡурсаҡҡа йорт йыһаздары” һ.б. (эре лего конструкторҙар)<br>Хәрәкәтле уйын:  “Ҡурайға йүгер” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул- ваҡ биҙәүестәр”, “Осло әйберҙәр” һ.б. | Ижади эш:<br>“Ҡулъяулыҡ биҙәү”<br>(баҫма техникаһы) |
| 3-4 аҙна<br>“Ватанды | “Ватанды һаҡлаусылар көнө” байрамы тураһында, балаларҙың белемен формалаштырыу. Атайҙар тураһында әңгәмә  үткәреү. | Ата- әсәләр менән берлектә фотокүргәҙмә |

| | | |
|---|---|---|
| һаҡлаусылар көнө” | Балаларҙа атайға ҡарата хөрмәт тойғоһо тәрбиәләү. Һүҙлек запасын байытыу.<br>Нәфис әҙәбиәт: Р. Ураҡсина “Атайым”, йырҙар өйрәнеү, ҡыҫҡа шиғырҙар ятлау һ.б.<br>Хәрәкәтле уйын: “Беҙ һалдаттар” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Транспорт“, “Һүрәтте йый” һ.б.<br>Конструктив- модель эшмәкәрлеге: “Самолет”, “Танк” һ.б. (эре лего конструкторҙар, ағас кубиктарҙан)<br>Йәбештереү: “Танк”, “ Самолет” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: З. Акбутина “Атай кеүек булам мин”, Р. Ураҡсина “Атайым” һ.б..<br>Әүәләү: “Самолеттар оса” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Атайым машинаһына юл” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Юл билдәләре” һ.б. | ойоштороу:<br>“Минең атайым” |
| Март<br>1-2 аҙна<br>“Әсәйем, әсәкәйем” | Әсәйгә ҡарата һөйөү хистәре уятыу. Әсәйҙәр иң яҡын кеше булыуҙарын, уларҙы ҡәҙерләргә кәрәклеген балаларға төшөндөрөү. Әсәйҙәргә бүләктәр әҙерләү, альбомдар, һүрәттәр ҡарау. Уларға ҡарата ихтирам тойғоһо, һөйөү тәрбиәләү.<br>Әңгәмә: “Мин әсәйемде яратам”.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Себештәр”, “Бүре һәм кәзә бәрәстәре” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Әсәйҙең бәлеше”, “Байрам өҫтәле” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Әсәйҙәр бер генә”, Ҡ.Әлибаевтың “Әсәй ҡайтты” шиғырын уҡыу һ.б.<br>Йәбештереү: “Әсәйҙәргә сәскәләр” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйындар: “Әсәйем иң матуры” һ.б<br>Нәфис әҙәбиәт: “Беҙҙең әсәй” Ф.Рәхимғолова, “Минең әсәйем кем?” һ.б..<br>Бармаҡ уйыны: “Бутыр-бутыр”, “Минең ғаиләм” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар:“Әйберҙе алып кил”,”Миңә йүгер”, “Турғайҙар һәм бесәй”, “Кем тиҙерәк” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Әсәйемә сәскәләр” (баҫма техникаһы) һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Ярамаған әйберҙәр”, “Осло әйберҙәр”, “Боҙбармаҡтар” һ.б. | Байрам<br>“Әсәйем – әсәкәйем” |
| 3-4 аҙна<br>“Халҡым көнкүреше, йолалары, ғөрөф - ғәҙәттәре” | Халыҡ көнкүреше тураһында тәү мәғлүмәт биреү.<br>Йорт хайуандары (ат, һыйыр), уларҙың балалары тураһында белемдәрен нығытыу, уларҙың кешеләргә файҙаһын һөйләү. Ат тәрбиәләү хаҡында һүрәттәр ҡарау.<br>Альбомдар ҡарау, дидактик һәм сюжетлы уйындар уйнау, ҡырҡылған һүрәттәр төҙөү.<br>Сенсорик уйындар: “Мозаика”, “Кубиктар”, “Төҫлө шарҙар”<br>Хәрәкәтле уйындар: “Аттар”, “Айыу һәм ҡуяндар”<br>Сюжетлы уйын: “Һауыт – һаба йыуабыҙ”<br>Үҫтереүсе уйындар: “Атай нимә эшләй?”, “Мин ярҙамсы...” һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Ҡура”, “Бал ҡорттары” һ.б. (призма, кирбес, пластина, ваҡ уйынсыҡтар, өлгө буйынса)<br>Әүәләү: “Ҡорот” һ.б. | Папка- йәймә<br>“Халыҡ йолалары”<br>Альбом эшләү |

| | | |
|---|---|---|
| Апрель<br>1-2 аҙна<br>“Яҙ килә, яҙ килә!” | Балаларҙы тәбиғәттәге яҙғы үҙгәрештәре менән таныштырыу. Яҙ миҙгеле тураһында белем биреү. Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт араһындағы ябай бәйләнештәрҙе күрә белергә өйрәтеү (һауа торошоноң үҙгәреүе, көндәр йылына, ҡояш нығыраҡ ҡыҙҙыра, тәүге сәскәләр, үләндәр үҫеп сыға). Бөжәктәр (ҡамҡа, ҡырмыҫҡа, күбәләк һ.б.), хайуандар һәм ҡоштарҙың ҡылыҡтары һ.б. менән таныштырыу. Баҡсалағы яҙғы эштәр, элементар экологик тәрбиә тураһында белем биреү. Тәбиғәттә үҙ –үҙеңде тотоу, хәүефһеҙлек ҡағиҙәһен, өлкәндәр хеҙмәтенә, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүҙе дауам итеү.<br>Сенсорик уйындар: “Ҡояш йылмая”, “Ямғыр тамсылары”,“Төрлө төҫтәге шарҙар”<br>Дидактик уйындар: “Ағастарҙа япраҡтар”, “Ҡояш һәм болот”<br>Хәрәкәтле уйындар: “Ҡояш һәм ямғыр”, “Күңелле тамсылар”, “Сәскәләр”<br>Бармаҡ уйын: “Ҡояш”<br>Төҙөлөш материал менән уйын: “Яҙғы урам”<br>Хәүефһеҙлек: “Сәскәләрҙе һаҡла!”, “Һаҡ бул, тайғаҡ юл!”, “Боҙбармаҡты ашама!” һ.б. | Күңел асыу:<br>“Яҙғы тамсылар” |
| 3-4 аҙна<br>“Китап – белем шишмәһе” | Балаға китаптар тураһында мәғлүмәт биреү. Төркөм бүлмәһендә китаптаптар күргәҙмәһе ойоштороу.<br>Китапҡа ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.<br>Әңгәмә ойоштороу: “Китапты һаҡлайыҡ” һ.б.<br>Китаптар, бағышһүрәттәр ҡарау. Ата- әсәләр менән бергә “Китап дауаханаһы” төҙөү, китапсыҡ эшләү.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Китапты дауалайыҡ” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Һүрәтте таны” һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Китап кәштәһе” һ.б. (модуль һәм ҙур конструкторҙар )<br>Йәбештереү: “Минең китабым” һ.б.,<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ат”А. Йәғәфәрова, “Аҡтүш” А.Игебаев, “Һарыбай”, “Бүре менән кәзә” һ.б.<br>Әүәләү: “Әкиәт геройҙары”<br>Һүрәт төшөрөү: “Минең китабым” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Һаҡ бул, талпан!”, “Осло әйберҙәр”, “Светофор минең дуҫым” һ.б. | Күргәҙмә |
| Май<br>1-2 аҙна<br>“Еңеү яҙы” | Еңеү байрамы тураһында тәүге төшөнсә биреү. Патриотик тәрбиә биреү. Тыуған илгә һөйөү, һуғыш ветерандарына хөрмәт тәрбиәләү. Ҡыҫҡа шиғырҙар, йырҙар өйрәнеү, альбомдар, һүрәттәр, фотоһүрәттәр ҡарау. Баланың «Мин һәм башҡалар» образын формалаштырыу. Регулятор һәләттәр үҫтереү (балалар баҡсаһында, төркөмдә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен үтәү, тәрбиәсенең тәнҡитенә һәм тәҡдименә тәьҫир итеү ). Малайҙарҙа ҡыйыулыҡ, көслөлөк батырлыҡ, сослоҡ сифаттарын, тәрбиәләү.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Танк” (лего, ағас конструкторҙар менән) һ.б.<br>Йәбештереү: “Олатайыма бүләк”<br>Нәфис әҙәбиәт: “Тыңлауһыҙ ҡуян” | Папка йәймә<br>“Еңеү яҙы” |

| | | |
|---|---|---|
| | Бармаҡ уйыны: “Ғаилә” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Атта сабышыу”, “Һыбайлылар” һ.б.<br>Әүәләү: “Танк” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: (бармаҡ, мамыҡ таяҡсалар ярҙамында) “Еңеү салюты” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Урамдағы сит кешеләр”, “Асыҡ тәҙрә” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Ер беҙҙең йәшәгән урыныбыҙ” | Тыуған ил, тыуғант ер тураһында балаларҙың күҙаллауҙарын үҫтереү. Үҙ тыуған еренә ҡарата ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.<br>Уурамда, юлда, тәбиғәттә үҙ –үҙеңде тотоу ҡағиҙәһен нығытыу, юл хәүефһеҙлеге буйынса әңгәмә үткәреү.<br>Әңгәмә ойоштороу: «Минең төркөм», «Минең уйынсығым»<br>Хәрәкәтле уйын: «Ағастар һәм түмәрҙәр»<br>Бармаҡ уйыны: «Минең ғаиләм»<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Мин йәшәгән ҡала”, “Тыуған ерем” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был ниндәй йорт”, “Нимә ҡайҙа йәшәй?” һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Бейек һәм тәпәш өйҙәр” һ.б. (кубиктар, пластиналар, лего, ағас конструкторҙар)<br>Йәбештереү: “Мин йәшәгән өй” (ҡағыҙ, әҙер фигураларҙан)һ.б.,<br>Нәфис әҙәбиәт: “Гөр килә өйҙөң эсе” К.Кинйәбулатова<br>Башҡорт халыҡ уйыны “Ҡоштар һәм ҡошсоҡтар”, ”Себештәр менән көтөүсе” һ. б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Аттар”, “Урманда” һ.б. (үҙ-ара ыңғай мөнәсәбәт яйлау, баланың уйнау теләгеn булдырыу һәм үҙенә атрибутты һайлап алырға өйрәтеү).<br>Бармаҡ уйыны: “Ғаилә” ,“Ҡуян”, “Төлкө”, “Ат” һ.б.<br>Уйын- күнекмә: “Һүрәттә нимә төшөрөлгән?” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Осто – осто”, “Йәшерәм яулыҡ”, “Йылға аша үт”, “Айыу һәм ҡуян”, “Айыу, бүре”, “Турғайҙар һәм бесәй” һ.б.<br>Әүәләү: “ Өйгә ҡоймалар” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Ҡоймалы өй” (баҫма техникаһы), һ.б.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Һаҡ бул, юл!”, “Өйҙәге электроприборҙар”, “Һаҡ бул, талпан!” , “Сит кешеләр”һ.б. | Ата-әсәләр менән фотокүргәҙмә ойоштороу: “Минең тыуған яғым”<br>Балар менән уйын: “Күңелле баҡса” |
| “Ер- йәшәгән урыныбыҙ”<br>3 аҙна | Тыуған ил, тыуған ер тураһында баланың күҙаллауын үҫтереү. Иҫтәлекле урындар менән таныштырыу. Үҙ тыуған еренә ҡарата ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү. Балалар баҡсаһына яҡын өйҙәрҙе күҙәтеү, балалар баҡсаһы тирәләп экскурсия, урам һепереүсеһе эшен, үткән транспортты һәм кешеләрҙе күҙәтеү. Ҡала урамдарын һәм иҫтәлекле урындарҙы һүрәтләгән бағышһүрәттәр ҡарау. Альбомдар, һүрәттәр ҡарау.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Мин йәшәгән ҡала” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Нимә ҡайҙа йәшәй?” һ.б. | Интерактив сәйәхәт: “Ҡала урамы буйлап” |

| | | |
|---|---|---|
| | Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Минең урамым”, “Бейек һәм тәпәш өйҙәр” һ.б. (кубиктар, пластиналар, лего, ағас конструкторҙар).<br>Йәбештереү: “Мин йәшәгән өй” һ.б.<br>Башҡорт халыҡ уйыны “Ҡоштар һәм ҡошсоҡтар”, ”Себештәр менән көтөүсе” һ. б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Аттар”, “Урманда” һ.б. (үҙ - ара ыңғай мөнәсәбәт яйлау, баланың уйнау теләгеген булдырыу һәм үҙенә атрибутты һайлап алырға өйрәтеү).<br>Бармаҡ уйыны: “Ғаилә” һ.б. Уйын- күнекмә: “Һүрәттә нимә төшөрөлгән?” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Осто – осто”, “Айыу һәм ҡуян”, “Турғайҙар һәм бесәй” һ.б.<br>Әүәләү: “ Өйгә ҡоймалар” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Һаҡ бул, юл!”, “Өйҙәге электроприборҙар” һ.б. | |

**Кескәйҙәр төркөмө өсөн яҡынса комплекслы тематик план**
**(3-4 йәш)**

| Темалар | Йөкмәткеһе | Йомғаҡлау сараһы |
|---|---|---|
| Сентябрь<br>1 аҙна<br>Мониторинг<br>“Һаумы баҡсам” | Балаларҙа балалар баҡсаһына килеүҙән ҡыуаныс тойғоһо уятыу.<br>Баҡса хеҙмәткәрҙәренең (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, ашнаҡсы) исемен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү, уларҙың хеҙмәте менән таныштырыу. Актив һүҙлек запасын байытыу. Предметтарҙың (һауыт – һаба, йыһаздар, кейемдәр һ.б.) исемен, тәғәйенләнешен әйттереп өйрәтеү.<br>Телмәр ярҙамында балаға тиҫтерҙәре менән нисек итеп аралашырға, бәйләнеш булдырырға ярҙам итеү (Маратҡа ҙур кубиктәрҙе нисек итеп тейәргә өйрәтеп ебәр әле. “Һуғышырға ярамай! Һин хәҙер ҙур үҫкәнһең!”- тип әйт әле һ.б.). Үҙ аллы уйындарҙа баланың тиҫтерҙәре менән татыу аралашырға күнектереү. Өлкәндәргә мөрәжәғәт итеүҙә, яҡшы мөнәсәбәт булдырыуҙа өлгө күрһәтеү.<br>Көндәлек тормошта гигиена, бөхтәлек күнекмәләрен үтәү ихтыяждарын формалаштырыу. Үҙ һаулығына ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Төркөмдә хәүефһеҙлек күнекмәләре менән таныштырыу (ишекте асыу, ябыу, бер – береңде этәрмәү һ.б. )<br>Коммуникатив уйын: “Марат балалар баҡсаһында”, “Дөрөҫ әйт” һ.б. | Мониторинг |
| 2 аҙна<br>Мониторинг<br>“Хәүефһеҙлек донъяһы” | Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге буйынса тәүге күҙаллауҙарын формалаштырыу (юл аша үткәндә фәҡәт өлкәндәр менән үтеү, өлкәндәрҙең ҡулын тотоп үтеү һ.б.). Светофор төҫтәрен өйрәнеү. Саф һауала йөрөгәндә машиналарҙы күҙәтеү. Полиция һөнәре менән таныштырыу. Актив телмәрҙә һөнәр менән бәйле һүҙҙәрҙе ҡулланыу, шиғырҙар уҡыу, һүрәттәр, бағышһүрәттәр, видеояҙмалар ҡарау.<br>Тәбиғәттәге хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре менән таныштырыу (бәшмәк һәм еләктәрҙе ашарға ярамай, хайуандарҙы тотма, өлкәндәрҙең эргәһендә генә йөрө һ.б.).<br>Үҙ тормош хәүефһеҙлеге. Ҡом, һыу, ҡар, ваҡ предметтәр менән уйындар уйнағанда хәүефһеҙлек | Хәүефһеҙлек буйынса папка - йәймә |

| | | |
|---|---|---|
| | ҡағиҙәләре күнекмәләрен формалаштырыу.<br>Һүрәт төшөрөү: “ Светофор төҫтәре”<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Светофор беҙҙә ҡунаҡта” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Автомобиль һәм турғайҙар”, “Төҫлө автомобилдәр” һ.б.<br>Бармаҡ театры: “Тыңлауһыҙ ҡуян балаһы” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Ярай- ярамай”, “Был хәүефле!”, “Юлдағы хәүефһеҙлек” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>«Көҙһылыу» | Көҙ миҙгеле үҙенсәлектәренең алмашыныуын төшөндөрөү, мәғлүмәт биреү: тәбиғәттең матурлығын, нисек үҙгәреүен, япраҡ һарғайып ҡойолоуын күҙәтеү. Тәбиғәттәге бәйләнеште (үҫемлек үҫһен өсөн уны ултыртырға, һыу һибергә кәрәк) балаға аңлатыу, һығымта яһарға өйрәтеү. Тәбиғәттәге хеҙмәтте күҙәтеү, кешеләр хеҙмәтенә һоҡланыу (балалар баҡсаһында тәрбиәсе менән бергә көҙгө уңышты, кипкән япраҡтарҙы йыйыу), тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Уңыш йыйыу эштәре тамамланғас үткәрелгән көҙгө байрам – Көҙһылыу тураһында төшөнсә биреү, күңел күтәренкелеге, ыңғай эмоциональ тойғолар үҫтерергә булышлыҡ итеү. Тәбиғәттә үҙ - үҙенде тотоу ҡағиҙәләрен өйрәтеү (сәскәләрҙе өҙмәҫкә, ағастарҙың ботаҡтарын һындырмаҫҡа, хайуандарҙы борсомаҫҡа, суп - сар ҡалдырмаҫҡа h.б.). Көҙ миҙгеле тураһында шиғырҙар уҡыу, һүрәттәр, бағышһүрәттәр, видеояҙмалар һ.б. ҡарау.<br>Һауа торошон билдәләргә (һыуыҡ, йылы, эҫе, ҡояшлы, болотло, ямғыр яуа, ел иҫә) һәм һауа торошона ярашлы кейенергә өйрәтеү.<br>Үҫемлектәр, уларҙың өлөштәрен танырға (һабағы, япрағы, сәскәһе, орлоғо, емеше) өйрәтеү. Уларҙың үҫешенә ер, һыу, һауа кәрәклеген аңлатыу. Емештәр, йәшелсәләр, сәскәләр, ҡыуаҡлыҡтар, ағастар төркөмләргә өйрәтеү. Ҡайһы бер ашарға яраҡлы, ашарға яраҡһыҙ бәшмәктәр менән таныштырыу. Балаларға емеш, йәшелсәләрҙең кеше һаулығы өсөн файҙаһын аңлатыу.<br>Ҡырағай һәм йорт хайуандары, уларҙың балалары тураһында мәғлүмәт биреү. Уларҙың тукланыуын, йәшәү шартын, ҡылыҡ – ғәҙәт һ.б. үҙенсәлектәрен айыра белергә өйрәтеү. Ҡайһы бер бөжәктәр (ҡырмыҫҡа, күбәләк, ҡуңғыҙ һ.б.) менән таныштырыу, ни өсөн берәүҙәре оса, ә икенселәре осмай икәнлеген аңлатыу һ.б. Һыу, ҡар, балсыҡ, ҡомдоң үҙенсәлеге тураһында мәғлүмәт биреү. Тәбиғәткә һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Көҙһылыу ҡунаҡҡа килде”, “Был нимә?” (йәшелсә - емеш мнемотаблицаһы буйынса) һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Йәшелсәләр ҡайҙа үҫә?”, “Ниндәй ағастарҙы беләһең?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Япраҡтарҙы йый”, “Серле тоҡ”, “Ниндәй төҫ” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Кем күберәк йәшелсә (емеш) йыя?”, “Төҫлө япраҡтар”, “Ҡояш һәм ямғыр” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: Ҡ.Әлибаев “Алмалар”, А.Йәғәфәрова “Көҙ” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Ҡояш һәм ямғыр”, “Беҙ күңелле балалар” һ.б. | Күңел асыу сараһы<br>“Көҙһылыу беҙҙә ҡунаҡта”<br><br>Көҙгө эштәрҙән күргәҙмә |

| | | |
|---|---|---|
| | Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Йөк машинаһы йәшелсәләр ташый” (кирбес, ҙур леголар, конструкторҙар ҡулланып) һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Көҙгө уңыш” (баланың инициативаһынан сығыу, дуҫтарса мөнәсәбәт яйлау, уйынсыҡтар менән талашмай уйнау)<br>Һүрәт төшөрөү: “Көҙгө ямғыр”, “Көҙгө төҫтәр” һ.б. Йәбештереү: “Көҙгө япраҡтар”, “Көҙгө байлыҡ” һ.б. Әүәләү: “Емеш-еләктәр”, “Беҙ йәшелсәләр әүәләйбеҙ” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, ағыулы бәшмәк!”, “Юлдан дөрөҫ сыҡ!”, “Ишектән һаҡ бул!” һ.б. | |
| Октябрь<br>1-2 аҙна<br>“Мин һәм минең ғаиләм” | Ғаилә һәм үҙенең ғаилә ағзалары буйынса төшөнсәләр биреүҙе дауам итеү. Үҙенең ғаиләһе тураһында әңгәмә үткәреү (фамилияһы, ғаилә ағзаларының исемдәре, нимә менән шөғөлләнәләр, һинең менән нисек уйнайҙар һ.б.). Ғаилә ағзаларына ҡарата хөрмәт, ихтирам тәрбиәләү. Сәләмәт йәшәү рәүеше, әҙәп – гигиена ҡағиҙәләре, үҙ - үҙенде тәрбиәләү буйынса башланғыс төшөнсәләр биреү. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллауҙы үҫтереү. “Мин” образын үҫтереүҙе дауам итеү, бер - береһенә ҡарата ихтирамлы, иғтибарлы, “нимә яҡшы?”, “нимә насар?” икәнлеген төшөндөрөү. Үҙенә оҡшаған шөғөл табырға һәм баланың ынтылышын хупларға.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Беҙҙең ғаилә лә”, “ Минең татыу ғаиләм” , “әйҙә танышайыҡ” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар:“Һинең ғаиләңдә кемдәр бар?”, “Адресыңды беләһеңме?”, “Һиңә нисә йәш?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Кайҙа һинең өйөң?” һ.б. Альбомдар, бағышһүрәттәр ҡарау.<br>Нәфис әҙәбиәт: Г. Юнысова “Ҡурсағым”, Р. Ураҡсинаның шиғырҙары, Ә. Зиннурова “Был-мин” Ф. Туғыҙбаева “Мин үҙем”, “Рәхмәт”.<br>Сюжет төҙөүсе уйындар: “Сәлимә менән Марат - ҡунаҡта”, “Сәлимәнеү ата-әсәһе” һ. б. (күтәреңке кәйеф, үҙе уйлаған уйынды һайлап уйнауын хуплау)<br>Һүрәт төшөрөү: “Минең ғаиләм” (устар менән), “Мин йәшәгән йорт” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Кем үҙенең өйөн тиҙерәк таба?”, “Кем етеҙерәк?” һ.б.<br>Йәбештереү: “Әкиәт йорто” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ҡурсаҡтарға ултырғыс”, “Минең өйөм” (кирбес, ағас, пластина, призма ҡулланып эшләү) һ.б.<br>Бармаҡ уйындары: “Минең ғаиләм”, “Өй”, “Был мин” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: Р.Ураҡсина “Был мин” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Плитаға яҡын барма!” , “Дарыуҙарға теймә!” һ.б. | Проект эше<br>Фотокүргәҙмә<br>“Минең ғаиләм” |
| 3-4 аҙна<br>“Минең тыуған ҡалам” | Баланы тыуған ауыл, ҡала, ҡасаба һәм уның атамаһы менән таныштырыу. Һәр кемдең үҙенең ауылы (ҡалаһы), өйө, урамы була. Беҙҙең исемдәр булған кеүек, һәр урамдың исеме бар. Урамдарҙың исеме, төп иҫтәлекле урындары менән таныштырыу. Ауылдарҙа өйҙәр тәпәш, ағастан, ә ҡалала өйҙәр бейек, бер нисә ҡаттан тороуын, улар кирбестән, таштан төҙөлгәнен аңлатыу.<br>Транспорт төрҙәре, һөнәрҙәр (сәс ҡырҡыусы, автобус йөрөтөүсе, шофер һ.б.) тураһында күҙаллауын үҫтереү. Уратып алған тирә - йүндең таҙалығы, тәбиғәте тураһында мәғлүмәт биреү. | Конструктив- модель эшмәкәрлеге<br>“Мин йәшәгән йорт” |

| | | |
|---|---|---|
| | Балала күҙәтеүсәнлек, иғтибарлылыҡ үҫтереү, уны солғап алған мөхитенә һаҡсыл ҡараш һәм яратыу тойғолары тәрбиәләү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Минең тыуған ҡалам”, “Ҡала урамдары буйлап” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Беҙ ниндәй ҡалала йәшәйбеҙ?”, “Һин ниндәй урамда йәшәйһең?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был нимә?”,”Айырып һал”,”Был ниндәй транспорт төрө?” һ. б.<br>Конструктив – модель эшмәкәрлеге: “Бейек һәм тәпәш өйҙәр”, “Төлкө менән ҡуянға өй төҙө”, “Өй йыһазы Маратҡа ни өсөн кәрәк? (өҫтәл, карауат, ултырғыс, диван) һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Мин йәшәгән йорт” һ.б.<br>Йәбештереү: “Күп ҡатлы өйҙәр” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйындар: “Автобуста ҡунаҡҡа барайыҡ”, “Әсәй эшкә китте” һ.б. (уйында үҙенә роль һайларға, уйынсыҡтарҙы сюжетта ҡулланырға өйрәтеү)<br>Нәфис әҙәбиәт: “Йорт” М. Дилмөхәмәтов, Р. Ураҡсина, Ә. Зиннурова һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Юл ҡағиҙәләре”, “Сит кешеләр!”, “Яңғыҙ өйҙә булғанда” һ.б. | |
| Ноябрь<br>1-2 аҙна<br>«Башҡортостан-гөлбостан»<br><br>“Дуҫлыҡ ептәре” | Башҡортостан, уның баш ҡалаһы Өфө тураһында тәүге төшөнсәләр биреү. Башҡортостанда төрлө һөнәр эйәләре эшләүе, күп милләтле халыҡ дуҫ, татыу йәшәүе тураһында мәғлүмәт биреү. Башҡорт милләтенә һөйөү тәрбиәләү. Тыуған яҡтың данлыҡлы кешеләре, балалар яҙыусылары Р. Ураҡсина, А. Йәғәфәрова ижады, йырсы, ҡурайсы А.Айытҡолов менән таныштырыу, иллюстрациялар ҡарау, ҡурайҙа төрлө көйҙәр тыңлау. Кешеләр үҙ-ара аралашып, ҡатнашып йәшәй һәм һәр саҡ билдәле бер тәртип ҡағиҙәләрен һаҡлай.<br>Баланы солғап алған мөхиткә, Башҡортостан тәбиғәтенә һаҡсыл ҡараш, һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Тыуған ерем”, “Ҡурай һәм ҡурайсылар”- виртуаль осрашыу һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Башҡортостан тураһында нимәләр беләһең?”һ.б.<br>Дидактик уйын: “Был ниндәй милләт?”, “Һүрәтте йый”, “Минең дуҫтарым”, “Был нимәнең өлөшө?”, “Һөйләү буйынса таны”, “Биҙәкте йый” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Алъяпҡыс”(баҫма ысулы) һ.б.<br>Йәбештереү: “Балаҫты биҙәү”, “Түбәтәйгә тәңкә таҡ” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Башҡорт ҡыҙы Сәлимә”, “Башҡорт малайы Азамат беҙгә ҡунаҡҡа килде”, “Сәйәхәт” һ.б. (уйындарҙы бер сюжетҡа ҡороп уйнау) һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Ҡурайға тиклем йүгер”, “Уйынсыҡтар менән бейе” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Дуҫ балалар” А.Ҡобағошов, “Ҡурай көйөнә бейеү” Ә. Сәлмәнова, “Беҙ - ағас ҡурсаҡтар” һ.б.<br>Конструктив- модель эшмәкәрлеге: “Төрлө өйҙәр” һ.б.<br>Дуҫлыҡ тураһында нәфис әҙәбиәт укыу: рус халыҡ әкиәте «Тирмәкәй», башҡорт халыҡ әкиәте «Ата ҡаҙ менән төлкө», слайд һүрәттәр ҡарау, уйындар уйнау, йырҙар йырлау, шиғырҙар өйрәнеү, сәхнәләштереү.<br>Хәүефһеҙлек: “Иғтибар, юл!”, “Тайғаҡ юлдар”, “Өйҙә яңғыҙ ҡалғанда” һ.б. | Күңел асыу сараһы<br>“Ҡурсаҡтар ҡунаҡта”<br><br>Проект эше<br>“Уйнайбыҙ ҙа йырлайбыҙ” |

| | | |
|---|---|---|
| 3-4 аҙна<br>“Әсә күңеле балала” | Әсәйгә ҡарата һөйөү, уны һаҡлау кеүек кешелек сифаттары тәрбиәләү. Әсәйҙәрҙең һөнәре тураһында тәүге мәғлүмәт биреү: тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, шәфкәт туташы, музыка етәксеһе, һатыусы, ашнаҡсы һ.б. Уларҙың эше, ҡоралы, эш һөҙөмтәһе тураһында һөйләшеү.<br>Ғаиләһе тураһында белемен камиллаштырыу. “Мин” образын формалаштырыу. Һин – ҡыҙ, һин – малай мәғлүмәтен биреү.<br>Балаға әсәй, өләсәй, инәй, апай, ҡыҙҙарға ҡарата ыңғай мөнәсәбәт хаҡында башҡорт халыҡ ижады өлгөләре (әкиәт, мәҡәл, йырҙар) аша еткереү. Малайҙарға ҡыҙҙарға иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу күнекмәләре формалаштырыу.<br>Балала иң яҡын кешеләренә һөйөү тәрбиәләү, яҡшы эштәр менән ҡыуандырыу теләге булдырыу. Өлкәндәр хеҙмәтен күҙәтеү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Балалар баҡсаһында кемдәр эшләй?”, “Шәфкәт туташы менән танышыу” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Әсәйең кем булып эшләй?”,“Әсәйгә ҡарата ниндәй тылсымлы һүҙҙәр беләһең? һ.б. Дидактик уйындар: “Әсәйгә ярҙам итәйек”, “Һөнәр эйәһенә эш ҡоралдарын һайла”, “Нимәнең күләгәһе?”, “Алтын битлек”, “Ниндәй предметтар йәшеренгән?”, “Ниндәй фигураға оҡшаған?” һ.б.<br>Йәбештереү: “Әсәйемә гөлләмә” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: Р. Ураҡсина “Әсәйем”, “Ҡурсағым”, Ф. Рәхимғолова “Беҙҙең әсәй”, Ф. Яхин “Тыңлауһыҙ ҡуян балаһы” һ.б.<br>Әүәләү: “Әсәйгә бауырһаҡтар” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Сәскәләр” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Әмирҙең әсәһенә бүләк” һ.б. (“лего-Дупло”).<br>Сюжет төҙөүсе уйындар: “Әсәйҙең байрамы”, “Әсәйҙәр – ҡыҙҙар”, ”Өләсәйҙә ҡунаҡта” һ.б. (үҙ - аллы уйын, роль һайларға өйрәнеү, уйынсыҡ йә уны алмаштырған предмет урынына роль башҡара белеү) һ.б.<br>Хәрәкәтле уйын: “Әсәйемә ярҙам итәм”, “Йомро икмәк” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Өйҙәге хәүефле ситуациялар”, “Һаҡ бул, плита” һ.б. | Фотокүргәҙмә:<br>“Минең һөйөклө әсәйем”<br>Концерт |
| Декабрь<br>1-2 аҙна<br>“Ҡышҡы селлә” | Ҡыш миҙгелендә йәнле, йәнһеҙ тәбиғәттең бер - береһе менән бәйлелеген төшөндөрөү.<br>Ҡыш тураһында баланың белемен киңәйтеү, ҡыштың үҙенсәлегенә иғтибар итеү: һауа торошон күҙәтеү, ҡояштың түбән йөрөүенә, ҡояш нурҙарының һаран булыуына, көндәрҙең һалҡынлығына, әсе ел иҫеүенә, буран сығып тороуына, ҡар яуыуына иғтибар итеү, күҙәтеү, тәбиғәт күренешенә аңлатмалар биреү. Балаға һаулығын нығытыуға һәм уларҙың хәүефһеҙлеген һаҡлауға иғтибарлы булыуҙарын аңлатыу (кешеләрҙең йылы кейенеүе, саф һауала сана шыуып уйнау, боҙҙа тайғаҡ, ҡар һыуыҡ һ.б.).<br>Ҡар менән тәжрибәләр үткәреү (ҡар һыуыҡ, еңел, аяҡ аҫтында шығыр - шығыр итеп шығырлай, ап - аҡ, йомшаҡ һ.б.). Бата – батмай, ярыла- ярылмай, өҙөлә - өҙәлмәй һ.б. төшөнсәләре менә таныштырыу.<br>Ҡышҡы тәбиғәт менән һоҡланыу тойғоһо уятыу, үҙгәрештәрҙе күрә белеүҙе камиллаштырыу | Проект эше<br>“Ҡарҙың үҙенсәлеге”<br><br>Ата- әсәләр менән эш:<br>“Ҡар – боҙҙан ҡоролмалар” |

| | | |
|---|---|---|
| | (үҫемлектәр, ҡоштар, йәнлектәр һ.б.).<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Ҡыш килде”, “Шыршы ҡунаҡҡа килгән” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Ҡышҡы уйындар тураһында һөйлә”, “Ҡыштың билдәләрен әйт” һ.б.<br>Дидактик уйын: “Сәлимәне тышҡа кейендерәбеҙ”, “Мин башлайым, һин дауам ит” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: Д. Юлтый “Ҡыш”, Ҡ. Әлибаев “Яуа - яуа еүеш ҡар”, “Аҡ ҡуян”, Г.Йыһангирова “Ап - аҡ ҡына ҡар яуа” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Ҡарҙар оса”, “Ҡар һәм боҙ”, “Аҡ ҡуян” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Беҙҙә тиҙҙән байрам” һ.б. (көндәлек тормоштан килеп сыҡҡан темаға уйын ҡороу, уйында төҙөлөш һәм тәбиғәт материалдарын ҡулланып уйнарға өйрәтеү).<br>Устар, бармаҡтар менән һүрәт төшөрөү: “Ҡарҙар яуа”, “Шыршы ҡупшы кейенгән” һ.б.<br>Эҙләнеү - тикшеренеү эшмәкәрлеге: “Ҡар менән тәжрибә”, “Ҡарҙың үҙенсәлеге” һ.б.<br>Бармаҡ уйындары: “Ағастар”, “Аҡ ҡуян” һ.б.<br>Уйын- ситуация: “Дуҫ булайыҡ” һ.б.<br>Йәбештереү: “Ҡар бабай” һ.б.<br>Әүәләү: “Ҡар малай” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге:“Һырғалаҡ” һ.б. (ҙур йомшаҡ модулдәр)<br>Хәүефһеҙлек: “Хәүефһеҙ ҡышҡы уйындар” , “Тайғаҡ юл!”, “Юлды ҡарап сыҡ” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Яңы йыл” | Яңы йыл байрамы тураһында төшөнсә биреү. Ата-әсәләр менән берлектә Яңы йыл сараһына әҙерләнеү: шиғырҙар, йырҙар өйрәнеү, уйындар уйнау, байрамға кейемдәр, шыршы уйынсыҡтары әҙерләү, видеофильмдәр, фотоһүрәттәр, йәнһүрәттәр һ.б. ҡарау. Яңы йыл байрамын үткәреү, балала байрам ҡыуанысы тыуҙырыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Ҡыш бабайҙың серле тоғо”, “Яңы йыл” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Яңы йыл уйынсыҡтарының, гирляндаларҙың ҡурҡыныс янауы ихтимал” , “Яңы йыл байрамына нисек өҙерләнәһең?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Уйынсыҡтар нимәнән эшләнгән?”, “Был уйынсыҡ нимәгә оҡшаған?”, “Ҡыш бабайҙың тунын тап”, “Нимә артыҡ?”, “Был кемгә кәрәк?” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Беренсе ҡар” Н.Нәжми, “Ҡыш бабай” Ә.Зинурова, “Яңы йыл килә” Г. Юнысованың “Ҡыш бабай”, Д. Юлтый “Ҡыш” һ.б.<br>Әүәләү: “Шыршы уйынсыҡтары әүәләйбеҙ” һ.б.<br>Йәбештереү: “Ҡыш бабай килде беҙгә”, “Шыршы” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Шыршы янында” (көндәлек теманан сығып уйын сюжетын булдырыу).<br>Һүрәт төшөрөү: “Байрам шыршыһына уйынсыҡтар” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Тундырам”, “Шалтырауыҡтар”, “Әйлән- бәйлән” һ.б.<br>Тәжрибә: “Ҡар ниндәй була?”<br>Хәүефһеҙлек: “Тимерҙе ялама”, “Юлда һаҡ бул!” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ҡар бабай” һ.б. (лего конструкторҙар менән эшләү) | Байрам<br>«Яңы йыл килә!»<br><br>Ата-әсәләр менән берлектә төркөмдө биҙәү<br>Күргәҙмә |

| | | |
|---|---|---|
| Ғинуар<br>1-2 аҙна<br>Каникулдар<br>3 - 4 аҙна<br>«Хайуандар донъяһы» | Йорт хайуандарын (ҡоштарын), ҡыр хайуандарын һәм уларҙың балаларын ысынбарлыҡта, һүрәттә, уйынсыҡтарҙа танырға өйрәтеү. Уларҙың тышҡы ҡиәфәте, кәүҙә төҙөлөшө, ҡышҡы йәшәйеше һәм туҡланыуы тураһында белем биреү, уларға хас булған сифатын һәм айырмалығын әйтергә өйрәтеү. Йорт, ҡыр хайуандарын, ҡоштарҙы төркөмләргә өйрәтеү. Йорт ҡоштары, хайуандарының ҡыш көнө йылы һарайҙа йәшәүен, кешеләрҙең улар тураһында хәстәрлек күреүҙәре, йорт малдарының кешегә файҙа килтереүе тураһында төшөнсә биреү. Ҡайһы бер хайуандарҙың тауыштарын отоп алып, ҡабатлап, телмәрен байытыу, сәхнәләштереү (бесәй - мыяулай, эт - өрә һ.б.), уларға ҡарата хәстәрлекле ҡараш тәрбиәләү. Ҡышлаусы ҡоштарға ҡаты һыуыҡтарҙа аҙыҡ табыуы ауыр булыуын аңлатыу, уларға ярҙам итеү теләген уятыу (тағараҡтар элеү, ем һалыу). Альбомдар, һүрәттәр ҡарап әңгәмәләр үткәреү, шиғырҙар, әкиәттәр уҡыу, уйындар уйнау.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Йорт хайуандары ҡайҙа йәшәй?”, “Ҡырағай хайуандар”, “Әсәйем ҡайҙа?” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Тирмәкәй” , “Ни өсөн бесәйҙәр өйҙә йәшәй?” әкиәте буйынса һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Йорт хайуандары өсөн ҡура” һ.б (призма, кирбес, пластина).<br>Йәбештереү: “Тауыҡ һәм себештәр” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ат”А. Йәғәфәрова, “Аҡтүш” А.Игебаев, “Һарыбай”, “Бүре менән кәзә” һ.б.<br>Башҡорт халыҡ уйыны: “Ҡоштар һәм ҡошсоҡтар”, ”Себештәр менән көтөүсе” һ. б.<br>Сюжет төҙөүсе уйындар: “Урманда”, “Өләсәйем ихатаһында” һ.б. (уйын өсөн кәрәкле атрибуттар һайлау, үҙ - аллы роль һайлап алып уйнау).<br>Дидактик уйындар: “Йәнлек, ҡоштарҙы ашат”, “Нимә ҡайҙа йәшәй?”, “Йәшәгән урынын тап” һ.б.<br>Бармаҡ уйыны: “Ҡуян”, “Төлкө”, “Ат” һ.б.<br>Уйын - күнекмә: “Бесәйемдең аяғы ауыртҡан...”, “Нимәнең тауышы?”<br>Хәрәкәтле уйындар:“Айыу һәм ҡуян”, ”Айыу, бүре”, “Турғайҙар һәм бесәй”, “Хайуандар уйнай” һ.б. Әүәләү: “Тирмәкәйҙә кем йәшәй?”<br>Һүрәт төшөрөү: “Бесәйгә йомғаҡ” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Һаҡ бул, эт!“ һ.б. | Проект эше<br>«Хайуандар донъяһы»<br><br>Акция<br>“Ҡоштарға ярҙам итәйек”<br>(өлкән төркөм балалары менән тағараҡтар элеү) |
| Февраль<br>1-2 аҙна<br>«Халҡым биҙәктәре» | Башҡорт халҡының кейем - һалымдары, һауыт - һабалары, биҙәктәре менән таныштырыу, тәүге күҙаллауҙар биреү. Уларҙың атамаһын иҫтә ҡалдырыу, дөйөмләштереү һүҙҙәре менән әйтеү. Кейем - һалым, һауыт - һабаның кеше тарафынан эшләнгәнен, зауыҡлы биҙәлгәнен, уларҙың көнкүреш йәшәү өсөн кәрәк булыуын балаға еткереү. Һүрәт - иллюстрациялар ҡарау (түбәтәй, камзул, ҡашмау, күлдәк), һүрәт төшөрөү дәрестәрендә башҡорт халыҡ биҙәктәре ярҙамында кейемдәрҙе, һауыт – һабаларҙы биҙәү, уйындар уйнау. Баланы бөхтәлеккә, үҙендә булған етешһеҙлекте күрә белергә һәм төҙәтергә күнектереү, өлкәндәр хеҙмәтенә ихтирам тәрбиәләү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Милли кейемдәге ҡурсаҡ”, “ Башҡорт халыҡ биҙәктәре ” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Һин ҡурсағыңды нисек кейендерҙең?”, “Мин башлайым, ә һин әйтеп бөтөр” һ.б. Дидактик уйындар: “Сәлимәне байрамға кейендер”, “Өләсәйем һандығы”, “Биҙәкте йый” һ.б. | Проект эше<br>“Башҡорт халҡының милли кейемдәре”<br><br>Ижади эш:<br>“Ҡурсаҡтың камзулына тәңкә баҫыу”<br>(баҫма техникаһы) |

| | | |
|---|---|---|
| | Уйын – ситуация: “Ҡурсағыма күлдәктәр” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: «Ҡурсаҡтың камзулына тәңкә баҫыу», “Түбәтәйҙе биҙә” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Сәлимә менән Марат ҡунаҡҡа килгән” һ.б. (күтәренке кәйеф, уйынға ҡыҙыҡһыныу уятыу, уйынды дауам итеп үҫтерергә өйрәтеү).<br>Тоҙло ҡамырҙан әүәләү: “Ҡартатайым түбәтәйе” һ.б.<br>Йәбештереү: “Милли кейемдәр” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ҡурсаҡҡа йорт йыһаздары” һ.б. (лего конструкторҙар)<br>Хәрәкәтле уйын: “Тирмә”, “Ҡурайға йүгер” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре: “Һаҡ бул - ваҡ биҙәүестәр”, “Осло әйберҙәр” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Ил һаҡсылыры” | Хәрби һөнәрҙәр менән таныштырыу. Тыуған илгә һөйөү уятыу. Башҡорт халҡының тыуған ерен һаҡлау тураһында төшөнсә биреү. Һалдат булған атайҙары, ағайҙары тураһында әңгәмә үткәреү. Ватан тураһында шиғырҙар, йырҙар өйрәнеү, фотоһүрәттәр ҡарау, уйындар унау. Атайҙар, ағайҙар өсөн бүләктәр әҙерләү. Беренсе гендерлыҡ күҙаллауҙы формалаштырыу (малайҙар көслө, ҡыйыу, Тыуған илдең буласаҡ һаҡсылары).<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Хәрби һөнәрҙәр”, М. Ғәли “Олатайҙың фотоһы” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Һин ҙурайғас һалдат булаһыңмы?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Хәрби һөнәрҙәр”, “Транспорт төрҙәре”, “Һүрәтте йый” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Самолет”, “Танк” һ.б. (лего конструкторҙан, ағас кубиктарҙан). Йәбештереү: “Танк”, “ Самолет” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: З. Акбутина “Атай кеүек булам мин”, Р. Ураҡсина “Атайым” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйындар: “Һалдаттар” (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү).<br>Уйын- күнекмә: “Нимәнең тауышы?”<br>Хәрәкәтле уйындар: “Марш”, “Һалдаттар” һ.б.<br>Әүәләү: “Самолеттар оса” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Атайым машинаһына юл” һ.б. | Байрам үткәреү<br>«Минең атайым – һалдат булған!»<br><br>Фотокүргәҙмә<br>“Минең атайым” |
| Март<br>1-2 аҙна<br>“Әсәләр нур сәсәләр” | Ғаилә ағзалары (әсәй, өләсәй, апай, һеңле һ.б.) тураһында мәғлүмәт биреүҙе дауам итеү. Ғаилә ағзаларының бер-береһен яратыуы, ярҙам итеүе, бергә дуҫ йәшәүҙәре тураһында аңлатма биреү. Әсәй иң яҡын кеше булыуын, уны ҡәҙерләргә, һаҡларға кәрәклеген балаларға төшөндөрөү. 8 март – әсәйҙәр, ҡыҙҙар байрамы тураһында төшөнсә биреү. Әсәйҙәр һөнәре менән таныштырыуҙы дауам итеү (уҡытыусы, төҙөүсе, табип һ.б. ). Әсәйҙәргә бүләктәр әҙерләү, альбомдар, фотоһүрәттәр ҡарау, уйындар уйнау. Уларға ҡарата ихтирам тойғоһо, һөйөү тәрбиәләү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Әсәйҙәр бер генә”, Ҡ.Әлибаевтың “Әсәй ҡайтты” шиғырын уҡыу һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “ Әсәй менән тәмле баллы сәй эсәм”, “Әсәйеңә нисек ярҙам итәһең?”<br>Дидактик уйындар: “Кем нимә эшләй?”, “Был нимә?” һ.б.<br>Ситуациялы һөйләшеү: “Әсәй өйҙә юҡ”, “Минең әсәйем ...” һ.б. | «Әсәйем-әсәкәйем» - Халыҡ ара ҡатын ҡыҙҙыр көнө байрамын үткәреү<br><br>Фотокүргәҙмә:<br>“Минең һөйөклө әсәйем”<br>Әсәйҙәрҙең ҡул эшенән күргәҙмә |

| | | |
|---|---|---|
| | Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Әсәйемә бүләк” һ.б. (лего дупло конструкторы)<br>Йәбештереү: “Әсәйҙәргә сәскәләр” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйындар: “Ҡунаҡ килә”, “Әсәйем иң матуры” һ.б. (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү). Сюжеттәрҙә бәйләнеште аңлатыу әсәй- ҡыҙ, табип – больница, шофер – пассажир.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Беҙҙең әсәй” Ф.Рәхимғолова, “Минең әсәйем кем?” һ.б.<br>Бармаҡ уйыны: “Бутыр - бутыр”, “Минең ғаиләм” һ.б.<br>Әүәләү: “Әсәйемә бауырһаҡтар” һ.б. Һүрәт төшөрөү: “Әсәйемә сәскәләр” (баҫма техникаһы) һ.б. Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, плита!”, “Ярамаған әйберҙәр”, “Осло әйберҙәр” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>«Халҡым көнкүреше»<br><br>“Хаҡым йолалары һәм ғөрөф - ғәҙәттәре» | Йорт хайуандары (ат, һыйыр) һәм ҡоштар (ҡаҙ, өйрәк) уларҙың балалары тураһында белем биреүҙе дауам итеү, нығытыу, уларҙың кешеләргә файҙаһы тураһында һөйләү. Ҡорот яһау, киптереү, ҡош - ҡорт үҫтереү тураһында белем биреү. Һүрәттәр, видеояҙмалар ҡарау, ололарҙың һөйләүен ойоштороу. Башҡорт халҡының борондан килгән шөғөлдәре: малсылыҡ, йылҡысылыҡ менән таныштырыу. Башҡорт халҡының боронғо шөғөлдәренең береһе атҡа бәйле булыуы, ат тәрбиәләү, һыбай йөрөү хаҡында һөйләү. Ир балаларға һөнәр, хужалыҡ эштәре хаҡында аңлатыуҙар, эшкә йәлеп итеү.<br>Халыҡ йолалары: балаға исем ҡушыу, бишек туйы, бәпес ашы менән таныштырыу. Үҙенә генә хас булған уйындар, ғәҙәттәр, әйтемдәр, йырҙар, халыҡ музыка ҡоралдары тауышы, бейеүҙәр, ауыҙ – тел ижады (йомаҡ, һанашмаҡ, әүрәткес һ.б.) менән таныштырыу. Үҙ милләтенең ғөрөф - ғәҙәтенә, йолаһына, тарихына, мәҙәниәтенә ихтирам тәрбиәләү. Олатай, өләсәй, атай, әсәй, ағай, апай һүҙҙәренең мәғәнәһен төшөндөрөү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Башҡорт халыҡ шөғөлө - малсылыҡ”, “Исемем затлы” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Атай нимә эшләй?”, “Мин ярҙамсы...” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Һөттән нимә эшләнә?”, “Нимә ҡайҙа йәшәй?”, “Хайуандарҙы һыйлайыҡ”, “Киреһен әйт” һ.б.<br>Уйын- ситуация: “Һыйырҙың балаһы” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ҡура”, “Бал ҡорттары” һ.б. (призма, кирбес, пластина, ваҡ уйынсыҡтар, өлгө буйынса)<br>Һүрәт төшөрөү: “Балаҫты биҙә ”, “Таҫтамалға биҙәк һал” һ.б.<br>Йәбештереү: “Ситеккә биҙәктәр”, “Матур биҙәкле балаҫ” һ.б.,<br>Нәфис әҙәбиәт: “Тирмәкәй”, “Йомро икмәк” әкиәте Ат”А. Йәғәфәрова, “Аҡтүш” А.Игебаев, әкиәттәр:“Һарыбай”, “Бүре менән кәзә” һ.б.<br>Башҡорт халыҡ уйыны “Ҡоштар һәм ҡошсоҡтар”, ”Себештәр менән көтөүсе” һ. б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Сәлимә май бешә”, “Тыуған көн” һ.б. (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү). | Сюжетлы уйын:<br>“Малсылыҡ”<br><br>Проект эше<br>“Башҡорт халҡының көнкүреше”<br><br>Альбомдар эшләү |

| | | |
|---|---|---|
| | Бармаҡ уйындары: “Ат” һ.б.<br>Уйын- күнекмә: “Нимәнең тауышы?” һ.б.<br>Әүәләү: “Ҡорот” , “Тирмәкәйҙә кем йәшәй?” һ.б. | |
| Апрель<br>1-2 аҙна<br>“Яҙ килә” | Яҙ миҙгеле тураһында белем биреү. Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт араһындағы ябай бәйләнеште күрә белергә өйрәтеү (һауа торошоноң үҙгәреүе, көндәр йылына, ҡояш нығыраҡ ҡыҙҙыра, тәүге сәскәләр, үләндәр үсеп сыға һ.б.). Бөжәктәр (ҡамҡа, ҡырмыҫҡа, күбәләк һ.б.), хайуандар һәм ҡоштарҙың ҡылыҡтары һ.б. менән таныштырыу. Баҡсалағы яҙғы эштәр. Тирә – яҡ яҙғы тәбиғәт менән бәйле иллюстрациялар, альбомдар, һүрәттәр, бағышһүрәттәр ҡарау. Тәбиғәттә үҙ – үҙеңде тотоу, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен нығытыу. Өлкәндәр хеҙмәтенә, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүҙе дауам итеү.<br>Нәфис әҙәбиәт:“Сәскәләр һәм күбәләктәр” Л. Мирза, “Сәскә менән күбәләк” М. Дилмөхәмәтов,<br>Р. Ғәрипов “Сыйырсыҡ”, “Ҡояш көлә” Ғ.Ғәлиева, “Ләйсән ямғыры”, “Бәпембә балалары” һ.б.<br>Яҙ миҙгеленә ҡағылған ауыҙ – тел ижады менән таныштырыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Яҙ килә”, “Хайуандар һәм ҡоштар” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог:“Ниндәй сәскәләрҙе беләһең?”, “Ниндәй бөжәктәрҙе беләһең?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Нимә ҡайҙа йәшәй?”, “Сәскәне йый” һ.б.<br>Уйын- фантазия: “Нимә эшләйем әйтмәйем, ә күрһәтәм” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Ҡояш һәм ямғыр”,”Беҙ күңелле балалар” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Төрлө төҫтәге болон”, “Бәпембәләр”, “Йәйғор” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ҡоштарға өй”, “Турғай” һ.б. (лего конструкторҙар, ағас кубиктар).<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Урманда” һ.б. (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү).<br>Бармаҡ уйындары: “Ҡояш”, “Ҡоштар”, “Күбәләк” һ.б.<br>Уйын- күнекмә: “Нимәнең тауышы?”.<br>Әүәләү: “Серле боҙбармаҡтар”, “Ҡояш нурҙары” һ.б.<br>Йәбештереү: “Яңы күлдәк кейә ағастар”, “Һабан турғайы”һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, тайғаҡ юл!”, “Һаҡ бул, талпан!”, “Боҙбармаҡты ашама!” һ.б. | Фотокүргәҙмә<br>“Яҙҙың биҙәктәре”<br><br>Проект эше<br>“Бөжәктәр” |
| 3-4 аҙна<br>“Китап – белем шишмәһе” | Балаға китаптар тураһында мәғлүмәт биреү. Балалар яҙыусылары Р. Ураҡсина,<br>А. Йәғәфәрова, Г. Юнысова менән таныштырыу. Төркөм бүлмәһендә балалар яҙыусылары буйынса китаптаптар күргәҙмәһе ойоштороу. Китаптар, бағышһүрәттәр ҡарау. Ата-әсәләр менән бергә “Китап дауаханаһы” төҙөү, бәләкәй китапсыҡтар эшләү. Китапҡа ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Китап- белем шишмәһе”, “Китап нисек барлыҡҡа килә?” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Китаптар ҡайҙа йәшәй?”, “Китапты дауалайыҡ” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Һүрәтте таны”, “Һүрәт буйынса һөйлә” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Китап кәштәһе” һ.б. (модуль һәм ҙур конструкторҙар). | Күргәҙмә<br><br>“Китап дауаханаһы” төҙөү<br><br>Бәләкәй китапсыҡтар эшләү |

| | | |
|---|---|---|
| | Йәбештереү: “Минең китабым” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ат”А. Йәғәфәрова, “Аҡтүш” А.Игебаев, “Һарыбай”, “Бүре менән кәзә” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Китапхана” һ.б. (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу).<br>Уйын- күнекмә: “Нимәнең тауышы?”<br>Хәрәкәтле уйындар: “Айыу һәм ҡуян”,”Айыу, бүре”, “Турғайҙар һәм бесәй”, “Хайуандар уйнай” һ.б. Әүәләү: “Әкиәт геройҙары”.<br>Һүрәт төшөрөү: “Минең тәүге китабым” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Осло әйберҙәр”, “Светофор минең дуҫым” һ.б. | |
| Май<br>1-2 аҙна<br>“Еңеү яҙы”<br><br>«Батырҙар ил күрке» | Еңеү байрамы тураһында тәүге төшөнсә биреү. Патриотик тәрбиә биреү. Тыуған илгә һөйөү, һуғыш ветерандарына хөрмәт тәрбиәләү. Балаларҙы Салауат Юлаевтың бала сағы менән таныштырыу. Шиғырҙар, йырҙар өйрәнеү, альбомдар, һүрәттәр, фотоһүрәттәр ҡарау. Уның көслө, ҡыйыу булыуы, тәбиғәтте яратыуы тураһында һөйләү. Уға оҡшарға тырышыу тойғоһо үҫтереү. Салауаттың бала саҡта уйнаған уйындары менән таныштырыу. Баланың «Мин» концепцияһын формалаштырыу. Балалар баҡсаһында, төркөмдә үҙ - үҙеңде тотоу ҡағиҙәһен үтәү, тәрбиәсенең тәнҡитенә һәм тәҡдименә тәьҫир итеү. Малайҙарҙа ҡыйыулыҡ, көслөлөк батырлыҡ, сослоҡ сифатын тәрбиәләү.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “9 май - Еңеү көнө” .<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Еңеү яҙы”, “Салауаттың бала сағы” А.Ғалиндың картинаһын ҡарау һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Кем ул һуғыш ветераны? ”, “ Нимә ул һуғыш?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Айырып һал”, “Ниндәй транспорт?” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Танк” (лего, ағас конструкторҙар менән, һүрәт буйынса төрлө моделдәр төҙөү) һ.б.<br>Йәбештереү: “Олатайыма бүләк”, “Самолеттар”һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Малаймы, ҡыҙмы?” Степан Злобин.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Һалдаттар”, “Һаҡсылар” һ.б. (үҫтереүсе предметлы мөхиттә эшмәкәрлек).<br>Бармаҡ уйындары: “Ғаилә”, “Ат” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Атта сабышыу”, “Һыбайлылар” һ.б.<br>Әүәләү: “Танк” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Еңеү салюты” (бармаҡ, мамыҡ таяҡсалар ярҙамында) һ.б. | Байрам<br>“Еңеү көнө”<br><br>Концерт<br><br>Фотокүргәҙмә<br>“Еңеү яҙы” |
| Май<br>3 аҙна<br>“Ер - йәшәгән урыныбыҙ!” | Тыуған ил, тыуған ер тураһында баланың күҙаллауын үҫтереүҙе дауам итеү. Ер тураһында әңгәмә үткәреү, шиғырҙар, йырҙар өйрәнеү, фотоһүрәттәр ҡарау, урамда, юлда, тәбиғәттә үҙ–үҙеңде тотоу ҡағиҙәһен нығытыу. Тыуған яҡта үҫкән 2-3 ағас төрө (ҡайын, шыршы, уҫаҡ), шифалы үҫемлектәр (мәтрүшкә, кесерткән, юл япрағы, балан, миләш) һәм бүлмә гөлдәре тураһында төшөнсә биреү. Уларҙың төҙөлөшөн (олоно, япрағы, ботағы, сәскәһе) аңлатыу. Ҡайһы бер орлоҡтарҙың тышҡы | Проект эше:<br>“Шифалы үҫемлектәр”<br><br>Эҙләнеү - тикшеренеү |

| | | |
|---|---|---|
| “Йәшеллек донъяһы”<br><br>Мониторинг<br>4 аҙна | күренешен ҡарау (борсаҡ, ҡыяр, ҡабаҡ, кишер һ.б.) һәм сәсеү. Үҫемлектәргә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Һүрәттәр буйынса ңҫемлектәрҙе таныу, атамаларын әйтеү. Фекерләү һәләтен байытыу. Иғтибар туплау, тасуири һөйләү һәләтен үҫтереү.<br>Тәрбиәле булыу, балалар баҡсаһында, урамда, өйҙә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәһен теүәл үтәү һәм баланың үҙ - аллы уйынын, тиҫтерҙәре менән бергә уйынын хуплау.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Ниндәй үҫемлек?”, “Тыуған еремдең ағастары” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Паркта нимәләр үҫә?”, “Һинең өйөң янындағы ағастар?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Исемен ата”, “Был нимәгә оҡшаған?”, “Нимә ҡайҙа үҫә?” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Тыуған илем” А.Кәрим һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Урманда” һ.б. (үҙ - ара ыңғай мөнәсәбәт яйлау, баланың уйнау теләген булдырыу һәм үҙенә атрибутты һайлап алырға өйрәтеү).<br>Бармаҡ уйыны: “Ғаилә” һ.б. Уйын- күнекмә: “Һүрәттә нимә төшөрөлгән?” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Осто – осто”, “Йәшерәм яулыҡ”, “Йылға аша үт” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Ярай, ярамай!”, “Һаҡ бул, талпан!” һ.б. | эше:<br>“Борсаҡ үҫтереү” |

**Уртансы төркөм өсөн яҡынса комплекслы тематик план**
**(4-5 йәш)**

| Темалар | Йөкмәткеһе | Йомғаҡлау сараһы |
|---|---|---|
| Сентябрь<br>1аҙна<br>Мониторинг<br>Белем илендә<br>“Һаумы баҡсам” | Балалар баҡсаһы менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаларҙың иғтибарын балалар баҡсаһындағы үҙгәрештәргә йәлеп итеү (уңыш йыйыу, баҙға һалыу, һатыуға сығарыу). Балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре тураһында белемдәрен киңәйтеү (музыка етәксеһе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, шәфҡәт туташы, урам һепереүсе, ашнаҡсы һ.б.). Һөнәрҙәр тураһында танышытырыу. Ғаилә ағзалары кем булып эшләүҙәре тураһныда әңгәмә ҡороу. Баланың мәктәпкә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү, китапҡа һөйөү тәрбиәләү. Балалар араһында бер – береһенә ҡарата дуҫлыҡ мөнәсәбәтен формалаштырыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Белем иленә сәйәхәт”, “Һаумы баҡсам” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Йәйге ялды нисек үткәрҙең?” һ.б.<br>Сюжетлы - ролле уйындар: “Больница”, “Балалар баҡсаһы” һ.б. (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, бергә уйнауға булышлыҡ итеү).<br>Хәрәкәтле уйындар: “Беҙ спортсылар”, “Күңелле бала саҡ” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт укыу: “Нимә яҡшы була” В.Асеева,“Йылы һүҙ” М.Дилмөхәмәтов һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Тылсымлы һүҙҙәр”,”Дуҫыңды тап” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул,юл!”, “Светофор”, “Сит кешеләр!” һ.б. | Мониторинг |
| 2 аҙна | Светофор төҫтәрен өйрәнеүҙе дауам итеү. Саф һауала йөрөгәндә (ҡом һәм һыу, ваҡ әйберҙәр менән | |

| | | |
|---|---|---|
| Мониторинг<br>Хәүефһеҙлек донъяһы | уйнағанда), бина эсендә (баҫкыстан төшкәндә, күтәрелгәндә тотоноу) хәүефһеҙлек нигеҙҙәрен камиллаштырыу. Хәүефһеҙлек менән бәйле шиғырҙар укыу, һүрәттәр, плакаттар, бағышһүрәттәр, видеояҙмалар ҡарау, әңгәмәләр үткәреү<br>Полиция хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү, актив телмәрҙә һөнәр менән бәйле һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙы формалаштырыу.<br>Тәбиғәттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү: таныш булмаған бәшмәктәрҙе, емештәрҙе ашамаҫҡа, хайуандарға теймәҫкә, төркөмдән айырылмаҫҡа .<br>Балалар менән хәүеф янаған ситуациялар тураһында әңгәмәләшеү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: "Полиция", "Светофор минең дуҫым" һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: "Яңғын сыҡҡанда нимә эшләргә?", "Урамдағы уйындар нимәгә килтерә?"<br>Сюжетлы-ролле уйындар: "Автомобиль", "Мин- полиция"һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: "Беҙ спортсылар", "Айыу менән бал ҡорттары" һ.б.<br>Дидактик уйындар: "Светофорҙың төҫтәре", "Юл билдәләрен айыр" һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: С.Маршак "Аңғыра сысҡан балаһы" һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: "Ят кешеләр менән аралашыу", "Һаҡ бул, асыҡ тәҙрә, балкон" һ.б. | Мониторинг<br>Папка йәймә<br>Үҫтереүсе предметлы мөхитте байытыу |
| 3-4 аҙна<br><br>«Көҙһылыу» | Тыуған яҡтың көҙ миҙгеле билдәләрен асыҡлауҙы дауам итеү. Көҙ миҙгеленең матурлығын күрә белергә, тәбиғәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын, инициативаһын баһаларға, тәбиғәт объекттары һәм күренештәре араһындағы бәйләнешкә һығымта яһарға өйрәтеү.<br>Тәбиғәттә хәүефһеҙлек һаҡлау буйынса күҙаллауын киңәйтеү. Тәбиғәткә һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүҙе камиллаштырыу. Тәбиғәттә үҙ - үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен формалаштырыу (сәскәләрҙе өҙмәҫкә, ағастарҙың ботаҡтарын һындырмаҫҡа, хайуандарҙы борсомаҫҡа, сүп-сар ҡалдырмаҫҡа һ.б.). Саф һауала күҙәтеүҙәр. Иллюстрациялар, видеофильмдар, слайдтар ҡарау. Экологик һуҡмаҡ буйынса сәйәхәт. Түңәрәк уйындары уйнау, йырҙар өйрәнеү. Шиғырҙар ятлау, йомаҡтар сисеү, көҙ билдәләре буйынса халыҡ әйтемдәрен өйрәнеү.<br>Йәнһеҙ тәбиғәт: тәбиғәт календарында һауа торошон билдәләргә (һыуыҡ, йылы, эҫе, ҡояшлы, болотло, ямғыр яуа, ел иҫә) һәм һауа торошона ярашлы кейенергә өйрәтеү. Баланың күҙәтеүсәнлеген, ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү (ямғыр, йәшен, йәйғор, көндәр һалҡынайта, йыш ямғыр яуа, ағастың япраҡтары һарғайып ҡойола, күбәләктәр юҡ булды, сәскәләр һулыны һ.б.),тәбиғәт - климат шарттарының төрлө булыуы тураһында тәүге күҙаллауын формалаштырыу (урман, тайга, дала, арктика, антарктика). Ҡайһы бер тәбиғәт күренештәре менән таныштырыу(цунами, ер тетрәү һ.б.). Һыу, ҡар, балсыҡ, ҡомдоң үҙенсәлектәре тураһында мәғлүмәт биреү. Йәшелсә – емештәр, бәшмәктәр тураһында йомаҡтар уйлап сығарыу.<br>Үҫемлектәр донъяһы һәм бәшмәктәр: үҫемлектәрҙе, өлөштәрен (һабағы, япрағы,сәскәһе, орлоғо, емеше) таныу, атамаһын белеү, уларҙың үҫешенә ер, һыу, һауа кәрәклеген аңлатыу, үҫемлектәрҙе төркөмләү буйынса белемен тәрәнәйтеү һәм классификацияларға өйрәтеү : емеш, йәшелсә, еләк( урман- баҡса), сәскәләр, ҡыуаҡлыҡтар, ағастар(урман-баҡса). Ҡайһы бер ашарға яраҡлы, яраҡһыҙ | Күңел асыу сараһы:<br>"Икмәк – бөйөк хазина"<br><br>Проект эше<br>"Беҙ - китап биҙәүселәр"<br><br>Көҙ темаһына күргәҙмә эштәре |

| | | |
|---|---|---|
| | бәшмәк менән таныштырыу. Иген игеүселәрҙең баҫыуҙағы эштәре (урып йыйыу, элеваторға оҙатыу). Бойҙай, һоло, арпа һ.б. бөртөклө үҫемлектәрҙе айырыу, уларҙан әҙерләнгән ризыҡтар (икмәк, бауырһаҡ, талҡан, ҡыҫтыбый) тураһында мәғлүмәт биреү.<br>Хайуандар донъяһы: йорт хайуандарының һәм уларҙың балалары тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү, нимә ашайҙар, кешегә ниндәй файҙа килтерә, кеше уларҙы нисек тәрбиәләй, хайуандарҙың кеше хәстәрлегенә мохтаж булыуын аңлатыу. Ҡырағай хайуандарҙың уларҙың үҙенсәлекле сифаттары буйынса баланың күҙаллауын киңәйтеү (холҡо, йәшәү урыны, ашарға табыу, дошмандан һаҡланыу юлы, нисек ҡышҡа әҙерләнеү буйынса). Ҡайһы бер бөжәктәр (ҡырмыҫҡа, күбәләк, ҡуңғыҙ һ.б.) менән таныштырыу, ни өсөн берәүҙәре оса, ә икенселәре осмай һ.б. Күсәр ҡоштарҙың (сыйырсыҡ, һандуғас, кәкүк һ.б.) ни өсөн йылы яҡҡа осоп китергә мәжбүр булыуҙарын аңлатыу.<br>Көҙ миҙгеленең мәлдәрен – "Алтын көҙ", "Әбейҙәр сыуағы", "Сөмбөлә", рәссамдарҙың һүрәттәре, тәбиғәткә сәйәхәт иткәндә тойоу, күрә белеү. Нәфис әҙәбиәт, сәнғәт аша тыуған яҡтың матурлығын, хозурлығын белеүгә өлгәшеү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: "Көҙгө урман", "Үҫемлектәр үҫһен өсөн нимә эшләргә кәрәк?" һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: "Көҙ тураһында нимәләр беләһең?", "Бөжәктәр" һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: "Төҫлө япраҡтар", "Ҡояш һәм ямғыр" һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: "Көҙгө урман" А.Йәғәфәрова, "Көҙ килде" М.Ғәли, "Урман" С.Әлибаев, "Көҙ килгән" Г.Юнысова һ.б.<br>Дидактик уйындар: "Был ниндәй йәшелсә?", "Бәшмәкте таны?", "Айырып һал", "Серле моҡсай" һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: "Ярай, ярамай" , "Тәбиғәттә үҙ – үҙеңде тота белеү ҡағиҙәләре", "Ут- ҡурҡыныс" һ.б. | |
| Октябрь<br>1-2 аҙна<br>"Мин һәм минең ғаиләм" | Ғаилә тураһында күҙаллауын үҫтереү.<br>Сәләмәт йәшәү рәүешен һәм әҙәп – гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереүҙә башланғыс төшөнсәләр биреүҙе дауам итеү. Тән ағзалары, үҙ - үҙеңде тәрбиәләү буйынса гигиеник күнекмәләр формалаштырыу. Гендер тәрбиәһе буйынса күҙаллау үҫтереү, үҙенең ғаилә ағзалары буйынса төшөнсәләрҙе формалаштырыу: улы, ҡыҙы, атаһы, әсәһе һ.б. Үҙҙәренең исем- фамилияһын, ата-әсәләренең исемдәрен нығытыу. Ата-әсәләрең һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Яҡындарының хеҙмәтенә, һөнәренә ихтирам тәрбиәләү, өй эштәрендә ярҙам итеүгә теләк уятыу, балаларҙың яҡындарының хәленә инә белергә өйрәтеү.<br>Күргәҙмә ойоштороу "Минең ғаилә ағасым", альбомдар, бағышһүрәттәр ҡарау.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: "Ғаиләм-ҡәлғәм", "Мин" образы һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: "Ғаиләң тураһында һөйлә" һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: Г. Юнысова, Р.Ураҡсинаның шиғырҙары, Ә. Зиннурованың "Был- мин".<br>Сюжетлы -ролле уйындар: "Ғаилә" һ. б. (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу). | Проект эше<br>"Мин һәм минең ғаиләм"<br><br>Фотокүргәҙмә<br>"Минең ғаиләм" |

| | | |
|---|---|---|
| | Дидактик уйындар: “Ғаилә ағзаларын дөрөҫ әйт” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Минең ғаиләм” һ.б.<br>Бармаҡ уйындары: “Минең ғаиләм” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Мин өйҙә яңғыҙ”, “Өйҙәге хәүефле ситуациялар” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Минең тыуған ҡалам – Сибай!” | Тыуған ҡала һәм уның иң матур, иҫтәлекле урындары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балала илһөйәрлек рухы , тыуған яҡҡа һөйөү , тыуған ҡалабыҙ - Сибай тарихына һәм мәҙәниәтенә, уның иҫтәлекле урындарына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.<br>Транспорт төрҙәре һәм юл ҡағиҙәләрен өйрәтеү. Ҡалала үҙ – үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре тураһында белемен киңәйтеү. Ҡала кешеләре һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балалар баҡсаһы янындағы йәмғиәт биналары: мәктәп, театр, больница, уларҙың тәғәйенләнеше, унда эшләгән кешеләрҙең хеҙмәтенең кәрәклеген, арҙаҡлы шәхестәрҙең (Ф. Белов һ.б.) хеҙмәтен ҙурлау, уларға ҡуйылған һәйкәлдәр, урамдарға исемдәре бирелеүен төшөндөрөү. Арҙаҡлы шәхестәрҙең портреттарын ҡарау. Баланы уратып алған мөхиттең таҙалығы, тирә-яғындағы үҫемлектәр, һыуҙар йылғалар тураһында мәғлүмәттәр биреү.Тыуған яҡ тураһында нәфис әҙәбиәт укыу, шиғырҙар ятлау.Балалар баҡсаһын уратып алған социаль объекттарға экскурсиялар.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Минең яратҡан ҡалам – Сибай”, “Ҡаламдың иҫтәлекле урындары”, “Еңеү паркы”һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Сибай ҡалаһы тураһында нимә беләһең?”, “Һин ниндәй урамда йәшәйһең?” һ.б.<br>Сюжетлы–ролле уйындар: “Транспорт”, “Бөҙрәхана”, “Больница”, “Полиция”, “Магазин” һ.б. (уйынға ҡыҙыҡһыныу уятыу, атрибуттар һайлау, уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу) һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Йәшәгән урамыңды тап” ,“Беҙҙең ҡала ҡунаҡтары”, “Ҡала буйлап сәйәхәт”, “Ҡала”, “Пазл”, “ Сибай ҡалаһында иҫтәлекле урындар”, “Һүрәтте таны”, “Лабиринт”, “Домино” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Сибай”, “Транспорт”, “Ғаилә”, “Бөҙрахана”, “Магазин” һ.б.<br>( атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу).<br>Конструктив-модель төҙөү: “Дуҫтарым өсөн “Нефаз”автобусы” (оригами ).<br>Хәрәкәтле уйындар: “ Таш арыҫлан”, “Горелка”, “Түңгәктән түңгәккә барам” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “ Еңеү паркы”( коллектив эш), “Таусылар проспекты” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: Ф.Рәхимғолова “Дуҫлыҡ”, Н.Сәлимов “Башҡорт теле” һ.б.<br>Йәбештереү: “Сибай ҡалаһы символикаһы” , “Калам урамдары” һ.б.<br>Әүәләү: “Еңеү паркы” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Юлда һаҡ бул!”, “Берәҙәк эттәр!”, “Асыҡ тәҙрә” һ.б. | Фотокүргәҙмә<br>“Тыуған ҡалам”<br>Альбомдар<br>Проект эше<br>Квест уйыны<br>Викторина |
| Ноябрь<br>1-2 аҙна<br>«Башҡортостан - | Балаға “Бәләкәй тыуған ил” төшөнсәһен һеңдереү. Баланың йәшәгән урыны (ауыл, ҡасаба, ҡала), уның атамаһы, ул ерҙең Башҡортостандың бер өлөшө булыуын аңлатыу. Башҡортостанда йәшәгән халыҡтар, уларҙың теле, дуҫ йәшәүҙәре, төрлө тармаҡтарҙа эшләүҙәре тураһында тәүге | Виртуаль сәйәхәт:<br>«Беҙҙең йәнтөйәк» |

| | | |
|---|---|---|
| гөлбостан!»<br><br>“Дуҫлыҡ ептәре” | төшөнсәләр биреү. Башҡорт теленә ҡарата ихтирам тәрбиәләү, башҡортса саф матур итеп һөйләшергә ынтылдырыу. Балаға уның ошо милләтең бер вәкиле, уны дауам иттереүсе икәнлеген аңлатыу. Төрлө милләт халыҡтарының бер-береһенән теле, ашы, йолаһы һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән айырылыуын билдәләү. Ауыҙ-тел ижады һәм сәнғәт аша дуҫлыҡ хисе, татыулыҡ, илһөйәрлек тойғоһон тәрбиәләү.<br>Башҡортостандағы арҙаҡлы шәхестәре (Ш.Хоҙайбирҙин, М.Фәйзи), балалар яҙыусылары менән танышыу,уларҙың хеҙмәтен ҙурлау, уларға һәйкәлдәр ҡуйылыуы, урамдарға исемдәре бирелеүен төшөндөрөү. Уларҙың портреттарын ҡарау, хеҙмәт кешеләренә ихтирам тәрбиәләү. Башҡортостан картаһын, энциклопедиялар, иллюстрациялар, фотоһүрәттәр, открыткалар ҡарау.<br>Тыуған яҡта үҫкән үҫемлектәр, йәнлектәр, ҡоштар тураһындағы белемен киңәйтеү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр:“Башҡортостан тәбиғәте”,”Башҡортостан - дуҫлыҡ иле” - интерактив – үҫтереүсе сәйәхәт.<br>Үҫтереү диалог: “Һинең дуҫтарың кемдәр?”, ” Ниндәй символикаларҙы беләһең?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Ҡурсаҡты йый”, ”Кейеменән таны”, ”Кем ҡайҙа йәшәй?” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар:“Трансопорт”, “Ғаилә”, “Бөҙрахана” һ.б.( атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу).<br>Конструктив - модель төҙөү: “Дуҫтарым өсөн автобус (оригами ).<br>Һүрәт төшөрөү: “Тыуған яҡ тәбиғәте”һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: Ф.Рәхимғолова “Дуҫлыҡ”, Н.Сәлимов “Башҡорт теле”һ.б.<br>Йәбештереү: “Түбәтәй” ,”Башҡорт флагы” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Юлдағы хәүефһеҙлек”, ”Светофор”,”Электроприборҙар” һ.б. | Альбом төҙөү:<br>“Каламдың арҙаҡлы шәхестәре”<br><br>Проект эше<br>“Башҡорт халҡының милли ашы” |
| 3 - 4 аҙна<br>“Әсә күңеле балала” | Әсәйгә ҡарата һөйөү, уны һаҡлау кеүек кешелек сифаттары тәрбиәләү. Әсәйҙәрҙең һөнәрҙәре тураһында мәғлүмәттәр биреү: табиб, сәс ҡырҡыусы, ашнаҡсы, һатыусы һ.б. Уларҙың эш ҡоралдары тураһында белемдәрен киңәйтеү. Әсәйҙәргә ҡарата һөйөү тәрбиәләү, хәстәрлекле ҡараш үҫтереү. Баланың өйҙә ярҙамсы икәнен аңлатыу һәм ҡыҙыҡһындырыу. Әсәйҙәр тураһында йырҙар өйрәнеү, шиғырҙар ятлау, уйындар уйнау. Балаға әсәй, өләсәй, инәй, апай, ҡыҙҙарға ҡарата ыңғай мөнәсәбәт хаҡында башҡорт ижады өлгөләре (әкиәт, мәҡәл, әйтем, легенда, йырҙар) Балаға халыҡ мәҡәлдәре, ҡанатлы һүҙҙәр тураһында белемдәр биреү.аша еткереү. Малайҙарҙы ҡатын-ҡыҙҙарға иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға өйрәтеү. Балала иң яҡын кешеләренә һөйөү тәрбиәләү, яҡшы эштәр менән ҡыуандырыу теләге үҫтереү<br>Экскурсиялар ваҡытында тормош хәүефһеҙлеген һаҡлау ҡағиҙәләрен нығытыу. Ғаилә тураһында белемдәрен камиллаштырыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Әсәйем- ҡәҙерлем”, “Әсәй менән гөл ултырттыҡ” ,“Балалар баҡсаһында кемдәр эшләй?”.һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Һин әсәйеңә нисек ярҙам итәһең?” , “Әсәйеңде нисек ҡотлар инең?” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Минең әсәйем иң матуры”, “Әсәйемдең һөнәре” һ.б. | Фотокүргәҙмә<br>“Минең әсәйем”<br><br>Оҫтахана<br>Күргәҙмә |

| | | |
|---|---|---|
| | Йәбештереү: “Әсәйемә бүләккә” һ.б.<br>Әүәләү: “Әсәйгә бүләккә мимозалар”.<br>Сюжетлы-ролле уйындар: “Ғаилә”, “Бөҙрәхана” һ.б. .( атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу).<br>Хәрәкәтле уйын: “Кем тиҙерәк аш бешерә” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Серле тоҡ”, “Әсәйем һөнәре”, “Был предмет кемгә кәрәк?”, “Ярай- ярамай” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул,осло әйберҙәр!”, “Һаҡ бул, эҫе плита” , “Юл билдәләре” һ.б. | |
| Декабрь<br>1-4 аҙна<br>«Ҡышҡы селлә» | Ҡыш тураһында баланың белемен киңәйтеү.Ҡыш миҙгелендә йәнле йәки йәнһеҙ тәбиғәттең бер-береһе менән бәйлелеген төшнөдөрөү. Һауа торошон билдәләй, аңлата белергә өйрәтеү. Һауа торошо тураһында халыҡ һынамыштары менән таныштырыу. Йыл миҙгелдәренең үҙгәреүе кешегә, үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһына тәьҫире тураһында белешмә биреү: хайуандарҙың ҡышҡы йоҡоға талыуы (терпе, айыу, тәлмәрйен), йорт хайуандарының кеше хәстәрлегенә мохтаж булыуы (торлаҡ эшләү, аҙыҡ әҙерләү, тәрбиәләү). Ҡышҡы спорт төрҙәре менән таныштырыу. Ҡыш көнө үҙеңдең һаулығыңа иғтибар итеү, кейенеү, сынығыу, үҙ хәүефһеҙлеген һаҡлай белеү.<br>Ҡышҡы селлә тураһында мәғлүмәтте киңәйтеү: рәссам А.Маслянниковтың “Йылы ҡыш” картинаһы һ.б. буйынса хикәйә төҙөү, бәйләнешле телмәр үҫтереү. Һыу һәм боҙ менән тәжрибә үткәргәндә баланың аҡыл – зиһенен үҫтереү. Ҡыш тураһында рәссәмдарҙың картиналарын һәм иллюстрацияларын ҡарау. Йәнлектәр темаһына альбомдар, коллекциялар йыйыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Ҡыр хайуандарының ҡышлауы”,“Ҡыштың бер көнө”, “Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Ниндәй спорт төрҙәрен беләһең?”, “Ҡоштар, ҡыр хайуандары тураһында нимәләр беләһең?”һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был ҡайсаҡ була?”, “Һүрәткә ҡарап һөйләйбеҙ”, “Ҡыш билдәләрен әйт”, ”Экологик пирамида”, “Тукланыу сылбыры”, “Был йәнлек ҡайҙа йәшәй?”, “Һөйләү буйынса таны”, “Был ниндәй спорт төрө?” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Ғаилә”, “Больница”, “Магазин” , “Урман ҡарауылсыһы”һ.б.<br>(атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу).<br>Нәфис әҙәбиәт: “Тау шыуабыҙ” Р.Ураҡсина, “Ҡыш ”Д.Юлтый, “Айыу ниңә өңөнән сыҡмай?” Ж.Киекбаев, “Тәүге ҡар” С.Ҡотлогилдина һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Беҙ күңелле балалар”, “Кем шәберәк шыуа”, “Тау алыш” һ.б.<br>Йәбештереү: “Ҡыҙылтүш”,“Минең саналарым” һ.б.<br>Әүәләү: “Йәшәгән ти, йәнлектәр...”, “Ҡышҡы урман”, “Тағараҡҡа ҡоштар ҡунды” һ.б.<br>Эҙләнеү – тикшеренеү эшмәкәрлеге: “Һыу-ҡар-боҙ” һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Йәнлектәр өсөн тирмәкәйҙәр” (лего дупло конструкторҙар менән) | Балалар ижады күргәҙмәһе:<br>«Беҙҙең яҡтың ҡышы»<br><br>Спорт ярыштары үткәреү |

| | | |
|---|---|---|
| | Хәүефһеҙлек: “Ярай, ярамай” , “Һаҡ бул, ҡышҡы юл” һ.б. | |
| 3-4 аҙналар<br><br>“Яңы йыл” | Ата – әсәләр менән бергә байрамға әҙерлек эштәре. Ҡыш бабайҙың тыуған иле тураһында мәғлүмәт биреү. Ҡыш миҙгелдәре тураһында баланың белемен арттырыу. Видеофильмдәр, фотоһүрәттәр, бағышһүрәттәр ҡарау. Шыршы байрамына уйынсыҡтар әҙерләү, төркөм бүлмәһен байрамса биҙәү. Йырҙар, шиғырҙар өйрәнеү.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “Яңы йыл”.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Ҡарһылыу ниңә һуңланы?”, “Яңы йыл” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Ҡыш бабайҙы көтәһеңме?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Нимә артыҡ?”, “Был кемгә кәрәк?” “Ҡышҡы байрамдар”, “Ҡышҡы уйындар”, “Һүҙҙәр теҙмәһе”, “Һаулыҡ пирамидаһы” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Ҡыш бабай”, “Лавата” , Ә.Зинурова “Ҡыш бабай”, “Яңы йыл килә” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: Г. Юнысованың “Ҡыш бабай”, Ҡ.Даян “Шыршы”, Ғ.Ғәлиева “Ҡарһылыу”, Ф. Туғыҙбаеваның “Ҡарһылыу ниңә һуңланы?” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Байрам шыршыһына уйынсыҡтар” , “Шыршы”, һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Туңдырам”, “Шалтырауыҡтар”, “Әйлән- бәйлән” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Байрамға әҙерләнәбеҙ” ( уйындың сюжетын уйлап, сюжетты төрлө атрибуттар ҡулланып тулыландырыу) һ.б.<br>Уйын-ситуация: “Әкиәттәге ағастар” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Ярай,ярамай” , “ Ут- бигерәк ҡурҡыныс”, “Гирлянда уйынсыҡ түгел” һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Минең саналарым” һ.б. (квадро конструкторы) | Яңы йыл иртәлеге<br><br>Балалар эштәренән ижади күргәҙмә<br><br><br><br>Яңы йыл уйынсыҡтарынан күргәҙмә |
| Ғинуар<br>1-2 аҙна<br>Каникулдар<br>3- 4 аҙна<br>«Башҡортостандың хайуандар донъяһы» | Хайуандарҙы төрлө билдәләре буйынса айырырға һәм төркөмләргә өйрәтеү: ҡырағай һәм йорт хайуандары. Хайуандарҙы үҙенсәлекле сифаттары буйынса таный белеү (холҡо, йәшәү урыны, ашарға табыу юлы, дошмандан һаҡланыу төрҙәре буйынса), балалары тураһында белемен киңәйтеү. Йәнлектәрҙең йәшәү шарттарына ярашлы тән төҙөлөшө тураһында мәғлүмәт биреү.<br>Йорт хайуандарының ҡыш көнө йылы һарайҙа йәшәүе, кешегә файҙа килтереүе, кешенең улар тураһында хәстәрлек күреүе тураһында белемен камиллаштырыу.<br>Ҡоштар тураһында белемен тулыландырыу: күгәрсен, турғай, ҡарабаш турғай һ.б. Ҡоштарға ҡаты һыуыҡта ашарға аҙыҡ табыуы ауыр булыуын аңлатыу, уларға ярҙам итеү теләге уятыу (тағараҡтар элеү, ем һалыу һ.б.).<br>Мнемотаблица, модель схемалар буйына һөйләү. Ҡайһы бер хайуандарҙың тауыштарын отоп алыу, ҡабатлау, телмәрҙә күплек, эйәлек заты һәм килеш ялғауҙарын дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү. Өноҡшаш, һүҙле уйындар уйнау.<br>Үҫтереүсе диалог: “Хайуандар ҡайҙа йәшәй?”,”Зоопаркта, циркта нимәләр күрҙең?” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрес: “Ҡыр хайуандарының ҡышлауы”, “Йылғала нимә йәшәй?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Нимә, нисек хәрәкәтләнә?”, “Йәнлек - ҡоштарҙы ашат”, “Нимә ҡайҙа йәшәй?”, “Һүҙ төҙө” һ.б | Проект эше:<br>“Минең яҡын дуҫтарым”<br><br><br><br>Акция:<br>«Ҡоштарға тағараҡ»<br>Оҫтахана |

| | | |
|---|---|---|
| | Нәфис әҙәбиәт: “Болан” С. Әлибаев, “Ала һыйыр” А. Йәғәфәрова, “Юлдыбай һунарсы”, “Бремен музыканттары”, “Айыу менән бал ҡорттары” , “Ни өсөн бесәй өйҙә йәшәй?”һ.б.<br>Сюжетлы-ролле уйын: “Зоопаркта” һ.б. (шарттар булдырыу, уйын барышын аңлатыу, ярҙам итеү, ыңғай эмоциональ ҡараш булдырыуға булышлыҡ итеү )<br>Хәрәкәтле уйындар: “Бүре менән кәзә”, “Ҡаҙҙар аҡҡоштар”, “Һунарсы менән өйрәк”,”Тауыҡ менән төйлөгән”, “Айыу өңөндә”,“Айыу һәм ҡуян”,”Айыу бүре”, “Турғайҙар һәм бесәй” һ.б<br>Һүрәт төшөрөү: “Йылғала балыҡтар” һ.б.<br>Ситуациялы хәл: “Мин урманда” , “Зоопарк нимә ул?”, “Хатаһын төҙәт” һ.б.<br>Конструктив- модель эшмәкәрлеге: “Хайуандарға өй”, “Зоопаркта” һ.б. (тәбиғәт материалдары һ.б материалдар менән)<br>Әүәләү: “Йәшәгәндәр ти, йәнлектәр...”, “Тағараҡҡа ҡоштар ҡунды” һ.б.<br>Йәбештереү: “Ҡыҙылтүш”, “Аквариум”һ.б.<br>Күләгә театры: “Йорт хайуандары, ҡоштары” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, берәҙәк эттәр, бесәйҙәр”, “Тау шыуғанда, боҙҙа һаҡ бул” һ.б. | |
| Февраль<br>1-2 аҙна<br>«Халҡым биҙәктәре» | Башҡорт халҡының биҙәү - ҡулланма сәнғәте менән таныштырыуҙы дауам итеү, милли кейемдәрҙәге, һауыт - һабаларҙағы биҙәктәрҙең, геометрик фигуранан тороуын, уларҙың халыҡ көнкүреше, кәсебен сағылдырыуын аңлатыу.<br>Биҙәк элементын халыҡ орнаменты мотивтары менән төшөрә белеү (рустарҙың – мазки, нөктә, тура һыҙыҡтар, дуға һ.б.; башҡорттарҙың – баҫҡыс, квадрат, ҡош башы, ҡаҙ тәпәйе, ҡырмыҫҡа биле, ҡусҡар кәкерсә, ромб) мотивтары менән төшөрә, матурлығын күрә белеү, был сәнғәт төрөнә һөйөү, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү. Һүрәт - иллюстрациялар ҡарау (түбәтәй, камзул, ҡашмау, күлдәк һ.б.)<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Беҙҙә ҡунаҡта скульптор”, “Өләсәйем һандығы” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Әгәр мин дизайнер булһам..”, “Әгәр мин модельер булһам” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Милли кейем”, “Сәлимәне байрамға кейендер”, һүҙле - дидактик уйын “Өләсәйем һандығы”, “Башҡорт мозаикаһы”, “Биҙәкле кубиктар”һ. б.<br>Һүҙле - дидактик уйын: “Өләсәйем һандығы” һ.б.<br>Әүәләү: “Ҡашмау”, “Ҡартатайым түбәтәйе” һ.б.”<br>Йәбештереү: “ Башҡорт биҙәктәре”, “Милли кейемдәр” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйын: “Тирмә”,“Тирмә”, “Ҡурайға йүгер” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Курсағыма күлдәктәр”, “Камзулды биҙә” һ.б.<br>Сюжет төҙөүсе уйын: “Сәлимә менән Марат ҡунаҡҡа килгән” һ.б. .( атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу).<br>Нәфис әҙәбиәт: “Оҫта малай” А.Йәғәфәрова, “Биҙәкле силәктәр” Ә.Таһирова, “Үҙем тектем” А.Игебаев һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Төрлө ҡапҡалы йорттар”, “Йылға аша күпер” ,“Курсаҡҡа йорт | Проект эше<br>“Ағас һәм туҙ һауыттар”<br><br>Күргәҙмә ойоштороу |

| | | |
|---|---|---|
| | йыһаздары” һ.б. (пластмасс конструкторҙар, цилиндрҙар, кирбестәр, бәләкәй ҡурсаҡтар)<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул- ваҡ биҙәүестәр”, “Осло әйберҙәр” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>«Ил һаҡлаусылары» | Рәсәйҙең Ҡоралды көстәре тураһында төшөнсәләр биреү. Хәрби һөнәрҙәр, ғәскәрҙәр тураһында башланғыс төшөнсәләр биреү (танкистар, хәрби осоусылар, моряктар, сик һаҡсылары, йәйәүле ғәскәр һалдаттары). Хәрби техника (корабль, һыу аҫты атом кәмәһетанк, хәрби самолет, хәрби крейсер, вертолет төрҙәре, танк һ.б.) тураһында аңлатыу. Хәрби транспортҡа бәйле һөнәрҙәр (моряк, летчик, капитан, элемтәсе, капитан һ.б.) менән таныштырыу. Рәсәй армияһы составында башҡорт халҡының тыуған ерҙе һаҡлап төрлө походтарҙа, яуҙарҙа ҡатнашыуы тураһында белем биреү.<br>Бөйөк Ватан һуғышында батырлыҡтар күрһәткән Башҡорт атлы дивизияһы (М.Шайморатов, Т.Кусимов) тураһында мәғлүмәт биреү. Һуғыш ветерандары, атай, ағай, малайҙарға ҡарата ихтирам тәрбиәләү, ил һаҡсылары булыу теләге уятыу. Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү. Гендер тәрбиәһе биреү (малайҙарҙа көслө, ҡыйыу булыу теләген формалаштырыу, тыуған илде һаҡларға, яҡларға тейешле икәндәрен аңдарына һеңдереү, ҡыҙҙарҙа буласаҡ ил һаҡсыларына хөрмәт итеү тойғолары тәрбиәләү). Батырлыҡ тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Ҡаланың крайҙы өйрәнеү музейына экскурссия.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “Ватанды һаҡлаусылар”.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Армия- ил көсө” , “Батыр һаҡсы” В.Әхмәҙиев әҫәре буйынса, һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Һин ҙурайғас һалдат булаһыңмы?”, “Мин командир булһам”һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Һалдат”, “Осоусылар” һ.б. ( атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу).<br>Дидактик уйындар: “Хәрбиҙәр”, “Транспорт төрҙәре”, “Һүрәтте йый”, “Моделенән таны”, “Был ниндәй һөнәр кешеһе?”, “Өлөштәренең атамаларын әйт”, “Карапты киҫәктәрҙән йый”, “Нимә һүрәтләп була?” (технологик карта) һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Мин командир булам” Р.Сабитов, В. Әхмәҙиев “Батыр һаҡсы”, “Аттар ҡунаҡтар” Ф.Туғыҙбаева, “Кескәй матрос” Ф.Рәхимғолова, В.Сутеевтың “Бәләкәй карап”һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар:“Марш”, “Һалдаттар” һ.б.<br>Әүәләү: “Самолеттар оса” (күләмле) һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Ағайым тора һаҡта” һ.б.<br>Конструктив –модель эшмәкәрлеге: “Самолеттар”, “Караптар”, “Кумертау вертолеттары” һ.б. (оригами, “лего” конструкторҙар, технологик карта буйынса)<br>Йәбештереү: “Башҡорт атлылар ғәскәре” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Тау шыуғанда, һаҡ бул!”, “Юл билдәләре” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: халыҡ йырҙары (“Любизар”, “Порт-Артур”, “Ҡаһым түрә”), бейеүҙәре (“Байыҡ”, “Перовский”) һ.б. | Виртуаль сәйәхәт<br>“112 – се башҡорт кавалерия дивизияһы музейы”<br><br>Атайҙар менән берлектә музыкль спорт байрамы: «Ир бала илгә терәк»<br><br>Күргәҙмә:<br>«Хәрби техника»<br><br>Фотокүргәҙмә:<br>“Минең атайым - һалдат” . |
| Март | Ғаилә һәм ғаилә ағзалары (әсәй, өләсәй, инәй, апай) тураһында мәғлүмәт биреүҙе дауам итеү, бер- | Байрам: |

| | | |
|---|---|---|
| 1-2 аҙна<br>«Әсәләр нур сәсәләр» | береһен яратыуы, ярҙам итеүе, бергә дуҫ йәшәүҙәре тураһында аңлатма биреү. Әсәйҙәр иң яҡын кеше булыуҙарын, уларҙы ҡәҙерләргә кәрәклеген балаға төшөндөрөү.<br>Балаға 8 март – ҡатын -ҡыҙҙар көнөнә арналған байрам булыуын аңлатыу. Әсәйҙәрҙең һөнәрҙәре менән таныштырыу(тәрбиәсе, кесе тәрбиәсе, шәфҡәт туташы һ.б.). Әсәйҙәргә, ҡыҙҙарға ҡарата ихтирам тойғоһо, һөйөү, ыңғай мөнәсәбәт хаҡында башҡорт ижады өлгөләре (әкиәт, мәҡәл, әйтем, легенда, йырҙар) аша еткереү. Гендер тәрбиәһе тәрбиәләү. Бүләктәр әҙерләүгә баланы йәлеп итеү.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “Ҡатын - ҡыҙҙар көнө”<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Әсәйем (өләсәйем) өсөн мин нимә эшләр инем?”, “Минең һөйөклө әсәйем”, “8 март- ҡатын-ҡыҙҙар көнө” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Әсәйемә нимә бүләк итер инем?”, “Әсәй өйҙә юҡ”, “Минең әсәйем ...” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Өлөштәрен әйт”, “Серле тоҡ”, “Әсәйем һөнәре”, “Кем нимә эшләй?”, “Кем күберәк наҙлы һүҙ әйтер?”, “Һөнәрҙең эш ҡоралдарын ата”.һ.б.<br>Сюжетлы–ролле уйындар: “Ғаилә”, “Әсәйҙәр һәм ҡыҙҙар”, “Магазин”, “Больница”, “Ателье” һ.б. (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу).<br>Уйын-ситуция: “Ҡайҙа урынлаштырыр инең?” , “Һин ни эшләр инең?”һ.б.<br>Уйын-диалог: “Бүлмәһен ата”, “Әсәйеңде ҡотла!” һ.б.<br>Әңгәмәләшеү: “Әсәйгә нисек ярҙам итәһең?”, модель - схемалар ярҙамында әсәйҙәр һөнәре тураһында һөйләү һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Йорт йыһаздары” , “Поезда өләсәйгә ҡунаҡҡа” һ.б. (ҙур модулдәр, кубиктар, кирбестәр ҡулланып)<br>Йәбештереү: “Әсәйҙәргә сәскәләр”, “Ҡулъяулыҡтар биҙәйек”.һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Иламайым” Ф.Туғыҙбаева, “Әсәйемде йоҡлатам” Г.Юнысова, “Әсәйҙәр байрамы” Ғ.Ғүмәр, “Үгәй ҡыҙ Гөлбикә”, һ.б.<br>Бармаҡ уйыны: “”, “Минең ғаиләм” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Әйберҙе алып кил”,”Миңә йүгер”, “Турғайҙар һәм бесәй”, “Кем тиҙерәк” һ.б.<br>Әүәләү: “Әсәйемә һауыт-һаба” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Әсәйемә күлдәк” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, плита”, “Ярамаған әйберҙәр”, “Осло әйберҙәр” һ.б.<br>Музыка: “Әсәйҙәр байрамы” Р.Ураҡсина, “Минең өләсәйем” Ф.Гершова йыры һ.б. | «Әсәйем – күҙ нурым» Концерт<br><br>Фотокүргәҙмә: “Минең һөйөклө әсәйемдең һөнәре”<br><br>Әсәйҙәргә бүләктәр әҙерләү<br><br>Әсәйҙәрҙең ҡул эштәренән күргәҙмә |
| 3-4 аҙна<br>«Халҡым көнкүреше”<br><br>“Халҡым йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре» | Борондан йылҡысылыҡ тураһында шөғөлләнеүе хаҡында һөйләү, менге, екке аттарының көнкүрештәге ярҙамы, уларҙың ҡышҡа яраҡлашыуы, тибендә аҙыҡ табыуы, бейә малының һөтөнән бешелгән ҡымыҙҙың файҙаһы тураһында аңлатыу.<br>Ир – аттарҙың ағас эшкәртеү, тире эшкәртеү (турһыҡ, ҡайыш, йүгән, итек һ.б.) кәсептәре менән таныштырыу. Башҡортостанда йәшәүсе халыҡтарҙың боронғо көнкүрешен халыҡ ижады аша күрһәтеү, ҡыҙыҡһыныу уятыу.<br>Башҡорт халҡының йолалары һәм ғөрөф– ғәҙәттәре, фольклор төрҙәре менән таныштырыуҙы | Проект эше “Аттар - ҡунаҡтар”<br><br>Йола байрамы “Ҡарға бутҡаһы” |

| | | |
|---|---|---|
| | дауам итеү: (бишек туйы, миҙгел байрамдары, малсылыҡ, ҡортсолоҡ, һарыҡ йөнөн ҡырҡыу, кәзә мамығын эшкәртеү, йыуаға сығыу, ситән үреү, һалабаш сығарыу һ.б.). Уларҙың хәҙерге ваҡытта һаҡланыуын күрһәтеү (ат ярышы, милли көрәш, бер-береһен ҡунаҡҡа саҡырыу, һыйлау, милли уйындар һ.б.). Йыл миҙгеленә бәйле йолаларҙы яҙыусыларҙың, рәссамдарҙың, композиторҙарҙың әҫәрҙәрендә сағылыуын аңлатыу. Һунарсы һөнәре һәм һунарсылыҡ тураһында балаларға тәү мәғлүмәттәр биреү.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “Ауылдағы бер көн”.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Ағас һәм туҙ һауыттар”, “Йылҡысылыҡ” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Өләсәйҙә өмәлә”, “Атайыма булышам”, “Мин ярҙамсы...”, “Һабантуйҙа”, “Бал ҡортоноң файҙаһы һәм зыяны ”, “Йорт хайуандары”, һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Умартасылыҡ”, “Малсылыҡ”, “Йылҡысылыҡ” һ.б. ( атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу).<br>Дидактик уйындар: “Был нindәй һауыт?”, “Һауыт нимәнән эшләнгән?”, “Мәҡәлде әйтеп бөтөр”, “Йомаҡтар уйлап тап”, “Сәлимә менән Марат өҫтәл артында”, “Киҫәктәрҙән төҙө”,”Башҡорт һауыт-һабаһын төҙө” һ.б.<br>Уйын-ситуация: “Бал ҡорто саҡһа”- һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Йорт хайуандары өсөн кәртә”, “Умарта”, “Тирмә” һ.б. (“Кликс” конструкторы, ҡоролма өлгөһө, ваҡ уйынсыҡтар- йорт хайуандары)<br>Һүрәт төшөрөү: “Өләсәйем балаҫы”, “Балаҫты биҙә ” һ.б.<br>Йәбештереү: “Сәңгелдәк биҙәйбеҙ”, “Матур биҙәкле балаҫ” һ.б.,<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ҡашығаяҡ” Ф.Туғыҙбаева, “Олатай һәм ҡолатай” Г.Юнысова, “Ете төҫө лә һыйған” Р.Заһиҙуллин һ.б. Йомаҡтар сисеү, мәҡәлдәр өйрәнеү. Бишек йырҙары, әүрәткестәр, халыҡ һүҙҙәре өйрәнеү.<br>Башҡорт халыҡ уйыны “Ҡоштар һәм ҡошсоҡтар”, ”Себештәр менән көтөүсе” һ. б.<br>Бармаҡ уйыны: “Ҡуян”, “Төлкө”, “Ат” һ.б.<br>Уйын- күнекмә: “Нимәнең тауышы?” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар:“Айыу һәм ҡуян”,”Айыу, бүре”, “Турғайҙар һәм бесәй”, “Хайуандар уйнай” һ.б.<br>Әүәләү: “Ҡымыҙ һауыты” , “Тирмәкәйҙә кем йәшәй?” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Юл билдәләре”, “Һаҡ бул, тайғаҡ юл!” һ.б. | Күргәҙмә:<br>«Тәбиғәт материалдары мөғжизәһе»<br><br>Сибай ҡалаһының крайҙы өйрәнеү музейына экскурсия |
| Апрель<br>1-2 аҙна<br>“Яҙ килә” | Яҙ миҙгеле билдәләре, Нәүрез байрамы тураһында баланың белемен камиллаштырыу. Ҡояштың ер йөҙөнә яҡтылыҡ, йылылыҡ биреүе һәм тормош сығанағы булып тороуы хаҡында аңлатыу. Яҙ миҙгелендә йәнлектәрҙең, ҡоштарҙың тормошо, йәшәйеше тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. Төрлө бөжәктәр, уларҙың тышҡы ҡиәфәте (күбәләк, ҡуңыҙ, ҡырмыҫҡа, бал ҡорто, сиңерткә), тауыштары тураһында төшөнсәләр биреү. Уларҙың кәүҙә төҙөлөшө, хәрәкәтләнеүе: шыуыша, оса, һикерә, йәшәгән урыны (һыуҙа, ерҙә) һ.б. билдәләре буйынса сағыштырыу. Һауа торошон, тәүлек | Күргәҙмә<br>“Яҙғы биҙәктәр” |

| | | |
|---|---|---|
| | өлөштәрен билдәләргә өйрәтеү. Тәбиғәттә үҙ –үҙенде тотоу , хәүефһеҙлек ҡағиҙәһен өйрәнеүҙе дауам итеү. Баҡсалағы яҙғы эштәр, элементар экологик тәрбиә тураһында белемдәр биреү. Тәбиғәткә бәйле мәҡәлдәр, йомаҡтар, әйтемдәр өйрәнеү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Науруз байрамы”, “Ҡыр хайуандары нисек ҡышлай?”, “Шаулап яҙ килә” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Ниндәй сәскәләрҙе беләһең?”, “Ниндәй бөжәктәрҙе беләһең?” ,“Яҙ килә”, “Хайуандар һәм ҡоштар” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Үҫемлектәң өлөштәрен тап”, “Үҫеш сылбыры”, “Ашарға ярай - ярамай”, “Үрсеү пирамидаһы”, “Туҡланыу пирамидаһы”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә”, “Был ниндәй бөжәк?”, “Төҫтәрҙе сиратлап һал”, “Нимә ҡайҙа йәшәй?”, “Сәскәне йый” һ.б.<br>Уйын-фантазия: “Мин тәҙрә аша нимә күрәм?” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ике ҡояш” Ә.Вәхитова, “Гөрләүектәр” Г.Юнысова, “Яҙ йыры” Г.Зарипов, “Өй артында” Ф. Рәхимғолова, “Умырзая” А. Йәғәфәрова, “Ҡаҙҙар ниңә ала булған?”, “Сәскә менән күбәләк ” М.Дилмөхәмәтов, Р. Ғәрипов “Сыйырсыҡ”, “Ҡояш көлә” Ғ.Ғәлиева<br>Хәрәкәтле уйын: “Ҡояш һәм ямғыр”,”Беҙ күңелле балалар” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Гөрләүектәр ҡабаланып аға”, “Ағастар уяна” һ.б.<br>Тәжрибә: “Һыуған үҫешен күҙәтеү” һ.б.<br>Конструктив- модель эшмәкәрлеге: “Ҡоштарға өй”, “Ылыҫлы урман” һ.б. (ҡағыҙ, оригами)<br>Сюжетлы-ролле уйын: “Дауаханала”, “Ғаилә”, “Беҙ экологтар” һ.б.<br>Бармаҡ уйыны: “Ҡояш”, “Ҡоштар”, “Күбәләк” һ.б.<br>Уйын- күнекмә: “Нимәнең тауышы?”, “Ҡайҙа йәшәй?”<br>Әүәләү: “Серле боҙбармаҡтар”, “Ҡояш нурҙары” һ.б.<br>Йәбештереү: “Яңы күлдәк кейә ағастар”, “Һабан турғайы”һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар “Осто - осто”, “Йәшерәм яулыҡ” һ.б.<br>Музыка: “Ҡоштар килә” С. Сәлмәнов, “Урманға барабыҙ” Р. Сәлмәнов һ.б. көйҙәен тыңлау.<br>Хәүефһеҙлек: “Сәскәләрҙе һаҡла!”, “Һаҡ бул, талпан!”, “Һаҡ бул, боҙбармаҡ!, “Сит кешеләр”” һ.б. | Квест уйыны |
| 3-4 аҙна<br>“Китап - белем шишмәһе” | Программаға ярашлы күренекле башҡорт ( Р. Ураҡсина, А. Йәғәфәрова, Г. Юнысова) һәм рус яҙыусылары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Төркөм бүлмәһендә балалар яҙыусылары буйынса китаптаптар күргәҙмәһе ойошторроу. Ата-әсәләр менән бергә китап мөйөшө булдырыу, китаптар күргәҙмәһе “Китап дауаханаһы” төҙөү, китапсыҡ эшләү. Китаптарға ҡарата һаҡсыл ҡараш булдырыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Китап- белем шишмәһе”, “Китап нисек барлыҡҡа килә”, “Айболит” әкиәтен уҡыу, һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Китап нисек барлыҡҡа килә?”, “Китапҡа нисек ярҙам итергә була?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был ниндәй әкиәттән?”, “Дөрөҫ һүрәтлә”, “Һүрәтен дөрөҫ тап”, “Китап нисек эшләнә?” һ.б.<br>Уйын – ситуация: “Мин – китап буяусы” һ.б. | Китап күргәҙмәһе:<br>“Минең яратҡан китабым”<br><br>Проект эше:<br>“Мин һәм китап”<br><br>Коллекциялар әҙерләү<br>(яратҡан геройҙар) |

| | | |
|---|---|---|
| | Сюжетлы – ролле уйындар: “Китапхана” һ.б.( атрибуттар һайлап уйынды байытыу, ролдәрҙе бүлешеү, уйынсыҡтарҙы урындарына ҡуйыу).<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Китап кәштәһе” һ.б. (ҙур модульдәр менән)<br>Йәбештереү: “Минең китабым” һ.б.,<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ат” А. Йәғәфәрова, “Аҡтүш” А.Игебаев, әкиәттәр: “Һарыбай”, “Бүре менән кәзә” һ.б..<br>Бармаҡ уйыны: “Ҡуян”, “Төлкө”, “Ат” , “Тирмә”, “Өй”, “Эт” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Айыу һәм ҡуян”,”Айыу, бүре”, “Турғайҙар һәм бесәй”, “Хайуандар уйнай”, “Бесәй һәм сысҡандар, “Шаян балалар” һ.б.<br>Әүәләү: “Әкиәт геройҙары”, “Йомро икмәк” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Минең тәүге китабым”, “Ҡулдан мисәт” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Һаҡ бул, талпан!”, “Осло әйберҙәр”, “Светофор минең дуҫым” , “Асыҡ тәҙрә” һ.б. | |
| Май<br>1-2 аҙна<br>“Еңеү яҙы”<br>“ Батырҙар ил күрке!” | Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары, батырлыҡтары тураһында баланың белемен киңәйтеү. Һәйкәлдәр менән таныштырыу, олатайҙар һәм өләсәйҙәрҙең хәрби миҙалдары һәм ордендары тураһында һөйләү.<br>Башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаев (үҫмер сағы, ижады, тормошо) менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаға батырҙы өлгө итеп ҡуйыу (ҡыйыу, тәүәккәл, отҡор булыуын еткереү). Башҡорт тарихына баланы ылыҡтырыу.<br>Батырҙың үҫмер сағын сағылдырған В. Рудаковтың «Салауат йәшлеге», «Бөркөттәр» картиналары, С. Злобиндың әҫәренән өҙөктәр аша уның ҡыйыу, теүәккәл, отҡор булыуын еткереү. Патриотик тәрбиә биреү. С. Юлаевтың “Уралым”, “Егеткә” шиғырҙарын уҡып, оҫта шағир һәм сәсән образын асыу.<br>Батыр тураһындағы әҙәбиәт һәм сәнғәт әҫәрҙәре аша милли геройыбыҙҙы балаларға өлгө итеп ҡуйыу; етеҙлек, сослоҡ сифаттары менән геройға оҡшарға теләк уятыу.<br>Иллюстрациялар ҡарау. Еңеү паркына һәм Салауат бюсы янына экскурсия. Крайҙы өйрәнеү музейына сәйәхәт. Һуғыш ветерандары менән осрашыуҙар үткәреү.<br>Үҙ - үҙеңде йәмәғәт урындарында тотоу, бер - береңә яҡшы мөнәсәбәттә, ололарға ихтирамлы булыу һәләтен үҫтереү.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “9 май- Еңеү көнө”<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Көтөп алған Еңеү көнө”, “Бәләкәй Салауат” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Милли батыр Салауат Юлаев тураһында нимә беләһең?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Батыр кейеме”, “Һунарсыға нимә кәрәк?”, “Һүрәтте төҙө” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Кем етеҙ, “Һунарсылар”, “Таҫыл егет”, “Сәпкә тейҙереү”, “Һунарсы һәм ҡуяндар” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Танк”, “Самолет” (лего, ағас, тимер конструкторҙар | Байрам: “Еңеү көнө”<br><br>Үлемһеҙ полк акцияһында ҡатнашыу<br><br>Фотокүргәҙмә “Олатайым миҙалдары” |

| | | |
|---|---|---|
| | ҡулланып) һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Әбйәлил”, “Алпамыша батыр” әкиәте, “Батыр” Ф.Туғыҙбаева, “Олатайым фотоһы” М.Ғәли, “Батыр һаҡсы” В. Әхмәҙиев, “Олатайым ҡурайы” Г. Йыһангирова һ.б. шиғыры.<br>Ҡобайырҙар, шиғырҙар өйрәнеү.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Батырҙар”, “Һунарсылыҡ” (бер - береһенә иғтибарлы, дуҫтарса мөнәсәбәттә булыу, коллективта бергә, башҡа балалар менән килешеп уйнай белергә) һ.б.<br>Башҡорт халыҡ уйындары:” Атыусы”, “Һунарсылар”, “Сәпкә һуғыу” һ. б. ойоштороу.<br>Спорт ярыштарын үткәреү: “Тоҡта йүгереү”, “Тоҡ менән көрәш”<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Аттар” (Башҡорт халыҡ көйө Р. Сәлмәнов эшкәртеүендә).<br>Хәүефһеҙлек: “Өйҙәге хәүефле хәлдәр”, “Иғтибар, юл аша сығабыҙ!” , “Асыҡ тәҙрә”һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>Мониторинг<br>“Ер - йәшәгән урыныбыҙ”<br><br>“Йәшеллек донъяһы” | Йәшәгән еребеҙгә, эскән һыуыбыҙға, үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһына баланың ҡыҙыҡһыныуын арттырыу һәм һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Йәнлектәрҙең, үҫемлектәрҙең йәшәү шарттары (ер өҫтөндә, һыуҙа – ерҙә, ерҙә һәм һауала, тупраҡта) тураһында мәғлүмәт биреү. Балаға күк есемдәре (ҡояш, ай, йондоҙҙар) һәм башҡа күренештәр тураһында аңлатыу. Һыу, тәбиғи материалдарҙың (ҡом, балсыҡ, һыу, таш, ағас) үҙенсәлектәре менән таныштырыу. Уларҙың хужалыҡ өсөн әһәмиәте тураһындағы төшөнсәләр биреү. Ландшафт төрҙәре эшләү (һыу яҡкылыҡтары һ.б.), таштар колллекцияһы йыйыу. Һүрәттәр, иллюстрациялар, энциклопедялар, фәнни – әҙәбиәт ҡарау. Йомаҡтар сисеү һәм уйлап сығарыу, йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү.<br>Төрлө бөжәктәр, уларҙың тышҡы ҡиәфәте, тауышы тураһында мәғлүмәт биреү (күбәләк, ҡуңыҙ, ҡырмыҫҡа, бал ҡорто, сиңерткә). Уларҙың кәүҙә төҙөлөшө, хәрәкәтләнеүе (шыуыша, оса, һикерә), йәшәгән урыны (һыуҙа, ерҙә) һ.б. буйынса сағыштырыу. Быуа, күл, йылға – йәнлектәрҙең һәм үҫемлектрҙең йәшәү урыны, Башҡортостандың ҙур күлдәре, йылғалары, унда йәшәгән йәнлектәр, балыҡтар менән таныштыру.<br>Тәбиғәтте һаҡлау ҡағиҙәләре менән танышыу. Тәрбиәле булыу, ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ үтәү, башланған эште аҙағына еткереү, иҫкәртеүһеҙ үтәүҙе ғәҙәткә индереү, уйынды ойоштороу һәләтен хуплау, ижади ҡарашын үҫтереү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Тәбиғәтте һаҡлайыҡ” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: «Һыуһыҙ йәшәү буламы?”, «Һыу ҡурҡынысы», “Һыуҙың, ерҙең файҙаһы” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Һыу ниндәй була?”, “Серле таяҡ”, “Ҡырҡылған һүрәттәр”, “Үҫемлектәр донъяһы”, “Хайуандар донъяһы”, “Һыу аҫты донъяһы”, “Сырмалсыҡ” һ.б.<br>Тәжрибәләр: һыу һәм ҡом менән.<br>Сюжетлы-ролле уйындар: “Балалар баҡсаһы”, “Зоопарк” һ.б. ” (бер-береһенә иғтибарлы, дуҫтарса мөнәсәбәттә булыу, коллективта бергә, башҡа балалар менән килешеп уйнай белергә) һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Болонда уйнай сәскәләр” Ф.Туғыҙбаева, “Тыуған ерем” А.Кәрим, Р. Ниғмәтуллин “Тыуған ер”, Г. Мостафина ”Сынығырға ваҡыт”, Ю. Салауатов “Ниңә аяҡтар | Ата - әсәләр менән берлектә экологик акция “Таҙа майҙансыҡтар”<br><br>Фотокүргәҙмә:<br>“Тыуған яғым тәбиғәте”<br><br>“Ҡала урамдары буйлап” - интерактив сәйәхәт<br><br>Экологик һуҡмаҡ<br><br>Проект эше<br>“Умартасылыҡ” |

| | | |
|---|---|---|
| | ҡыйыш?” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Ямғыр менән болот”, “Егеттәр”, башҡорт халыҡ уйыны “Өйһөҙ ҡуян”, “Өкө менән ҡошсоҡтар” һ.б.<br>Ситуациялы хәл: “Әгәр мин урмансы булһам?”.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Һаҡ бул, талпан!”, “Осло әйберҙәр”, “Асыҡ тәҙрә” һ.б. | |

**Өлкәндәр төркөмө өсөн яҡынса комплекслы тематик план**
**(5-6 йәш)**

| Темалар | Йөкмәткеһе | Йомғаҡлау сараһы |
|---|---|---|
| Сентябрь<br>1 аҙна<br>Мониторинг<br>“Белем илендә” | Балаларҙың иғтибарын балалар баҡсаһындағы үҙгәрештәргә йәлеп итеү (уңыш, сәскә орлоҡтарын йыйыу һ.б.). Балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре тураһында белемдәрен киңәйтеү (балалар баҡсаһы мөдире, музыка етәксеһе, физик тәрбиә биреү инструкторы һ.б.). Баланың мәктәпкә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү. Апай, ағайҙарының мәктәпкә барыуҙары тураһында һөйләшеү. Балалар араһында бер – береһенә ҡарата дуҫлыҡ мөнәсәбәте формалаштырыуҙы дауам итеү. Мәктәп тураһында мәғлүмәт биреү. Балалар баҡсаһы һәм мәктәп хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре тураһында белемдәрен камилаштырыу (уҡытыусы, директор һ.б.). Үҙҙәренең исем- фамилияһын, ата-әсәләренең исемдәрен нығытыу. Ата-әсәләрең һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Яҡындарының хеҙмәтенә, һөнәренә ихтирам тәрбиәләү, өй эштәрендә ярҙам итеүгә теләк уятыу, балаларҙың яҡындарының хәленә инә белергә өйрәтеү. Баланың үҙе тураһында күҙаллауын киңәйтеү, үҙенә төрлө яҡтан ҡарараға мөмкинселек биреү. Үҙенең баһаһын билдәләү. Кешеләр араһында, йәмғиәт урындарында үҙ - үҙеңде тотоу ҡағиҙәһен, дөйөм алынған ҡағиҙәләрҙе үтәүҙе формалаштырыу. Телмәрҙә тылсымлы һүҙҙәр ҡулланыуҙы ғәҙәтләндереү (ғәфү итегеҙ, рәхмәт, зинһар өсөн һ.б.)<br>Сәләмәт йәшәү рәүешен һәм әҙәп – гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереүҙә төшөнсәләр биреүҙе дауам итеү. Тән ағзалары, үҙ - үҙеңде тәрбиәләү буйынса гигиеник күнекмәләр формалаштырыу. Баланы үҙ һаулығына иғтибарлы булырға күнектереү (“Миңә әфлисун ярамай- аллергия”, “Миңә мотлаҡ күҙлек кейергә кәрәк?” һ.б.).<br>Белем биреүсе ваҡиға: 1 сентябрь<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Белем көнө”, “Ғаиләң тураһында һөйлә” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Тылсымлы һүҙҙәр беләһеңме?”, “Кем иң иғтибарлы?”, “Ғаиләм - ҡәлғәм”, “Мин” образы” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был әйбер кемгә һәм ни өсөн кәрәк?”, “Тиҙерәк йыйҙ”, “Танып бел”, “Эш өсөн нимә кәрәк?”, “Ғаилә ағзаларын дөрөҫ әйт”, “Дуҫыңды тап” һүҙле уйын “Ғ”, “Ҡ” өнөнә һүҙҙәр һайла”, “Атамаһын әйт” һ.б. | Проект эше:<br>“Һөнәрҙәр” |

| | | |
|---|---|---|
| | Ситуациялы хәл: “Был хәлдән нисек сығырға булыр ине?”<br>Сюжетлы - ролле уйындар: “Уҡытыусы”, “Мин тәрбиәсе”, “Һатыусы” һ.б.(атрибуттар һайлап уйынды байытыу, шарттар булдырыу, сюжет ҡороу, ролдәрҙе бүлешеү, бер - береһе менән килешеп уйнарға, килеп сыҡҡан бәхәсте урында хәл итергә өйрәтеү).<br>Нәфис әҙәбиәт: А. Ҡадырова ”Мәктәптә” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: ”Күрше ҡыҙы Рәмилә”, “Әйләнәбеҙ - әйләнәбеҙ” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: рус халыҡ уйыны “Буяуҙар”, башҡорт халыҡ уйыны “Буяу һатыш”, “Аҡ ҡара тип әйтмәҫкә” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Минең ғаиләм” һ.б.<br>Бармаҡ уйындары: “Минең ғаиләм” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Мин өйҙә яңғыҙ”, “Өйҙәге хәүефле ситуациялар” һ.б. | |
| 2 аҙна<br>Мониторинг<br>«Хәүефһеҙлек донъяһы» | Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Тәбиғәттә үҙ - үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен формалаштырыу (һыу ингәндә, йәшен ваҡытында, велосипедта йөрөгәндә, саңғыла, конькила, санала шыуғанда һ.б), өйҙә көнкүреш приборҙарын ҡулланыу ҡағиҙәләрен нығытыу. Полиция, ут һүндереүселәр, ашығыс ярҙам, МЧС, газ хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү, актив телмәрҙә һөнәр менән бәйле һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙы формалаштырыу. “101”,”102”,”103” номерҙарын нығытыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: Ф. Туғыҙбаева “Изгелеккә изгелек” хикәйәһе буйынса һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Тәбиғәттә үҙ –үҙеңде тота беләһеңме?”, “Ут дуҫмы –дошманмы?”,<br>“Һинең өйөң ҡайһы урамда?”, “ Ғаиләң тураһында һөйлә” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Электр приборҙарҙы дөрөҫ әйт”, “Юл билдәләрен дөрөҫ айыр”, “Светофор”, “Нимә артыҡ?”, “Һайлап һал” һ.б.<br>Сюжетлы- ролле уйындар: “Автомобиль”, “Мин- полиция”, “Ут һүндереүселәр” һ.б.<br>(атрибуттар һайлап уйынды байытыу, шарттар булдырыу, сюжет ҡороу, ролдәрҙе бүлешеү, бер-береһе менән килешеп уйнарға, килеп сыҡҡан бәхәсте урында хәл итергә өйрәтеү).<br>Ситуациялы хәл: “Автобуста булған хәл”, “Мин табип булһам?”, “Әгәр яңғын сыҡһа…”,<br>“Бергәләп уйлайыҡ - тәртип ҡағиҙәһе” һ.б.<br>Ситуатив уйын: “Ағыулы бәшмәктең зарары ниндәй?” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: Г. Юнысова “Светофор”, Ф. Йыһаншина “Витамин”, К. Ушинский “Дарыу”,<br>К. Чуковский “Айболит” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Янғын һүндереүселәр”, “Юл билдәләре” һ.б.<br>Йәбештереү: “Хеҙмәтләндереү машиналары” һ.б.<br>Әүәләү: “Ҡаламдың урамдары” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйын: “Йылан менән табиб”, “Дауыл” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Дөрләп ян- ян”, “Ут һүндереүселәр” һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Хеҙмәтләндереү машиналары: тиҙ ярҙам, полиция, газ | Проект эше:<br>“Светофор минең дуҫым”<br><br>Ут һүндереүсе, полиция ойошмаһына маҡсатлы экскурсиялар |

| | | |
|---|---|---|
| | хеҙмәте” (ҡағыҙҙан, технологик карта буйынса)<br>Хәүефһеҙлек: “101”,”102”,”103” номерҙары,“Һаҡ булығыҙ, асыҡ тәҙрә!”,“Йәшендән һин йәшен!”, “Юлды ҡарап сыҡ!” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Көҙһылыу” | Тыуған яҡтың көҙ билдәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү, баланың ҡыҙыҡһыныуын арттырыу, тәжрибәләр үткәреүгә инициативаһын үҫтереү.<br>Йыл миҙгеленә ярашлы үҙгәреү үҙенсәлектәрен аңлатыу: үҫемлектәрҙең ер өҫтөндәге өлөшө һулый, ағас-ҡыуаҡ япраҡтары – төҫөн үҙгәртә, йылға – күл өҫтө боҙ менән ҡаплана, туңа; һыуҙың кешеләр, үҫемлектәр, йәнлектәр өсөн әһәмиәтен аңлау. Ағасты, ҡыуаҡты тышҡы күренештәренә ҡарап билдәләргә өйрәтеүҙе дауам итеү.<br>Тыуған яҡта йыш осраған үҫемлек, хайуандарҙы таныу, миҙгелгә ярашлы улар тормошоноң үҙгәрештәрен асыҡлау һәм тәбиғәт күренешенә бәйлелеген таба белеү.<br>Тәбиғәттә хәүефһеҙлек һаҡлау буйынса күҙаллауын киңәйтеү. Тәбиғәткә һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүҙе камиллаштырыу. Тәбиғәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен формалаштырыу (сәскәләрҙе өҙмәҫкә, ағастарҙың ботаҡтарын һындырмаҫҡа, хайуандарҙы борсомаҫҡа, сүп-сар ҡалдырмаҫҡа һ.б.) Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттең үҙ-ара бәйләнешен, тәүлек төшөнсәләре буйынса күҙаллауҙарын үҫтереү.<br>Йәнһеҙ тәбиғәт: тәбиғәт календарында торошон билдәләргә һауа (һыуыҡ, йылы, ҡояшлы, болотло, ямғыр яуа, ел иҫә) һәм һауа торошона ярашлы кейенергә өйрәтеү. Баланың күҙәтеүсәнлеген, ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү (ямғыр, йәшен, ысыҡ, ҡырау, йәйғор, көндәр һалҡынайта, йыш ямғыр яуа, ағастың япраҡтары һарғайып ҡойола, күбәләктәр юҡ булды, сәскәләр һулыны һ.б.), тәбиғәт - климат шарттарының төрлө булыуы тураһында тәүге күҙаллауын формалаштырыу: һыуыҡ климатлы зона (Арктика, Антарктика), уртаса климат (урман, дала тайга), эҫе климат (джунгли, саванна). Карта һәм глобус менән таныштырыу (ҡайһы бер климат зоналарын күрһәтеү). Һыу, балсыҡ, таш, ҡомдоң көнкүрештә ҡулланылыуы тураһында әңгәмәләшеү һәм ҡиммәтле таштар тураһында һөйләшеү, эҙләнеү-тикшеренеү үҙәгендәге таштар менән танышыу .<br>Үҫемлектәр донъяһы һәм бәшмәктәр: ҡыуаҡлыҡтар, ағастар, башаҡлы үҫемлектәр “урман”, “болон”,”баҡса”. Үҫемлектәрҙең өлөштәрен (һабағы, япрағы, сәскәһе, орлоғо, емеше) таныу, атамаһын белеү. Үҫемлектәрҙе төрлө юлдар менән үрсетеү ысулдары тураһында мәғлүмәт биреү (орлоҡтан, ботаҡтан, мыйыҡтан, япраҡтан). Үҫемлектәрҙең кешелек һәм хайуандар өсөн файҙаһы тураһында әңгәмәләшеү, бәшмәктәр менән танышыуҙы дауам итеү.<br>Хайуандар донъяһы: көҙ тәбиғәтенең хайуандар тормошода сағылышы, уларҙың йәшәү, ашарға табыу, торлаҡ хәстәрләү үҙенсәлектәрен билдәләү. Балаларҙа хайуандарға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.<br>Баланың хайуандар донъяһы тураһында күҙаллауын киңәйтеү, системаға һалыу һәм дөйөмләштерергә өйрәтеү: хайуандар, ҡоштар, бөжәктәр, үрмәкселәр, балыҡтар, ер - һыу (тәлмәрйен), һөйрәлеүселәр (кеҫәртке, ташбаҡа, йылан, крокодил) тураһында һөйләү. Йомаҡтар | Гербарийҙар һәм коллекциялар йыйыу.<br>«Башаҡлы үҫемлектәр»<br>“Көҙгө япраҡтар”<br><br>“Көҙ портреты” балалар эштәренән күргәҙмә.<br><br>Проект эше<br>“Экологик һуҡмаҡ”<br><br>Көҙгө тәбиғәткә экскурсия |

| | | |
|---|---|---|
| | сисеү, көҙ билдәләре буйынса халыҡ әйтемдәрен өйрәнеү. Йәшелсә – емештәр тураһында йомаҡтар уйлап сығарыу. Видеофильмдар, слайдтар ҡарау. Тәжрибәләр үткәреү.<br>Нәфис әҙәбиәт: Г. Яҡупова “Миләш һыйы”, Д. Булгакова “Ҡунаҡ көҙҙәр” , М. Хисмәтуллина “Япрактар”, А. Белкин “Көҙгө ямғыр” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Көҙ килде тыуған еремә”, “Көҙ байлығы” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Ниндәй бәшмәктәрҙе беләһең?”, “Ағастар кемгә кәрәк?”, “Нимә үҫемлектәр менән туҡлана?”, “Бойҙайҙан нимәләр эшләп була?”, “Дарыу үләндәре” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был ҡайҙа үҫә?”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә”, “Тәбиғәт күренештәре”, “Серле моҡсай”, “Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт”, “Тамыры, һабағы, емеше, орлоғо”, “Был ҡасан була?”, “Тәбиғәттә үҙ – үҙенде тотоу ҡағиҙәләре”, “Был үҫемлек нимәнән үҫә?” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Һау булығыҙ, аҡкоштар” Ғ. Сәлмәнов, “Көҙ” Х. Заимов көйө һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйын: “Баҡсасы” (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, шарттар булдырыу, сюжет ҡороу, ролдәрҙе бүлешеү, бер-береһе менән килешеп уйнарға, килеп сыҡҡан бәхәсте урында хәл итергә өйрәтеү).<br>Хәрәкәтле уйын: “Борсаҡ”, Бәшмәк йыйыу” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Көҙгө пейзаж”( коллектив эш), “Баҡсалағы матурлыҡ” һ.б.<br>Әүәләү: “Бәшмәк”, “Шиңмәҫ сәскә” һ.б.<br>Йәбештереү: “Көҙһылыуға бүләк- натюрморт” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Йәшелсә һаҡлағыс” (лего конструкторҙар)<br>Хәүефһеҙлек:“Ағыулы бәшмәктәр”,“Юлдағы тыйыусы билдәләр”, “Урамда сит кешеләр” һ.б. | |
| Октябрь<br>1-2 аҙна<br>“Башҡортостан – гөлбостан” | Тыуып үҫкән илебеҙ, еребеҙ тураһында белемде киңәйтеү: Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы Өфө менән таныштырыу. Тыуған илебеҙ – Башҡортостандың географик яҡтан урынлашҡан урыны, төрлө өлкә, илдәр менән сикләнгәнлеген (Татарстан республикаһы, Силәбе өлкәһе һ.б.) билдәләү.<br>Башҡортостанда төрлө милләт халыҡтары йәшәүен, уларҙың мәҙәниәте, теле, ғөрөф-ғәҙәттәре хаҡында күҙаллауҙарҙы булдырыу. Үҙ иле, теле, ере өсөн ғорурланыуҙы үҫтереү.<br>Башҡортостан Республикаһының дәүләт тамғаларын иҫкә төшөрөү (герб, флаг, гимн) һәм нығытыу. Башҡортостан тураһындағы йырҙар, шиғырҙар өйрәнеү.<br>Башҡортостан Республикаһының тәбиғәт ҡомартҡылары булып иҫәпләнгән урындарҙың һүрәттәрен, иллюстрациялар ҡарау «Талҡаҫ күле», Ғәҙелша шарлауығы, “Ҡылтабан күле”, “Шүлгәнташ мәмерйәһе” һ.б. Энциклопедиялар менән эш.<br>Башҡортостандың иң тәрән, иң оҙон, иң мул һыулы күлдәре, иң бейек, иң ҙур тау - йылғалары тураһында мәғлүмәтте байытыу; тәбиғәт ҡомартҡыларына, Башҡортостандың ете мөғжизәһенә ыңғай ҡараш тәрбиәләп, уларҙы һаҡлап ниндәй эштәр башҡарылыуын аңлатыу.<br>Башҡорт халҡының бөтә донъяға билдәле күренекле шәхестәре (яҙыусылар, йырсылар, ҡурайсылар, бейеүселәр һ.б.) эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәтте байытыу. Улар ижадына | Байрам<br>“Башҡортостан – алтын бишегем”<br><br>Проект эше<br>“Башҡортостандың ете мөғжизәһе” |

| | | |
|---|---|---|
| | ҡыҙыҡһыныу уятыу, сәнғәт әҫәрҙәрен тыңлау, ҡарау, тирмә менән таныштырыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Башҡортостандың ете мөғжизәһе”, “Башҡортостан – алтын бишегем” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Зоопарк”, “Китапхана”, “Ғаилә”, “Элемтә бүлеге” һ.б.(атрибуттар һайлап уйынды байытыу, шарттар булдырыу, сюжет ҡороу, ролдәрҙе бүлешеү, бер-береһе менән килешеп уйнарға, килеп сыҡҡан бәхәсте урында хәл итергә өйрәтеү).<br>Үҫтереүсе диалог: “Башҡортостанда үҫкән шифалы үҫемлектәр”, “Ҡыҙыл китап” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Ниндәй милләт кейеме?”, “Был ниндәй халыҡтың кейеме?”, “Биҙәкте төҙө”, “Файҙалы ҡаҙылмалар ”, “Флагты төҙө” ,“Халыҡ уйынсығын төҙө” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ирәндек”, “Тыуған ил” Ҡ. Даян”, “Башҡортостан” Р. Хисаметдинова,“Ҡылтабан”, “Йылҡы сыҡҡан күл”,“Шүрәле” һ.б<br>Хәрәкәтле уйындар: “Наза”, “Тирмә”, “Аҡ тирәк - күк тирәк”, “Ҡурай”, “Еҙ бүкән”, “Һуҡыр тәңкә” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Сыңрау торна” , Гүзәл Өфөм башҡалам” Х. Әхмәтов, Ф. Ершова көйө һ.б., Гимн тыңлау.<br>Һүрәт төшөрөү: А.Игебаев “Тыуған ер - алтын бишек”, “Киске ҡала” һ.б.<br>Әүәләү: “Башҡорт аты ”Аҡбуҙат” һ.б.<br>Йәбештереү: “Ауыл архитектураһы” һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге:“Ихаталы ауыл өйө”, “Колонналы өйҙәр” һ.б. (ағас конструкторҙар, схемаға ҡарап)<br>Хәүефһеҙлек: “Иғтибарлы бул!”, “Өйҙә яңғыҙ ҡалғанда”, “Урамдағы сит кешеләр” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Икмәк – тормош сығанағы” | Баланы иген игеүселәрҙең баҫыуҙағы эштәре (урып йыйыу, элеваторға оҙатыу һ.б.) эштәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Бойҙай, һоло, арпа һ.б. бөртөклө үҫемлектәрҙе айырыу, уларҙан әҙерләнгән ризыҡтар тураһында мәғлүмәт биреү. Уларҙы үҫтереү ысулдары менән таныштырыу. Ҡый үләндәрен танырға, айырырға өйрәтеү. Ауыл хужалығы эшсәндәренең һөнәрҙәре тураһында балаларҙың белемен киңәйтеү. Элементар экологик күҙаллауҙар үҫтереүҙе дауам итеү. Башҡорт милли аштары (өләш, ыумас, һурпа, ҡурмас, күмәс, талҡан, бауырһаҡ, бәлеш) менән таныштырыуҙы дауам итеү. Болонда, туғайҙа үҫкән үҫемлектәр тураһында балаларҙың белемен арттырыу. Башҡортостанда хужалыҡ эштәре – игенселек менән таныштырыуҙы дауам итеү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Икмәк – тормош сығанағы”, “Икмәк нисек өҫтәлгә килә?” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Икмәк беҙгә ҡайҙан килә?”, “Йомро икмәк нимәне осратҡан?”, модель-схемалар ярҙамында ижади һөйләүҙәр һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Нимә бешерҙем?”, “Икмәк бешерер өсөн нимә кәрәк?”, “Үҫемлекте атап әйт”, “Өләштәрен әйт”, “Был нидәй ашамлыҡ?”, “Тәме буйынса таны”, “Икмәк магазинында” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Магазин”, “Транспорт”, “Ырҙында”, “Элеватор ”, “Икмәк магазины” һ.б.<br>(атрибуттар һайлап уйынды байытыу, шарттар булдырыу, сюжет ҡороу, ролдәрҙе бүлешеү, бер- | Гербарий төҙөү:<br>“Башаҡлы үҫемлектәр”<br><br>Квест уйыны<br><br>Викторина |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | береһе менән килешеп уйнарға, килеп сыҡҡан бәхәсте урында хәл итергә өйрәтеү).<br>Һүрәт төшөрөү: “Икмәк төрҙәре”, “Магазин кәштәһендә” һ.б.<br>Йәбештереү: “Ҡамыр аштары” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ауыл хужалығы техникаһы” (“техно”конструкторы технологик карта буйынса).<br>Нәфис әҙәбиәт:“Ыумас” Р. Ураҡсина, “Талҡан” Р. Ураҡсина,“Игенсегә”, Ә. Каримова – Әсәдуллина, “Әпәкәй” К. Булат, “Бойҙай бөртөгө”, “Еңел икмәк”, Ф. Туғыҙбаеваның “Бойҙай аштары” хикәйәһе һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Аҡ ҡалас”, “Ҡоймаҡ” һ.б.<br>Тәжрибә:“Бойҙай, арыш нисек үҫеп сыға?”<br>Хәүефһеҙлек: “Юл хәрәкәте билдәләре”, “Электр приборҙарынан һаҡ бул!” һ.б. | |
| Ноябрь<br>1-2 аҙна<br>“Беҙ Рәсәйҙә йәшәйбеҙ”<br><br>“Дуҫлыҡ ептәре” | Тыуған ил - Рәсәй тураһында төшөнсәне киңәйтеү, Башҡортостан үҫешенә булышлыҡ итеүен аңлатыу. Уның баш ҡалаһы- Мәскәү, күп милләтле ил. Унда йәшәгән халыҡтың кәсебе, ғөрөф-ғәҙәте, мәҙәниәте тураһында мәғлүмәт биреү.<br>Берҙәмлек, татыулыҡ төшөнсәһен нығытыу һәм төрлө милләт халҡына дуҫтарса мөнәсәбәт, толерантлыҡ тойғоһон үҫтереү, башҡа ҙур ҡалалар һәм күрше өлкәләр менән таныштырыуҙы дауам итеү. Рәсәй Федерацияһының дәүләт тамғаларын (флаг, герб, гимн) үҙләштереү. Картала һәм глобуста Рәсәйҙе күрһәтеү.<br>Рус халҡының биҙәү – ҡулланма сәнғәте өлгөләрен формалаштырыу “Дымка уйынсығы”, “Хохлама”, “Городец биҙәктәре”, “Гжель”һ.б. Төрлө халыҡ уйындары өйрәнеү. Халыҡ ижады өлгөләре өйрәнеү. Ҡаланың крайҙы өйрәнеү музейына экскурсия. Видеояҙмалар ҡарау.<br>Энциклопедиялар менән эш. Төрлө халыҡтарҙың ауыҙ – тел ижады һәм сәнғәте аша уларға ҡарата дуҫлыҡ хисе, татыулыҡ, илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Дуҫлыҡ ептәре”, “Дуҫтарым төрлө-төрлө” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Был халыҡ уйынсыҡтары нимә һөйләй?” (дымка, ағас уйынсыҡтар) һ.б<br>Дидактик уйындар: “Флагты айыр”, “Был ниндәй халыҡтың гимны”, “Был ҡала ҡайҙа урынлашҡан?”, “Ниндәй илдәр беләһең?”.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ватан” Р. Ниғмәти, “Минең халҡым” М. Кәрим.һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: Гимн тыңлау, “Ватан “М. Хәй.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Дуҫ ғаилә” һ.б. ( атрибуттар һайлап уйынды байытыу, шарттар булдырыу, сюжет ҡороу, ролдәрҙе бүлешеү, бер-береһе менән килешеп уйнарға, килеп сыҡҡан бәхәсте урында хәл итергә өйрәтеү).<br>Һүрәт төшөрөү: “Милли кейемдәге ҡурсаҡтар”, “Дымка уйынсығы”, “Гжель” һ.б.<br>Йәбештереү: “Рәсәй флагы”, “Матрешканы биҙә” һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Ҡала биҫтәһе”, “Конгресс - холл” (кликко, конструкторҙар, шартлы билдәләр, схема, юл билдәләре, ваҡ уйынсыҡтар) | Ҡурсаҡтарҙан ижади күргәҙмә:<br>«Дуҫлыҡ ептәре»<br><br>Викторина |

| | | |
|---|---|---|
| | Хәүефһеҙлек: “Әгәр юлда аҙашһаң?..”, “Ҡала урамдары” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Әсә күңеле балала, бала күңеле далала” | Әсәйҙәрҙең һөнәрҙәре тураһында баланың белемен киңәйтеүҙе дауам итеү (сәс ҡырҡыусы, хат ташыусы, төҙөүсе, тегенсе һ.б.). уларҙың эш ҡоралдары тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Балаларға иң яҡын кешеләренә ҡарата һөйөү, йылы мөнәсәбәт тәрбиәләү, хәстәрлекле ҡараш үҫтереү, уларҙың үҙҙәренең яҡшы эштәре менән ҡыуандырыуы теләген үҫтереү. Баланың әсәй өсөн иң яҡын ярҙамсыһы икәнлеген төшөндөрөү. Балаға тәрбиә буйынса халыҡ мәҡәлдәре, ҡанатлы һүҙҙәр тураһында белемдәр биреү. Гендер тәрбиәһе биреүҙе дауам итеү.Экскурсиялар ваҡытында тормош хәүефһеҙлеген һаҡлау ҡағиҙәләрен нығытыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Әсәйҙәр һөнәрҙәре”,“Минең әсәйем ҡояш” Ф. Ғөбәйҙуллинаның шиғыры буйынса.һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Әсәйемә ярҙам итәм”, “Әсәйең тураһында нимә һөйләй алаһың?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был предмет кемгә кәрәк?”, “Буяусы булам тиһәң”, “Айырып һал”, “Ярай - ярамай”, “Һүҙҙәр теҙмәһе”, “Наҙлы һүҙҙәр” , “Был кемдең эш ҡоралы” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Ғаилә”, “Магазин”, “Бөҙрәхәнә”, “Больница”һ.б. (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, шарттар булдырыу, сюжет ҡороу, ролдәрҙе бүлешеү, бер-береһе менән килешеп уйнарға, килеп сыҡҡан бәхәсте урында хәл итергә өйрәтеү).<br>Нәфис әҙәбиәт: Ф. Туғыҙбаева “Яңы күлдәк” М. Ғәли “Иң матур һүҙ”, В. Маяковский, “Әсәйем ҡулы” Ф. Мөхәмәтйәнов, “Кем булырға”, И. Рысҡолова “Әсәйемә булышам”,<br>А. Йәғәфәрова “Әсә” , “Ҡаҙҙар аҡҡоштар”, “Кәкүк”, “Бүре менән кәзә бәрәстәре”, А. Йәғәфәрова “Һарысәс“ һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Әбей әбей ни ҡаҙаһың?”, “Ҡаҙҙар аҡҡоштар”, “Төйлөгән” һ.б.<br>Йәбештереү: “Әсәйемә бүләккә ваза” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү “Минең әсәйемдең портреты” һ.б. (ике төҫтө ҡушып эшләргә өйрәтеү).<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ваза” (лего конструкторҙар)<br>Хәүефһеҙлек: “Иғтибарлы бул!”, “Өйҙә яңғыҙ ҡалғанда”, “Урамдағы сит кешеләр” һ.б. | Күргәҙмә<br>“Әсәйем портреты”<br><br>Күңел асыу сараһы<br>Концерт<br><br>Электрон китап:<br>“Әсәйгә бүләккә - китап” |
| Декабрь<br>1-2 аҙна<br>“Ҡышҡы селлә” | Ҡышҡы тәбиғәт күренештәре тураһында баланың белемен тәрәнәйтеү (ҡар, бәҫ, боҙ, ҡырау) Һауа торошо тураһында халыҡ һынамыштары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Йыл миҙгелдәренең үҙгәреүе кешегә, үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһына тәьҫир итеүе тураһында белемдәрен киңәйтеү. Ҡыш айҙары атамалары менән танышыу. Ҡышҡы спорт төрҙәре, һәр ваҡыт ҡыш булған урындар (Арктика һәм Антарктика йәнлектәре) тураһында таныштырыуҙы дауам итеү. Һыуҙың бер хәлдән икенсегә күсеүен тәжрибәләр аша нығытыу (ҡар-боҙ, һыу-пар).<br>Ҡыш көнө үҙеңдең һаулығыңды, хәүефһеҙлегеңде һаҡлау, һаҡланыу сараларын нығытыу. Ҡыш миҙгеленә, күренештәренә ҡағылышлы башҡорт халыҡ ижады өлгөләре менән танышыу (йомаҡ, мәҡәл, әкиәт, һынамыштар, легендалар). Ҡыш миҙгелендә үткәрелгән байрамдар, йолалар менән таныштырыуҙы дауам итеү: ҡышҡы селлә, Нардуған байрамы ни өсөн үткәрелеүен аңлатыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Ҡышҡы Нардуған”, “Ҡышҡы урманға сәйәхәт” һ.б. | Балалар ижады күргәҙмәһе:<br>«Беҙҙең яҡта ҡыш»<br><br>Квест- уйын, викторина һ.б. |

| | | |
|---|---|---|
| | Үҫтереүсе диалог: “Ҡыш билдәләре тураһында һөйлә”, “Ике һаран айыу балаһы” әкиәте буйынса һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был ҡайсаҡ була?”, “Һүрәткә ҡарап һөйләйбеҙ”, “Ҡыш билдәләрен әйт”, “Мнемотаблица”, ”Экологик пирамида”, “Туҡланыу сылбыры”, “Был йәнлек ҡайҙа йәшәй?”, “Һөйләү буйынса таны”, “Был ниндәй спорт төрө?” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: Ф. Рәхимғолова “Урамда”, Х. Назар “Тәүге ҡар”, “А. Белкин “Матушка зима”,<br>В. Никитенко “Ҡар бөртөктәре”, “Һыуыҡ менән һалҡын”, “Морозко”, Р. Сабитов “Ҡышҡы эштәр” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Шыршы”, “Ҡышҡы тәбиғәт” һ.б.<br>Әүәләү: “Боҙбармаҡтар” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: М. Бикбова “Ҡыш”, “Тышта ҡар яуа” Р. Сәлмәнов һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Ғаилә”, “Һунарсы” һ.б. (атрибуттар һайлап уйынды байытыу, шарттар булдырыу, сюжет ҡороу, ролдәрҙе бүлешеү, бер-береһе менән килешеп уйнарға, килеп сыҡҡан бәхәсте урында хәл итергә өйрәтеү).<br>Хәрәкәтле һәм халыҡ уйындары: “Туңдырғыс”, “Алтын тау” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ҡышҡы урман” һ.б. (тәбиғәт материалдарынан)<br>Хәүефһеҙлек: “Айболит ҡағиҙәләре” , “Боҙбармаҡтар” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Яңы йыл килә!” | Баланың Яңы Йыл байрамы тураһында белемен киңәйтеү: байрамға әҙерләнеү, үҙ ҡулдары менән әҙерләнгән бүләктәрҙе тапшырып яҡындарын ҡыуандырыуҙан ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо алыу. Яңы йыл байрамы донъяның төрлө халыҡтар араһында төрлөсә үткәрелеүе тураһында төшөсә биреү. Ҡыш бабайҙың тыуған иле Лапландия тураһында мәғлүмәт биреү, ҡыш миҙгелдәре тураһында баланың белемен киңәйтеүҙе дауам итеү. Башҡа илдәрҙә Яңы йыл байрамы нисек үткәрелеүе тураһында мәғлүмәт биреү. Төркөм бүлмәһен һәм уйын майҙансыҡтарын байрамса биҙәү.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “Яңы йыл”.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Ҡыш бабай ҡайҙа йәшәй?”, “Һыуыҡ менән һалҡын” башҡорт халыҡ әкиәтен һөйләү һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Шыршы ҡайҙан беҙгә килгән?”, “Яңы йыл байрамын көтәһеңме?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Ҡышҡы байрамдар”, “Ҡышҡы уйындар”, “Һүҙҙәр теҙмәһе”, “Һаулыҡ пирамидаһы ” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Кем шәберәк”, “Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “М. Бикбова “Ҡыш бабай” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт уҡыу: Д. Ҡадир “Шыршы”, Г. Батталова “Ҡыш бабай” һ.б. Шиғырҙар ятлау<br>Ф. Рәхимғолова “Яңы йыл”, Ҡ. Даян “Яңы йыл байрамы”, Г. Йыһангирова “Аҡуҙатта елдереп” һ.б.<br>Тәжрибә үткәреү: “Ниндәй ҡарҙан саңғыла йөрөү еңелерәк?”.<br>Ситуациялы хәл: “Әгәр ҡунаҡ килһә?” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “ Шыршыны шәм менән биҙәмә” , “Шырпы уйынсыҡ түгел” һ.б. | Шыршы байрамына уйынсыҡтар әҙерләү<br><br>Яңы йыл байрамы |

| | | |
|---|---|---|
| | Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Шыршыға тылсымлы уйынсыҡтар” һ.б. (лего конструкторҙар)<br>Сюжетлы - ролле уйындар: балалар инициативаһынан сығып уйын темаһы һайлау, ролдәр билдәләү, ваҡиға тураһында һөйләшеү, бер-береһе менән дуҫ, татыу уйнау һ.б.<br>Әүәләү: “Ҡарһылыу” Р.Ураҡсина шиғыры буйынса һ.б.<br>Хәүефһеҙлек:”Пиротехника ҡурҡыныс янай”, “Һаҡ бул, гирлянда!” һ.б. | |
| Ғинуар<br>1-2 аҙна<br>Каникулдар<br>“Хайуандар һәм ҡоштар донъяһы” | Тыуған яҡтың хайуандар донъяһы менән таныштырыуҙы дауам итеү, уларҙың йәшәүен, ашарға табыу, торлаҡ хәстәрләү үҙенсәлектәре айырмалыҡтарын билдәләү. Урман мөхитендә йәшәүсе тереклектең бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә һәм уларҙың туҡланыу сылбырының бер-береһенә бәйле булыуын күҙаллау.<br>Хайуандарҙың тәбиғәттәге үҙгәрештәргә ҡарата ҡулайлашыуы, тереклек итеү шарттары, мөһим булған ихтыяждары, кешегә файҙаһы, зыяны тураһында мәғлүмәтте киңәйтеү, ҡылыҡтарын өйрәнеүҙе камиллаштырыу. Төрлө хайуандарҙың ҡышлауға төрлөсә әҙерләнеүе (аҙыҡ туплау, май йыйыу, йөн ҡойоу һәм алмаштырыу, йоҡоға китеү, ҡоштарҙың йылы яҡҡа осоуы, балыҡтарҙың һыу төбөнә төшөүе, бөжәктәрҙең ағас ҡайырылары араһында ҡатып ҡалыуы һ.б.) менән таныштырыу. Йыртҡыс ҡоштар тураһында мәғлүмәт биреү. Башҡа климатик зонала йәшәүсе хайуандар: эҫе ерҙә (Африка) - фил, жираф, дөйә, арыҫлан; Арктикала (төньяҡ полюс) аҡ айыуҙар, Антарктидала - пингвин, ә беҙҙең урмандарҙа айыу, бүре, ҡуян һ.б. хайуандар менән танышыу.<br>Күсмә һәм ҡышлаусы ҡоштар тураһында мәғлүмәтте байытыу, уларҙы таный, айыра белеү, тышҡы ҡиәфәте, холҡо, туҡланыуы, үрсеүе тураһында белемдәрен киңәйтеү. Кешенең ҡоштарға хәстәрлек күрһәтеүе, тағараҡ элеү, ем һалыу. Күсмә ҡоштарҙың йылы яҡҡа китеү сәбәбен аңлатыу, ҡоштарҙың кешегә һәм тәбиғәткә файҙаһын асыҡлау.<br>Ҡурсалауға мохтаж «Ҡыҙыл китап»ка ингән йәнлек ҡоштарҙы таныу: ыласын, тумыртҡа, бөркөт, өкө, ҡор, бүҙәнә, ҡыр тауығы, бәрҙе, шәшке, көҙән һ.б. Альбомдар, һүрәттәр ҡарау.<br>Белем биреү ваҡиғаһы: “Өләсәйем ихатаһында”<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Йорт хайуандарының кешегә файҙаһы һәм зыяны”, “Хайуандарҙың кеше һаулығына файҙаһы”һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Нимә, нисек хәрәкәтләнә?”, “Ниндәй ҡоштарҙы, хайуандарҙы беләһең?..” һ.б.<br>Ситуациялы хәл: “Ҡошсоҡҡа тышта һыуыҡ...”<br>Һүҙле уйын: “Өнгә һүрәт һайла” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: М.Хисамова “Хәстәрле шыршы турғайы”, С.Муллабаев “Ҡармаҡлап күп балыҡ тоттом”, “Ҡуяндар” С. Әлибаев, “Ала һыйыр” А. Йәғәфәрова, “Турғай” Г. Йыһангирова,<br>Р. Нигматуллина “Урман музыканттары”, “Төлкө менән әтәс”, “Ала ҡарға”, “Бүре менән кәзә”, “Турғай балаһы” Ф. Рәхимғолова, ”Хайуандарҙың бәхәсләшеүе” А. Йәғәфәрова һ.б.<br>Театр уйыны: “Йорт хайуандары, ҡоштары”<br>Сюжетлы - ролле уйын: “Зоопаркта”, “Музейҙа”, “Йылҡысылыҡ” һ.б. (уйын темаһы һайлау, ролдәр | Уйын – викторина:<br>«Башҡортостан йәнлектәре һәм ҡоштары»<br><br>Акция:<br>«Ҡоштар беҙҙең дуҫтар»<br>“Ҡоштарға тағараҡтар”<br><br>Проект эше<br>“Арктика йәнлектәре” |

| | | |
|---|---|---|
| | билдәләү, ваҡиға тураһында һөйләшеү, бер-береһе менән дуҫ, татыу уйнау һ.б.)<br>Хәрәкәтле уйын: “Турғайҙар һәм бесәй” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Балыҡты таны”, “Туҡланыу сылбыры”, “Рассамдың хатаһын төҙәт”,”Нимә ҡайҙа йәшәй?”, “Был ниндәй ҡош?”,”Ҡышлаусы ҡоштарҙы таны”<br>Әүәләү: “Шыршы турғайы”, “Африка йәнлектәре” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “ Әкиәт ҡошо”, “Урмандағы хайуандар” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Салауат ғәскәре өсөн аттар”, “Хайуандар”, “Зоопарк” һ.б. (ағас, лего конструкторҙар, оригами)<br>Йырҙар өйрәнеү: “Турғайҙар” Д. Хәсәнчин, “Урманға” Р. Сәлмәнов.<br>Бармаҡ театры: “Тирмәкәй”, өҫтәл театры “Төлкө менән айыу” һ.б. | |
| Февраль<br>1-2 аҙна<br>“Халҡым биҙәктәре” | Башҡортостан халыҡ биҙәү - ҡулланма сәнғәте тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. Боронғо башҡорт халҡының тормошонда, көнкүреш әйберендә, кейем-һалымында ҡулланған биҙәк өлгөләрен танырға, ҡулланышын белергә, атамаһын әйтергә һәм борондан халыҡтың нескә зауыҡлы, ижади оҫталығының юғары булыуын аңлатыу.<br>Сәнғәт әйберҙәренең биҙәге буйынса (символик график теле) башҡорт, рус һәм башҡа милләт халыҡ биҙәктәрен айыра һәм төшөрә белеү, уларҙы һүрәтләү эшмәкәрлегендә ҡулланыу. Тирә - йүндә һәм сәнғәт әҫәрҙәрендә уларҙың төрлө сигеү, нағышлау, сүпләү, аҫалау, йәбештереү, ағасты һырлау, семәрләү, ювелир әйберҙәрҙә ундағы орнаменттар бирелешен һәм уларҙың үҙенсәлектәрен күрһәтеү. Башҡортостандың ер аҫты байлыҡтарын (баҡыр, көмөш, алтын, мрамор, гранит, йәшмә) эшкәртеү ысулдары тураһында мәғлүмәтте байытыу (таштан биҙәнеү, ювелир әйберҙәрҙе; металлды сүкеү, иретеү) уларҙан эшләнгән сувенирҙар күргәҙмәһен булдырыу.<br>Оҫталар хеҙмәтенә ихтирам һәм ғорурлыҡ тойғоһон үҫтереү.<br>Һүрәт - иллюстрациялар ҡарау, һүрәт төшөрөү дәрестәрендә башҡорт халыҡ биҙәктәре ярҙамында кейемдәрҙе, һауыт - һабаларҙы биҙәү һ.б.<br>Өҫтәл уйындары: “Башҡорт биҙәге”, “Башҡорт орнаменттары”, “Ҡырҡылған һүрәттәр”, “Балаҫты дөрөҫ йый”, “Йомортҡаны биҙәгенән таны”(рус халыҡ уйыны) һ.б.<br>Һүрәт - иллюстрациялар ҡарау (түбәтәй, камзул, ҡашмау, күлдәк).<br>Һүрәт төшөрөү: “Камзулды биҙә”, “Ситек биҙәү”, “Мөғжизәле ҡалаҡ” (городец биҙәкле декоратив рәсем) һ.б.<br>Ваҡиға: “Тыуған көн” (яҡшы кәйеф, дуҫлыҡ мөнәсәбәте булдырыу)<br>Сюжетлы - ролле уйын: “Ҡунаҡ саҡырыу” (бергәләп уйнау, эшләү, этикет ҡағиҙәләре) һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Милли кейем”, “Өләсәйем һандығы”, “Башҡортостандың ер-аҫты байлыҡтары” һ.б:<br>Үҫтереүсе диалог: “Әгәр мин дизайнер булһам…”, “Әгәр мин модельер булһам…” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Беләҙек” , “Биҙәкле тау эсендә” Р. Ураҡсина, “Ҡашмау, сулпылар тектем” Р. Ураҡсина һ.б. Башҡорт халыҡ әкиәте “Ирәндек”, ”Алпамыша батыр”, татар халыҡ әкиәте | Күргәҙмә:<br>«Халыҡ биҙәктәре»<br><br>Папка йәймә:<br>“Башҡорт кейемдәре”<br><br>Викторина<br><br>Квест уйыны<br><br>Проект эше<br>“Мин йәшәгән мөхит” |

| | | |
|---|---|---|
| | “Батша ҡыҙы” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Орнаментты таны”, “Нимә артыҡ?”, “Кейем - һалымды ата”, “Сәлимәне байрамға кейендер”, “Ҡурсаҡты кейендер”, һүҙле - дидактик уйын: “Ç” өнөн тап” һ.б.<br>Әүәләү: “Ҡымыҙ өсөн тәпән эшләү”, “Картатайым түбәтәйе”, “Семәрле ижау” һ.б.<br>Йәбештереү: “Милли кейемдәр”, “Мараттың камзулын биҙә” һ.б.<br>Констуктив - модель эшмәкәрлеге: “Һандыҡ”, “Колонналы өйҙәр” һ.б. (ағас конструкторҙар, схема буйынса).<br>Хәрәкәтле уйын: “Тирмә”, “Ҡурайға йүгер” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул - ваҡ биҙәүестәр”, “Осло әйберҙәр” һ.б.<br>Уйын –ситуация: “Ҡурсағыма күлдәктәр” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйын: “Йөҙөк һалыш”, “Ҡурай”, “Йәбешкәк түңгәк” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Беләҙегем – йөҙөгөм” һ.б. | |
| 3- 4 аҙна<br>“Ил һаҡлаусылары” | Балаларҙың армия тураһында белемен камиллаштырыуҙы дауам итеү. Тыуған илде һаҡлау – ул ир-аттарҙың бурысы икәнлеген аңлатыу. Тыуған илгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү.<br>Төрлө хәрби һөнәрҙәр, хәрби ғәскәр төрҙәре (йәйәүле армия, һыу, һауа, танк ғәскәрҙәре), хәрби техника төрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Гендер тәрбиәһе биреү. Малайҙарҙа батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ, ҡыйыулыҡ кеүек сифаттары, ә ҡыҙҙарҙа буласаҡ ил һаҡсыларына ихтирам, патриотизм тойғоһон тәрбиәләү.<br>Урындағы крайҙы өйрәнеү музейына барыу, ҡуйылған экспонаттар менән ҡыҫҡаса таныштырыу. Батырҙарҙың ҡаһарманлығы мәңгеләштерелеүе (һәйкәл, бюст) тураһында мәғлүмәт биреү. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн хәрби орден - миҙалдар менән бүләкләнеүен күрһәтеү, уларға ҡарата ғорурлыҡ тойғоһон тәрбиәләү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Самолеттар зәңгәр күктә”, “Башҡорт атлы дивизияһы”, “Оҙатыу” Ә.Лотфуллин картинаһы буйынса һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Илебеҙ тыныслығы хәрбиҙәр ҡулында”, “Һин ҙурайғас һалдат булаһыңмы?”, “Мин командир булһам”, «Яҡташ батырҙарыбыҙ», “Башҡортостандың данлы улдары” (генерал Кусимов, генерал М. Шайморатов, М. Гәрәев, А. Матросов – Ш.Мөхәмәтйәнов, башҡа милләт геройҙары менән таныштырыу Иванов П. И. – сыуаш).<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Ил һаҡсыһы”, “Һалдат”, “Осоусылар” һ.б. (уйын темаһы һайлау, ролдәр билдәләү, ваҡиға тураһында һөйләшеү, бер-береһе менән дуҫ, татыу уйнау һ.б.)<br>Дидактик уйындар:“Был ниндәй ғәскәр?”, “Эшләп бөтөр”, “Осоусы техниканы айырып һал” “Хәрбиҙәр”, “Транспорт төрҙәре”, “Һүрәтте йый”, “Моделенән таны”, “Ниндәй һөнәр эйәһенә тап килә?”, “Өлөштәренең атамаларын әйт”, “Карапты киҫәктәрҙән йый”, “Нимә һүрәтләп була?” (технологик карта) һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Олатайҙың фотоһы” М.Ғәли, “Һәйкәл” Т.Ғәниева, “Муса Гәрәев” В.Вәхитов, “Батыр менән айыу” (башҡорт халыҡ легендаһы), “Батырлыҡ” тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү һ.б. | Байрам:<br>«23 февраль – Ватан һаҡлаусылар көнө»<br><br>Балалар ижады күргәҙмәһе:<br>«Яҡташ батырҙар»<br><br>Атайҙар ҡатнашлығында музыкаль – спорт байрамы “Ир – бала илгә терәк”<br><br>Фотокүргәҙмә:<br>“Атайым ил һаҡсыһы”<br><br>Виртуаль экскурсия “Тыуған еремдең данлыҡлы кешеләре”<br><br>Ғәскәр төрҙәре буйынса уйынсыҡтар коллекциялары йыйыу |

| | | |
|---|---|---|
| | Әүәләү: “Хәрби техника” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Самолеттар зәңгәр күктә”, “Һалдаттарға ҡулъяулыҡтар” һ.б.<br>Конструктив - модельэшмәкәрлеге: “Космодром”, “Өфө аэропорты” һ.б. (магформерс, схема)<br>Йәбештереү: “Башҡорт атлылар ғәскәре” һ.б.<br>Оригами эшләү: “Буденовка”, “Кәмә”, “Самолет” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар:“Марш”, “Мөйөш алыш”, “Һалдаттар”, “Флаг алышыу” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек буйынса әңгәмә: “Ҡурҡыныслы боролош”, “Үтергә тыйыла”, “Инеү юлы юҡ”, “Боҙҙа һаҡ бул!” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: халыҡ йырҙары (“Любизар”, “Порт-Артур”, “Ҡаһым түрә”), бейеүҙәре (“Байыҡ”, “Перовский”) һ.б. | |
| Март<br>1-2 аҙна<br>“Әсәләр нур сәсәләр” | 8 март байрамы тарихы тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреү. Ҡатын - ҡыҙҙар көнөнә арналған байрам булыуын аңлатыу, уларға иң ҙур ихтирам, һөйөү тойғоһон тәрбиәләү . Әсәйҙәргә ҡарата мөнәсәбәт башҡорт халҡының ижадында – әкиәт, легенда, мәкәл-әйтем, йырҙарҙа сағылыуын күрһәтеү.<br>Өләсәйгә, инәйгә, ололарға ярҙам кәрәклеге хаҡында урындағы миҫалдарға нигеҙләнеп төшөндөрөү. Әсәйҙең, ҡатын-ҡыҙҙың һөнәрҙәре менән танышыу, әсә кешенең йәмғиәт ағзаһы булараҡ үҙенә генә хас сифаттары, башҡарған эше тураһында төшөнсә биреү. Гендер тәрбиәһе буйынса белем биреүҙе дауам итеү.<br>Малайҙарға ир-егеттәрҙең ҡатын-ҡыҙға ҡарата ихтирамын һәм иғтибарлы булыуын формалаштырыу. Балала иң яҡын кешеһенә һаҡсыл ҡараш, йылы мөнәсәбәт, яҡшы эштәре менән ҡыуандырыу теләге үҫтереү. Бүләктәр әҙерләүгә балаларҙы йәлеп итеү.<br>Ваҡиға: “Ҡатын-ҡыҙҙар көнө”<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Ғаилә”, “Әсәйҙәр һәм ҡыҙҙар”, “Магазин”, “Больница”, “Ателье” һ.б. (уйын темаһы һайлау, ролдәр билдәләү, ваҡиға тураһында һөйләшеү, бер-береһе менән дуҫ, татыу уйнау һ.б.)<br>Уйын - ситуция: “Әгәр мин әсәй урынында булһам…” , “Әгәр әсәй шат булһа…”, “Әсә нимәгә өйрәтә?” һ.б.<br>Уйын - диалог: “Бүлмәһен ата”, “Әсәйеңде ҡотла!” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Берҙән- берем- әсәйем”, “Әсәйҙәр һөнәре”, “Әсәйҙәр донъя тотҡаһы” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Әсәйем берҙән – берем”, “Әсәйгә нисек ярҙам итәһең?” “Әсәйемә нимә бүләк итер инем?”, “Әсәй өйҙә юҡ”, “Минең әсәйем ...” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге:“Йорт йыһаздары”, “Поезда өләсәйгә ҡунаҡҡа” һ.б. (төрлө конструкторҙар, леголар ҡулланып)<br>Йәбештереү: “Өләсәйем ҡурсағы”, “Ҡулъяулыҡтар биҙәйек” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Апайым доктор” Ә. Вахитова, “Әсә” А. Йәғәфәрова, “Көлһылыу”, “Ялҡау ҡыҙ”,“Кошҡа әйләнгән әбей”, “Үгәй ҡыҙ Гөлбикә” әкиәте, “Әсәйем ҡулы “ Ф. Мөхәмәтйәнов, | Байрам<br>“Ил биҙәге – ҡатын ҡыҙ”<br><br>Китапсыҡ төҙөү:<br>«Әсәйгә бүләккә - китап»<br><br>Балалар һүрәттәренән күргәҙмә<br><br>Әсәйҙәрҙең ҡул эштәренән күргәҙмә |

| | | |
|---|---|---|
| | “Йырсы гөлдәр” З. Ҡотлогилдина, “Әсәкәйем” Р.Ураҡсина, “Алтын ҡулдар” А.Игебаев һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Өлөштәрен әйт”, “Серле тоҡ”, “Әсәйем һөнәре”, “Кем нимә эшләй?”, “Кем күберәк наҙлы һүҙ әйтер?”, “Һөнәрҙең эш ҡоралдарын ата”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Әбей әбей ни ҡаҙаһың?”, “Ҡаҙҙар - аҡҡоштар”, “Төйләгән”, “Буяу һатыш”һ.б<br>Уйын - фантазия: “Мин әсәйемә нисек ярҙам итәсәкмен” һ.б.<br>Әүәләү: “Вазалағы сәскәләр” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Әсәйем портреты”, “Әсәйемә бүләккә минән матур гөлләмә” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, плита”, “Ярамаған әйберҙәр”, “Осло әйберҙәр” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Әсәйҙәр байрамы” Р.Ураҡсина, “Минең өләсәйем” Ф.Гершова йыры һ.б.<br>Сәхнәләштереү: “Эй,һин бысраҡ ҡыҙыҡай!” А.Барто<br>Һаулыҡ һаҡлау буйынса әңгәмә: А. Йәғәфәрова “Һарысәс“.<br>Үҙ – үҙеңде хеҙмәтләндереү: “Мин ярҙамсы“, “Әсәйемә булышам” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Халҡым көнкүреше”<br><br>“Халҡым йолалары, ғөрөф – ғәҙәттәре” | Башҡортостанда йәшәгән халыҡтың кәсеп, шөғөлдәре менән таныштырыуҙы дауам итеү: кәсеп - быйма баҫыу, шәл бәйләү, балаҫ һуғыу, тал үреү, ағастан һауыт-һаба, кәрәк – яраҡ яһау, йөндән кейем-һалым әҙерләү һ.б. шөғөлдәре - малсылыҡ, игенселек, солоҡсолоҡ, һунарсылыҡ (ҡоралдары – суҡмар, ҡапҡан, ҡороҡ, һ.б.), йылҡысылыҡ, умартасылыҡ. Башҡортостан халҡының кәсеп - шөғөләнә ҡыҙыҡһыныу һәм уның тарихына хөрмәт тәрбиәләү. Шулай уҡ Башҡортостандв йәшәүсе башҡа милләт халыҡтарының кәсеп – һөнәрҙәренә аңлатма биреү. Кәсеп - шөғөлдәргә ҡағылышлы әйберҙәрҙең нимәнән, нисек эшләнеүенә иғтибар итеү, сағыштырыу, һығымта яһау. Хәҙерге көндәрҙә лә республикабыҙҙың ауыл хужалығы тармаҡтары күп төрлө, ата-бабаларҙан килгән кәсеп-шөғөлдәр яңыртыла, камиллаштырыла, яңы төр хужалыҡ итеү формалары (фермерҙар) барлыҡҡа килеүен, төҙөлөш эштәренең алға китеүе, баҡсасылыҡ һәм башҡа төр кәсеп – шөғөлдәрҙең барлығын аңлатыу.<br>Халыҡтың борондан килгән йолалары, ғөөрөф-ғәҙәттәре, аш-һыуы, кейеме, йыр-моңона ҡыҙыҡһыныу уятыу. Халыҡтың төрлө миҙгелдә үткәрелгән йолаларының әһәмиәтен төшөндөрөү («Ҡаҙ өмәһе», «Тула һуғыу», «Ҡатыҡ тәмләү»). Был йола – байрам ҡатын – ҡыҙ, балалар ҡатнашлығында үткәрелеүенең мәғәнәһен аңлатыу. Боронғо йоланың, ғөрөф-ғәҙәттең һаҡланыуын, һәр йоланың үҙ мәғәнәһе, маҡсаты, тәртибе булғанлығын аңлатыу.<br>Йәнлектәрҙең кешегә һәм хужалыҡҡа файҙаһы һәм зыяны тураһында мәғлүмәт биреү: бүре йыртҡыс хайуан, кешегә хәүеф янай, шул уҡ ваҡытта урман санитары ла; ҡуян игенгә, баҡсаға зыян килтерә. Һунарҙа алынған йәнлектәрҙең майы (айыу, бурһыҡ) дауа булып тора; айыу теше – күҙ тейеүҙән һаҡлай, тиреһенән – кейем-һалым (бүрек, биҙәүестәр, яға һ.б.) тегелә.<br>Ваҡиға: “Ҡаҙ өмәһе”<br>Ҡул эше: сыбыртҡы үреү (малайҙар), сәсмәү үреү (ҡыҙҙар).<br>Ҡорама йәбештереү: “Халҡыбыҙҙың музыка ҡоралдары”.<br>Эҙләнеү – тикшеренеү “Дөңгөр тауышы”. | Проект эше:<br>“Халҡым шөғөлө”<br><br>Квест уйыны<br><br>Викторина<br><br>Кескәйҙәргә китап – бүләк:<br>«Халҡым ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары»<br><br>Сибай ҡалаһының крайҙы өйрәнеү музейына маҡсатлы экскурсия |

| | | |
|---|---|---|
| | Сюжетлы – ролле уйындар: “Солоҡсолоҡ”, “Умартасылыҡ”, “Малсылыҡ”, “Йылҡысылыҡ”, “Беҙ келәм туҡыусылар  һ.б. (уйын темаһы һайлау, ролдәр билдәләү, ваҡиға тураһында һөйләшеү, бер-береһе менән дуҫ, татыу уйнау һ.б.)<br>Дидактик уйындар:“Көсеп – һөнәрҙе атап әйт“, “Ит аштары”,”Кәсеп – һөнәргә ҡағылышлы мәҡәлде әйтеп бөтөр”, “Йомаҡтар уйлап тап”, “Балаҫты төҙө”, “Һауыт – һабаны йый”, “Төҫө буйынса тап”, “Был ниндәй йыһаз?”, “Был һауыт – һаба нимәнән эшләнгән?”, “Һынлы сәнғәт материалдарын атап әйт”, “Һөт аҙыҡтары”, “Ҡымыҙ нисек эшләнә?” “Был ниндәй һауыт?”, “Һауыт нимәнән эшләнгән?”, “Мәҡәлде әйтеп бөтөр”, “Йомаҡтар уйлап тап”, “Сәлимә менән Марат өҫтәл артында”, “Киҫәктәрҙән төҙө”,”Башҡорт һауыт-һабаһын төҙө” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Халҡым йолалары”, “Солоҡсолоҡ”, “Ағас һәм туҙ һауыттар”, “Кейем ҡотлау” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Ағас һауыт-һаба”,“Бал нисек йыйыла?”, “Өләсәйҙә өмәлә”, “Олатайым-һунарсы”, “Балыҡҡа барғанда...”, “Заман һөнәрҙәре”, “Думбыра – башҡорт халыҡ ҡоралы”, “Данлыҡлы ҡумыҙсылар”,“Башҡорт халыҡ уйындары ҡайҙан килгән?”, “Һабантуйҙа”, “Бал ҡортоноң файҙаһы һәм зыяны ”, “Йорт хайуандары”  һ.б.<br>Уйын-ситуация: “Мин фермер”, “Һунарсыға нимә кәрәк?”, “Яңы кейем кейгәндә”,  “Бал ҡорто саҡһа?”<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Атҡа һарай”, “Умарта”, “Тирмә” һ.б. (легоконструкторҙар, оригами һ.б.)<br>Һүрәт төшөрөү: “Батмустағы сәскәләр”,“Сәлимәгә яңы күлдәк”,“Өләсәйем балаҫы”, “Балаҫты биҙә ” һ.б.<br>Йәбештереү: “Сәңгелдәк биҙәйбеҙ”, “Мөғжизәле ҡалаҡ” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ҡашығаяҡ” Ф.Туғыҙбаева, “Ете төҫө лә һыйған” Р.Заһиҙуллин, “Ҡурай”, “Һунарсы”  башҡорт халыҡ әкиәттәре.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Шыу- шыу, шыуҙырма”, “Йәшерәм яулыҡ”, “Аҡ тирәк- күк тирәк”, “Айыу һәм ҡуян”,”Айыу, бүре”, “Турғайҙар һәм бесәй”, “Хайуандар уйнай” һ.б.<br>Әүәләү: “Һунарсы батыр”, “Ҡымыҙ ҡоям көбөгә” һ.б.<br>Музыка: “Наза”,”Тула баҫыу” ,“Ҡымыҙ менән бейеү” һ.б. | |
| Апрель<br>1 аҙна<br>“Яҙ килә - яҙ килә ҡояш нурҙарын һибә” | Яҙ миҙгеле билдәләре, күсер ҡоштарҙың әйләнеп ҡайтыуы, йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт араһындағы бәйләнеш тураһында баланың белемен камиллаштырыу. Хайуандарҙың һәм үҫемлектәрҙең тәбиғәттәге үҙгәрештәргә ҡарата яраҡлашыуын аңлатыу. Урман, болон, ялан, ҡыр, бөжәктәр тураһында  күҙаллауҙарын киңәйтеү.<br>Тәбиғәттә үҙ –үҙеңде тотоу, хәүефһеҙлек ҡағиҙәһен өйрәнеүҙе дауам итеү.  Баҡсалағы яҙғы эштәр, ябай  экологик тәрбиә тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. Тәбиғәткә бәйле мәҡәлдәр, йомаҡтар, әйтемдәр өйрәнеү. Миҙгел  байрамы Нәүрез тураһында мәғлүмәттәр биреү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Тәбиғәттә яҙ”, “Ҡыр хайуандары нисек ҡышлай?”, “Урман докторы” йәки | Күңел асыу сараһы<br>“Яҙ килә”<br><br>Викторина |

| | | |
|---|---|---|
| | яҙғы урманға сәйәхәт” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Яҙҙың тәүге сәскәләре”, “Ниндәй бөжәктәрҙе беләһең?”,“Яҙ тураһында нимәләр беләһең?”, “Нимә ул экологик тамғалар?” һ.б.<br>Уйын - фантазия: “Мин тәҙрә аша нимә күрәм?” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Аҡман – тоҡман” З. Исламова хикәйәһе, “Ағастар йоҡонан уяна” З. Исламова, “Нәҙекәйбил” А. Йәғәфәрова, “Весна” А. Бондаренко шиғырҙары, “Яҙ бүләге” А.Йәғәфәрова, “Ике ҡояш” Ә.Вәхитова, “Гөрләүектәр” Г.Юнысова, “Яҙ йыры” Г.Зарипов, “Өй артында” Ф. Рәхимғолова, “Умырзая” А. Йәғәфәрова, “Ҡаҙҙар ниңә ала булған?”, “Сәскә менән күбәләк ” М.Дилмөхәмәтов,<br>Р. Ғәрипов “Сыйырсыҡ”, “Ҡояш көлә” Ғ.Ғәлиева.<br>Хәрәкәтле уйын: “Ҡояш һәм ямғыр”,”Беҙ күңелле балалар” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: Р.Ураҡсина “Яҙғы этюд” шиғыры”(күсермә техника), “Ағастар уяна” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Йыл миҙгеле һүрәттәренән хикәйә төҙө”, “Үҫемлекте таны”, “Был үҫемлек ҡайҙа үҫә?”, “Дүртенсе артыҡ”, “Тышҡы күренеше буйынса танып бел”, “Был нимәнең һабағы (сәскәһе, олоно, япрағы, ботағы)?”, “Хеҙмәт өсөн нимә кәрәк?”, “Был ҡайсаҡ була?”, “Хайуандарҙы айыр”, “Тәбиғәт күренешен ата”, “Үҫемлектәң өлөштәрен тап”, “Үҫеш сылбыры”, “Ашарға ярай - ярамай”, “Үрсеү пирамидаһы”, “Туҡланыу пирамидаһы”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә”, “Был ниндәй бөжәк?”, “Төҫтәрҙе сиратлап һал”, “Нимә ҡайҙа йәшәй?”, “Сәскәне йый” һ.б.<br>Эҙләнеү - тикшеренеү эшмәкәрлеге: “Һуған үҫешен күҙәтеү”, “ Һыу, һауа менән тәжрибәләр” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ауыл хужалығы техникаһы”, “Ылыҫлы урман” һ.б. (техно конструкторҙар, технологик карта)<br>Сюжетлы - ролле уйындар:“Баҡсасы”, “Дауаханала”, “Ғаиләʼ”, “Беҙ экологтар” һ.б. (уйын темаһы һайлау, ролдәр билдәләү, ваҡиға тураһында һөйләшеү, бер-береһе менән дуҫ, татыу уйнау һ.б.)<br>Уйын- күнекмә: “Нимәнең тауышы?”, “Ҡайҙа йәшәй?”<br>Әүәләү: “Боҙбармаҡтар”, “Бөжәктәр донъяһында” һ.б.<br>Йәбештереү: “Яҙғы тәбиғәт”, “Тумыртҡа” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар:“Бура һуғыу”, “Сылбыр”, “Сырмалсыҡ”, “Ҡаҙҙар, ҡаҙҙар ҡайтығыҙ”, “Осто - осто”, “Йәшерәм яулыҡ” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Ҡоштар килә” С. Сәлмәнов, “Урманға барабыҙ” Р. Сәлмәнов, “ Ер уянды” Г. Шафиҡова, “Яҙ йыры“ К. Акбашев һ.б. көйҙәрен тыңлау.<br>Музыкаль уйын: “Ал таҫма”, “Нәүрез һәм балалар”, “Яҙ килә”, “Яҙ етә” Ф. Кәрим.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, талпан!”, “Һаҡ бул, боҙбармаҡ!, “Сит кешеләр”, “Һаҡ бул- боҙҙар китә” һ.б. | Һүрәт күргәҙмәһе<br>“Күңелле яҙ” |
| 2- се аҙна<br>“Беҙ Йыһангирҙар” | Ер шары һәм уның юлдашы Ай тураһында белемдәрен формалаштырыу. Уларҙың йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәткә йоғонтоһон аңлатыу эштәрен дауам итеү. Йыһан, Ю.Гагарин, В.Терешкова тураһында мәғлүмәттәр биреү. Глобус һәм карталар, күренекле йыһангирҙәр менән таныштырыу. Һауа транспорты тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Һауа есемдәре тураһында мәҡәл, | Виртуаль экскурсия<br>“Йыһан киңлегендә” |

| | | |
|---|---|---|
| | әйтемдәр, йомаҡтар өйрәнеү. Йыһан тураһында фоноязмалар тыңлау, йырҙар өйрәнеү, альбомдар эшләү, фотоһүрәттәр, иллюстрациялар ҡарау.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “12 апрель- космонавтика көнө”, “Йыһан киңлеге” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Йондоҙҙар тураһында нимә беләһең?”, “Нисек космонавт булырға?” һ.б.<br>Дидактик уйын: “Өндө алыштыр” “Һүҙҙе алмаштырып әйт”, “Ниндәй һөнәргә кәрәк?”, “Һөйләмде тамамла” һ.б.<br>Сюжетлы–ролле уйындар: “Йыһан карабы”, “Космонавтар” һ.б. (уйын темаһы һайлау, ролдәр билдәләү, ваҡиға тураһында һөйләшеү, бер-береһе менән дуҫ, татыу уйнау һ.б.)<br>Һүрәт төшөрөү: “Йыһан нурҙары”, “НЛО беҙҙә ҡунаҡта” һ.б.<br>Йәбештереү: “Йыһан мөғжизәһе”, “Ракета” һ.б.<br>Әүәләү: “Ракета”, “Космонавт”, “Планеталар”, һ.б.<br>Ижади һөйләүҙәр: “Мин айға осам”, “Мин Йыһангир булһам”.<br>Нәфис әҙәбиәт: ”Йәйғор һәм болот” С. Кәрим, “Астрономдар” А. Игебаев, “Ҡош юлы”, ”Аҡйондоҙ” А. Йәғәфәрова, “Ай ҡыҙы Зөһрә” һ.б.<br>Уйын – фантазия: “Әгәр космосҡа осһам” һ.б.<br>Тәжрибә үткәреү: “Йәйғор ниндәй төҫтә”, һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Космодром” һ.б. (магформерс конструкторҙары, схема буйынса)<br>Хәрәкәтле уйын: “Йыһанға осабыҙ”, “Лава”,“Йәшен” “Йыһангирҙар”, “Ҡояш менән болот” һ.б.<br>Уйын-ситуация: “Ракета осороу” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Юлда һаҡ бул!”, “Иғтибар, газ!”, “Асыҡ тәҙрә”, “Өйҙә яңғыҙ булғанда…”, “Сит кеше ишек шаҡыһа…” һ.б. | Проект эше<br>“Космодром һәм ракета”<br><br>Квест уйыны<br><br>Һүрәттәр күргәҙмәһе<br>“Йыһанда” |
| 3-4 аҙна<br>“Китап- белем шишмәһе” | Программаға ярашлы күренекле башҡорт һәм рус яҙыусылары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Китап әҙерләү процесы, китапҡа ҡағылышлы һөнәрҙәр менән таныштырыу: хәреф йыйыусы, баҫыусы. Китаптар ҡарау һәм уларға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүҙе дауам итеү. Китаптар мөйөшөн тулыландырыу. Альбомдар, бағышһүрәттәр ҡарау.<br>Хеҙмәт: “Китаптар дауаханаһы”<br>Тәжрибә: “Тылсымлы ҡағыҙ”.<br>Схема- модель ҡулланып ижади һөйләү: “Китап нисек эшләнелә?”.<br>Уйын – ситуация: “Мин китап баҫыусы”, “Мин – китап буяусы” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Китап нисек барлыҡҡа килә?”, “Китап тарихы”, “Китапҡа нисек ярҙам итергә була?”, “Китапты йыртырға яраймы?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Уйлап тап, мин кем?”, “Яратҡан геройҙарҙың атрибуттарын дөрөҫ тап”, “Әкиәтте йый”, “Был ниндәй әкиәттән?”, “Дөрөҫ һүрәтлә”, “Һүрәтен дөрөҫ тап” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Китапхана”, “Ғаилә” (уйын темаһы һайлау, ролдәр билдәләү, ваҡиға тураһында һөйләшеү, бер-береһе менән дуҫ, татыу уйнау һ.б.) | Башҡорт балалар яҙыусыһына арналған тематик күргәҙмә<br><br>Фотоальбом әҙерләү (яратҡан геройҙар)<br><br>Проект эше<br>“Китап нисек эшләнелә?” |

| | | |
|---|---|---|
| | Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Китап кәштәһе” һ.б. (эре конструкторҙар, модулдәр)<br>Йәбештереү: “Китаптарҙы дауалау”, “Минең китабым” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Йәшә китап” Г. Юнысова, “Китап уҡыйбыҙ” Ғ. Ғәлиева һ.б.<br>Әүәләү: “Әкиәт геройҙары”, “Йәшәгән ти...” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Минең тәүге китабым”, “Кулдан мисәт” һ.б. | |
| Май 1-2 аҙна<br>Еңеү яҙы<br><br>“Батырҙар - ил күрке” | Бөйөк Ватан һуғышы, уның геройҙары, еңеү тураһында баланың белемен киңәйтеү.<br>Һуғыш геройҙарына ҡуйылған һәйкәлдәр, бюстар, таҡтаташтар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балаға хәрби миҙал – ордендар тураһында төшөнсәләр биреү. Төрлө ғәскәр төрҙәре, хәрби техника менән таныштырыуҙы дауам итеү (йәйәү, һыу, диңгеҙ, һауа, танк). Патриотик тәрбиә биреү.<br>Милли батырыбыҙ С. Юлаев ижады менән таныштырыуҙы дауам итеү (ҡобайырсы, шағир, сәсән, йырсы, көрәшсе).<br>Салауаттың йәшәгән урыны, ғаиләһе, баласағы тураһында белемде киңәйтеү. Салауаттың исемен йөрөткән географик урындар менән таныштырыу (парк, урам, район, музей, ҡала, хоккей командаһы, Дәүләт премияһы, ордены, «Салауат йыйыны») исемен мәңгеләштерелеүен аңлатыу.<br>Данлы батыр образы формалаштырыу (илен яратыусы, яҡлаусы, һаҡлаусы булыуын) һәм халыҡ хәтерендә һаҡланыуын аңлатыу, рухи тәрбиә биреү.<br>Батырлыҡ, етеҙлек, сослоҡ, ҡыйыулыҡ, мәргәнлек сифаттарын тәрбиәләү. Гендер тәрбиәһен үҫтереү.<br>Башҡорт халҡының батырлыҡты, ҡыйыулыҡты күрһәткән әкиәт, ауыҙ-тел ижадын, йырҙарын өйрәнеү “С. Юлаев“ операһы, «Салауат батыр маршы» һ.б.<br>Хәрби техника (уйынсыҡтар) коллекциялары йыйыу. Фотоальбомдар әҙерләү. Китаптар күргәҙмәһе ойоштороу. Картиналар, иллюстрациялар ҡарау.<br>Музейға маҡсатлы экскурсия. Иҫтәлекле урындар Салауат Юлаев бюсы янына, еңеү паркына экскурсиялар. Йәмғиәт урындарында үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәлерен үтәү, үҙеңдең уй- фекереңде аңлатырға һәм иҫбатларға өйрәтеү һәләтен үҫтереү.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “9 май- Еңеү көнө” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Ил намыҫы - батырҙар”, “Салауаттың ғаиләһе”, “Салауат исеме бирелгән ҡалалар һәм урамдар” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Салауат исемен кемдәр, нимәләр йөрөтә? ”<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Ил һаҡсыһы”, “Танкист”, “Моряк”, “Летчик” һ.б. (уйын темаһы һайлау, ролдәр билдәләү, ваҡиға тураһында һөйләшеү, бер-берең менән дуҫ, татыу уйнау һ.б.)<br>Дидактик уйындар: “Был ниндәй ғәскәр?”, “Дүртенсе артыҡ”, “Сағыштыр”, “Уйлап тап” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: башҡорт халыҡ әкиәте ”Алпамыша батыр”, “Аҡъял батыр”, С.Юлаев “Ай, Уралым, Уралым!” ҡобайыры. “Олатай” Ф. Рәхимғолова, “Кескәй матрос” Ф. Рәхимғолова.<br>Һүрәт төшөрөү: “Олатайым миҙалдары”, “Салауат батыр” – һынлы һүрәт һ.б.<br>Йәбешереү: “Салауаттың аты” һ.б. | Байрам “Еңеү көнө”<br>Һуғыш һәм тыл ветерандары менән осрашыу<br><br>Үлемһеҙ полк акцияһында ҡатнашыу<br><br>Фотокүргәҙмә “Олатайым миҙалдары”<br><br>Проект эше “Салауат халыҡ хәтерендә” |

| | | |
|---|---|---|
| | Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Салауат ғәскәре өсөн аттар” (оригами ысулы)<br>Музыкаль эшмәкәрлек: Батырлыҡ тураһында йырҙар һәм бейеүҙәр өйрәнеү.<br>Ситуатив һөйләшеүҙәр “Әгәр мин һалдат булһам…” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Һыбайлылар”, “Осоусылар”, “Йөҙөк атыш” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек:. “Урамда сит кешеләр менән бәйләнешкә инмә!”, “Асыҡ балкон” һ.б. | |
| 4 аҙна<br>“Ер- йәшәгән урыныбыҙ” | Ер шары, ҡояш системаһы, ерҙәге тереклектең төрлөлөгө (ҡоштар, хайуандар, үҫемлектәр, бөжәктәр) тураһында белемен арттырыу. Үҫемлектәрҙең, йәнлектәрҙең (һыуҙа, болонда, сүллектә, йылы яҡта һ.б.) йәшәү һәм үрсеү урындары тураһында баланың күҙаллауын киңәйтеү. Йәнлектәрҙең төркөмсәләргә бүленеүен (имеҙеүеселәр, һөйрәлеүселәр) тураһында белемдәр биреү. Баланың тәбиғәттә һәм төркөмдә ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ үтәү, ҡушылған эштәрҙе килешеп бергә эшләргә, үҙ-ара дуҫтарса мөнәсәбәт яйлау (ғәфү үтенеү, рәхмәт, комплимент әйтешеү), килеп сыҡҡан проблеманы һүҙ ярҙамында хәл итергә өйрәтеү, тәрбиәле булыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Тәбиғәттә үҙ – үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре”, “Ер йәшәгән урыныбыҙ”, “Дарыубикәлә ҡунаҡта” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Ғәҙелшә шарлауығы тураһында нимә беләһең?”, “Ағастар урманда нимәгә кәрәк?”, “Йондоҙнәмәнде беләһеңме?” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйын: “Сәйәхәт” һ.б. (алынған мәғлүмәт буйынса тема һайлау ,бала инициативаһынан сығып, килеп сыҡҡан бәхәсте урында сисергә булышлыҡ итеү )<br>Конструктив -модель эшмәкәрлеге: Ф.Иҫәнғоловтың “Урман ҡыҙыҡайы хикәйәһе” (бала инициативаһынан сығып, тәбиғи материалдар ҡулланып) һ.б.<br>Ситуациялы хәл: “Һыуһыҙ (ерһеҙ) йәшәп буламы?”, “Тәбиғәт стихиялары” һ.б.<br>Тәжрибәләр: “Һыу ниндәй була?” ,“Һыуҙы нисек һәм нимә менән таҙартып була?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Уйлап табығыҙ һәм күрһәтегеҙ”, “Дүртенсе артыҡ”, “Тылсымлы таяҡ”, “Ҡырҡылған һүрәттәр”, “Экотамғалар нимә һөйләй?”, “Йәнлектәр донъяһы”, “Һыу аҫты донъяһы”, “Үҫемлектәр донъяһы”, “Ҡаҙылма байлыҡтар” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Сырмалсыҡ”, ”Тирмә”,”Һуҡа” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ирәндек”, “Урмансы” А. Йәғәфәрова һ.б..<br>Һүрәт төшөрөү: “Ерҙе һаҡлайыҡ”, “Ер- беҙҙең уртаҡ йортобоҙ” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, талпан!”, “Уттан һаҡ бул!”, “Юл билдәләре”һ.б. | Уйын – эстафеталар<br><br>Фотоальбом төҙөү<br>“ Ер- йәшәгән урыныбыҙ”<br><br>Энциклопедиялар йыйыу<br><br>Проект эше<br><br>Викториналар<br><br>Квест уйыны |

**Мәктәпкә әҙерлек төркөм өсөн якынса комплекслы тематик план**
**(6 – 7 йәш)**

| Темалар | Йөкмәткеһе | Йомғаҡлау сараһы |
|---|---|---|
| Сентябрь<br>1-2 аҙна<br>Диагностика<br><br>“Беҙ буласаҡ уҡыусылар” | Мәктәп тормошона, китаптарға ҡыҙыҡһыныу уятыу, уларҙың мәктәп тураһындағы белемдәрен киңәйтеү, мәктәп кәрәк - яраҡтары, укытыусы һәм укыусылар тураһында белемдәрен арттырыу. Мәктәпкә маҡсатлы экскурсия ойоштороу: класс бүлмәһе, спортзал, ашхана, китапхана менән таныштырыу. Алдынғы укыусыларҙың Почет таҡтаһындағы фотоһүрәттәрен ҡарау, уларҙың ни өсөн ҡуйылыуын аңлатыу.<br>Мәктәп укыусылары һәм укытыусылары менән аралашыу мәҙәниәтен һәм үҙ-үҙен тотоу ҡағиҙәләрен нығытыу. Уҡытыусы һөнәренә ҡарата ихтирамлы ҡараш тәрбиәләү.<br>Уҡырға әҙерлек эштәре алып барыу, укыу эшмәкәрлегенә әҙерләү. Баланың мәктәпкә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү, китапҡа һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү. Балалар араһында бер – береһенә ҡарата дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре формалаштырыу. Балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәренең (балалар баҡсаһы мөдиренең, тәрбиәселәрҙең, музыка һәм физик тәрбиә биреү етәксеһенең) исемен, атаһының исемен дөрөҫ атарға өйрәтеү. Үҙҙәре тирәһендәге кешеләргә ихтирамлы булырға, ололар үҙ-ара һөйләшкәндә улар әңгәмәһенә ҡыҫылмаҫҡа, әңгәмәсене тыңлап бөткәс кенә һорау бирергә күнектереү. Ихтыяр көсөн, маҡсатҡа ынтылышлы, үҙ - үҙен тота белеү һәм башлаған эште аҙағына еткерергә тәрбиәләү. Янғындан һаҡланыу, ҡурҡыныс янаған хәүефле осраҡтарҙа үҙ – үҙеңде һаҡлау ҡағиҙәләре менән таныштырыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Беҙ буласаҡ укыусылар!”, “Аралашыу әлифбаһы” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Әгәр мин укыусы булһам…”, “Мәктәп- кәрәк яраҡтарын һанап сыҡ” , “Нимә ул - мәктәп?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был әйбер кемгә һәм ни өсөн кәрәк?”, “Тиҙерәк йый”, “Танып бел”, “Эш өсөн нимә кәрәк?”, “Мәктәпкә нимәләр кәрәк?”, “Дуҫыңды тап”, “Тылсымлы һүҙҙәр”, “Кем иң иғтибарлы?” һ.б.<br>Уйын- ситуация: “Мин укыусы” һ.б.<br>Сюжетлы - ролле уйындар: “Балалар баҡсаһы”, “Мәктәп” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойоштороорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтеү). | Балалар баҡсаһында белем байрамы |

| | | |
|---|---|---|
| | Нәфис әҙәбиәт: “Нимә яҡшы була?” В. Осеева,”Хәрефтәр һәм өндәр” Т. Искәндәриә, “Мәктәптә” А. Ҡадырова һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Беҙ мәктәпкә барабыҙ”, “ Чему учат в школе” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Белем көнө” һ.б.<br>Әүәләү: “Мәктәп кәрәк - яраҡтары” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Мәктәп” (ҙур модулдәр, ағас, пластмасс конструкторҙар)<br>Хәрәкәтле уйындар: “Биш пар”, “Өс таған”, “Номер саҡырыу”, “Йөҙөк һалыш” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Ихатала хәүефле осраҡтар”, “Иғтибар – юл аша сығабыҙ!” һ.б. | |
| 2 аҙна<br>Мониторинг<br>«Хәүефһеҙлек донъяһы» | Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге буйынса белемдәрен камиллаштырыу, иҫкәртеүсе, тыйыусы һ.б. юл билдәләре менән танышыу. Экологик мәҙәниәт нигеҙҙәрен һәм тәбиғәттә үҙ-үҙенде тотоу ҡағиҙәләрен формалаштырыу (көслө ел, дауыл, велосипедта йөрөгәндә һ.б).<br>Өйҙә көнкүреш приборҙарын ҡулланыу ҡағиҙәләрен нығытыу. Полиция, ут һүндереүселәр, ашығыс ярҙам, МЧС, газ хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Актив телмәрҙә һөнәр менән бәйле һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙы формалаштырыу (ҡала урамдары, проспект, парк, майҙан һ.б.) төшөнсәләре менән таныштырыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Светофор минең дуҫым”, “Юл билдәләре ни өсөн кәрәк?” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Ашығыс ярҙамды нисек саҡырырға?”, “МЧС нимә ул?”, “Көнкүреш приборҙарын дөрөҫ ҡулланаһыңмы?” һ.б.<br>Дидактик уйын: “Ярай- ярамай”, “Дөрөҫ әйт”, “Хәүефле осраҡ”, “Юл билдәләре”, “Домино”, “Кемгә ниндәй инструмент?”, “Өйҙә яңғыҙ ҡалғанда…”.<br>Һүрәт төшөрөү: “Хеҙмәтләндереү машиналары” һ.б.<br>Йәбештереү: “Ярҙамсы машиналар” һ.б.<br>Әүәләү: “Ҡалам урамдары” (коллектив эш) һ.б.<br>Сюжетлы - ролле уйындар: “Полиция хеҙмәткәре”, “Янғын һүндереүселәр”, “МЧС” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойошторорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтеү).<br>Нәфис әҙәбиәт: “Нимә яҡшы нимә насар?”, “Светофор”, “Телефон” К. Чуковский, “Милиционер” Р. Заһиҙуллин, “Микробтар” Х. Һөйөндөков, “Сынығыу” К. Булат һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Светофор”, “Алыш”, ”Дүңгәләк тәгәрәтеү” һ.б.<br>Уйын – сәхнәләштереү: М. Кәрим “Теге яҡкамы,был яҡкамы?”, “Бесәйҙең өйө яна” әкиәте. Ситуатив уйын: “Нимә эшләр инең? (нисек хәл итергә: ауырыһа, ҡурҡыныс янаһа, ҡолаһа)”,<br>“ Әгәр аҙашһаң…” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ҡала микрайоны” (төрлө конструкторҙар, схемалар, юл билдәләре, ваҡ уйынсыҡтар) һ.б. | Һүрәттәр күргәҙмәһе<br>“Хәүефһеҙ донъя”<br><br>Викторина<br>“Юл ҡағиҙәләре”<br><br>Маҡсатлы экскурсия:<br>“МЧС”, полиция, янғын һүндереүселәр һ.б<br><br>Виртуаль сәйәхәт:<br>“Кеше хеҙмәтен еңеләтеүсе машиналар” |

| | | |
|---|---|---|
| | Модель- схемалар менән эш: “ЮХҠ”, “Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре”, “Ҡала юлдары” һ.б.<br>Режиссер уйыны: “Полиция хеҙмәткәре”, “Беренсе медицина ярҙамы күрһәтеү” һ.б.<br>Уйын-фантазия: “Әгәр мин МЧС хеҙмәткәре булһам…”.<br>Хәүефһеҙлек: “Дарыуҙарға теймә”, “Розетка уйынсыҡ түгел!”, “Юлда иғтибарлы бул!”, “Шырпы менән уйнама!” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>«Көҙһылыу» | Көҙ миҙгеле тураһында белемдәрен киңәйтеү – көҙ миҙгеленең ҡыш миҙгеленә күсеү ваҡытында һыу яҡтылыҡтарындағы үҙгәрештәр (һыуҙың төҫө үҙгәреүе, ситтәрендә боҙ барлыҡҡа килеүе) йыл миҙгелдәренең һәм айҙарҙың эҙмә-эҙлелеген аңлатыу. Уларҙа көҙҙөң үҙенсәлектәренең сәнғәт әҫәрҙәрендә, нәфис һүҙҙәр, һүрәт төшөрөүҙә һәм музыкала сағылышы төшөнсәһен булдырыу.<br>Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт тураһында һәм уларҙың үҙ – ара бәйләнеше тураһында күҙаллау үҫтереү. Тыуған яҡтың көҙ билдәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү: тәбиғәт күренештәре тураһында белемдәрен киңәйтеү (ҡар, борсаҡ, томан, көслө ямғыр, ысыҡ, ел).<br>Тәбиғәткә һаҡсыл һәм аңлы ҡараш тәрбиәләү. Тәбиғәттә үҙ – үҙенде тотоу ҡағиҙәләрен нығытыу. Йыл миҙгелдәре тураһында балаларҙың белемдәрен системаға һалыу. Тәбиғәт календарында һауа торошон, миҙгелде, айҙы, тәүлекте билдәләргә формалаштырыу һәм тәбиғәт көндәлеге алып барыу. Альбом өсөн картиналар, фотолар, һүрәттәр, хикәйәләр һ.б. туплау. Тәбиғәт мөйөшөндә дежурныйҙар билдәләү. Тәбиғәт мөйөшөндәге һәм тәбиғәттәге үҫемлектәрҙе тышҡы күренеше, төҙөлөшө буйынса айыра, әйтә белеү. Урман еләктәре, бәшмәктәре, уларҙың ашарға яраҡлы һәм ярамай торғандары тураһында төшөнсәләрҙе нығытыу. Йылға – күл, урман, болон, яландарҙың балалар баҡсаһы ихатаһында үҫкән үҫемлектәр мөхите менән бәйләнешен аңлатыу. Күсәр ҡоштар йылы яҡҡа китеүен, төрлө йәнлектәрҙең ҡышлауға төрлөсә әҙерләнеүе (аҙыҡ туплау, май йыйыу, йөн ҡойоу һ.б.) менән таныштырыу.<br>Йәнһеҙ тәбиғәт: тәбиғәт календарында һауа торошон билдәләргә (һыуыҡ, йылы, эҫе, ҡояшлы, болотло, ямғыр яуа, ел иҫә) һәм һауа торошона ярашлы кейенергә өйрәтеү. Баланың күҙәтеүсәнлеген, ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү (ямғыр, көндәр һалҡынайта, йыш ямғыр яуа, ағастың япраҡтары һарғайып ҡойола, күбәләктәр юҡ булды, сәскәләр һулыны һ.б.). Тәбиғәт-климат шарттарының төрлө булыуы тураһында тәүге күҙаллауын формалаштырыу: һыуыҡ климатлы зона (Арктика, Антарктика), уртаса климат (урман, дала тайга), эҫе климат (джунгли, саванна). Карта һәм глобус менән таныштырыу (ҡайһы бер климат зоналарын, диңгеҙҙәрҙе күрһәтеү). Файҙалы ҡаҙылмалар тураһында тәүге төшөнсәләр биреү (нефть, газ, тимер, руда, таш һ.б.),<br>Үҫемлектәр донъяһы һәм бәшмәктәр: ҡыуаҡлыҡтар, ағастар, башаҡлы үҫемлектәр “урман”, “болон”,”баҡса”). Үҫемлектәрҙе, өлөштәрен (һабағы, япрағы, сәскәһе, орлоғо, | Гербарийҙар һәм коллекциялар йыйыу<br><br>Проект эше<br>“Йылы яҡта йәшәүсе хайуандар”<br><br>Викторина<br><br>Көҙгө тәбиғәткә экскурсия |

| | | |
|---|---|---|
| | емеше) таныу, атамаһын белеү. Үҫемлектәрҙе төрлө юлдар менән үрсетеү ысулдары тураһында мәғлүмәт биреү (орлоҡтан, ботаҡтан, мыйыҡтан, япраҡтан). Үҫемлектәрҙең кешелек һәм хайуандар өсөн файҙаһы тураһында, бәшмәктәр менән танышыуҙы дауам итеү.<br>Хайуандар донъяһы: йорт хайуандарының һәм уларҙың ҡылыҡтары тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү, кеше хәстәрлегенә мохтаж булыуын аңлатыу һәм ҡайҙан барлыҡҡа килеүҙәрен, кешенең үҙенә нисек эйәләштереүе тураһында мәғлүмәт биреү. Балала хайуандарға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Ҡайһы бер бөжәктәр (ҡырмыҫҡа, күбәләк, ҡуңғыҙ һ.б.)  менән таныштырыу, ни өсөн бирәүҙәре оса, ә икенселәре осмай һ.б. Баланың хайуандар донъяһы тураһында күҙаллауын киңәйтеү, системаға һалыу һәм дөйөмләштерергә өйрәтеү: хайуандар, ҡоштар, бөжәктәр, үрмәкселәр, балыҡтар, ер-һыу (тәлмәрйен), һөйрәлеүселәр (кеҫәртке, ташбаҡа, йылан, крокодил) тураһында һөйләү. Видеофильмдар, слайдтар ҡарау. Экологик һуҡмаҡ буйынса сәйәхәт. Йомаҡтар сисеү, көҙ билдәләре буйынса халыҡ әйтемдәрен өйрәнеү, үҫемлектәр тураһында йомаҡтар уйлап сығарыу.һ.б. Тәжрибәләр үткәреү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Нимә ул дарыу үләндәре?”, “Алтын көҙ”, “Хайуандар көҙҙө нисек ҡаршылай?”,  “Йәшелсә баҡсаһында” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Урманда ағастар кемгә кәрәк?”, “Нимә үҫемлектәр менән туклана?”, “Бойҙайҙан нимәләр эшләп була?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Төҙөлөшө буйынса айыр”, “Йәнлектәр ҡышҡылыҡҡа нисек әҙерләнәләр?”, “Был ҡайҙа үҫә?”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә”, “Тәбиғәт күренештәре”, “Серле моҡсай”, “Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт”, “Тамыры, һабағы”,”Был ҡасан була?”, “Ашарға ярай, ярамай”,  “Тәбиғәттә үҙ – үҙеңде тота бел” һ б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Баҡсасы” (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойошторорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн  үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтеү).<br>Нәфис әҙәбиәт:  Г. Яҡупова “Миләш һыйы”, Д. Булгакова “Ҡунаҡ көҙҙәр”, М. Хисмәтуллина “Япрактар”, А. Белкин “Көҙгө ямғыр” “Көҙгө урман”Ф. Сәлимйәнова,”Көҙ апайым”<br> Ф. Биктимеров “Ҡыр ҡаҙҙары” С. Муллабаев,  А. Белкина: “Осенний дождь”, “Ҡоштар китә йылы яҡҡа” Й. Гәрәй, “Витаминлы ҡыяр” , “Дарыу” А. Йәғәфәрова, “Ярҙам” Ҡ. Булат һ.б.<br>Видео - слайд ҡарау: “Витаминдар беҙҙең дуҫтар”<br>Һүрәт төшөрөү:  “Көҙгө пейзаж” (коллектив эш), “Һоҡланам мин көҙгө матурлыҡҡа” , “Көҙгө натюрморт” (таушалған ҡағыҙҙа) һ.б. | |

| | | |
|---|---|---|
| | Йәбештереү: “Көҙгө урман”, “Көҙгө уңыш”, “Хайуандар донъяһы” һ.б.<br>Әүәләү: “Һуңғы көҙ”, “Баҡсалағы витаминдар” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Йәшелсә һаҡлағыс” (лего конструкторҙар менән)<br>Хәрәкәтле уйындар: “Еҙ бүкән”, “Кем күп йыя”, “Борсаҡ”, Бәшмәк йыйыу” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Сөмбөлә килде беҙгә”, “Һау булығыҙ аҡкоштар” Ғ. Сәлмәнов, “Көҙ” Х. Заимов көйө һ.б., “Көҙгө бал Г. Йыһангирова һ.б.<br>Хәүефһеҙлек:”Ағыулы үҫемлектәр, бәшмәктәр”, ”Осло, ваҡ әйберҙәр”, ”Урамдағы сит кешеләр”,”Юлдағы хәүефле урындар” һ.б. | |
| Октябрь<br>1-2 аҙна<br>“Башҡортостан - гөлбостан” | Балаларҙың тыуған ил тураһында белемдәрен нығытыу: Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы Өфө, дәүләт тамғалары гербы, флагы һәм гимнын тыңлау ҡағиҙәһе барлығын нығытыу.<br>Башҡортостан, уның тарихы, мәҙәниәте һәм үҫеше, географик яҡтан урынлашҡан урыны, архитектура үҙенсәлектәре, иҫтәлекле урындары, ҡалалары, йылға, күлдәре, файҙалы ҡаҙылмалары, шифаханалары тураһында белемен киңәйтеү. Күренекле шәхестәре тураһында дөйөм төшөнсәләр биреү: автономлы Башҡортостан Республикаһын төҙөүҙә көрәшкән ғалим Ә. Вәлиди туған һәм Ш. Бабич тураһында мәғлүмәт биреү, уның шиғырҙарының мәғәнәһенә төшөндөрөү.<br>Башҡортостан Республикаһының билдәле яҙыусылары М.Кәрим, З.Биишева, шағирҙар Р.Ғәрипов, А.Игебаев, С.Әлибаев һ.б. менән танышыу, әҫәрҙәре аша балаларҙа тыуған яҡка ғорурлыҡ, һөйөү, һоҡланыу тойғолары тәрбиәләү, шиғырҙар, мәҡәлдәр, йомаҡтар өйрәнеү.<br>Башҡортостан Республикаһының халыҡ артистары – бейеүсе Р. Туйсина, йырсы Р. Йәнбәков, композитор Х. Әхмәтов һ.б. менән таныштырыу. “Урал батыр” эпосынан өҙөктәр укыу. Энциклопедиялар, иллюстрациялар, слайдтар ҡарау.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Башҡортостаным-илем”, “Ә.Вәлиди, Ш.Бабич башҡорт уландары”, “Тирә-яҡты өйрәнеү музейына виртуаль сәйәхәт”, “Арҙаҡлы яҡташтарға һәйкәлдәр” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог:“Башҡортостан тураһында нимәләр beләһең?”,“Кемдәр ул яҙыусылар?” һ.б.<br>Дидактик уйындар “Флаг ҡайһы илдеке?”, “Ҡыҙыл китап”, “Был ниндәй халыҡтың кейеме?”, “Биҙәкте төҙө”, “Карта буйынса эш”, “Файҙалы ҡаҙылмалар”, “Дәүләт символикаларын айыр”, “Ауыл һәм ҡаланың айырмаларын тап” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Республикам символдары”, “Был минең тыуған ерем” Р.Ураҡсинаның шиғыры буйынса”, “Ямғыр сиртә ҡылдарын” һ.б.<br>Йәбештереү: “Символдар”һ.б.<br>Әүәләү: “Башҡорт керамикаһы - сәскә вазаһы” (натуранан, балсыҡтан) һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Конгресс - холл”, “Башҡортостан һауа юлдары”, | Байрам<br>“Башҡортостан – тыуған ерем!”<br><br>Проект эштәре әҙерләү “Башҡортостан ҡалалары”, “Башҡортостан йылғалары” һ.б.<br><br>Музейға, китапханаға, паркка маҡсатлы сәйәхәт<br><br>Квест уйыны |

| | | |
|---|---|---|
| | “Телеүҙәк” һ.б. (ағас, “кликко”, “магформерс”, “лего-дупло” конструкторҙары ) һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Китапхана”, “Театр”, “Трансопрт”, “Элемтә бүлеге”, “Музей”,”Гид” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойошторорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтеү).<br>Нәфис әҙәбиәт: Р.Ураҡсина “Был минең тыуған ерем”, Р.Ғәрипов “Тыуған тел”, А.Игебаев “Башҡортостан – илгенәм”, ”Өфө” С. Кәлимуллин хикәйәһе, “Башҡортостан” Ф. Туғыҙбаева, “Башҡортостанға” Ғ. Ғүмәр һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Ҡурай”, “Кем тиҙерәк?”, “Тирмә” һ.б.<br>Уйын - фантазия: “Мин Башҡортостан ҡурсалығы гиды булһам…”, “Кем Өфөгә тиҙ етә” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Адресыңды беләһеңме? ”, “Балалар баҡсаһына хәүефһеҙ юлды күрһәт” (схема буйынса) | |
| 3-4 аҙна<br>“Икмәк – ил байлығы!” | Ауыл хужалығы һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Кеше хеҙмәтен еңеләйтеүсе машиналар тураһында төшөнсәләрҙе киңәйтеү (сәскес, тырма, комбайн).<br>Балаларға баҫыуҙа үҫкән уңыш тураһында мәғлүмәт биреү (көнбағыш, тары, һоло, ҡара бойҙай һ.б.), үҫтереү ысулдары менән таныштырыу, уларҙан төрлө аҙыҡтар әҙерләү тураһында белемдәрен киңәйтеү, башҡорт халыҡ ашамлыҡтары – талкан, ҡурмас, буҙа, арыш икмәгенең кешеләр туҡланыуындағы әһәмиәтен асыу.<br>Туғайҙа үҫкән үләндәр, башаҡлы һәм шифалы үҫемлектәр менән таныштырыуҙы дауам итеү.<br>Ауыл хужалығы эшсәндәренең һөнәрҙәре (агроном, тирмәнсе, икмәк бешереүсе һ.б.) тураһында төшөнсәләр биреү, уларҙың хеҙмәтенең әһәмиәте тураһында баланың белемен киңәйтеү, хеҙмәтенә ихтирамлылыҡ тәрбиәләү. Ябай экологик күҙаллауҙар үҫтереүҙе дауам итеү.<br>Һүҙлекте эш - хәрәкәтте белдергән ҡылымдар менән байытыу, киҫәксәләр ҡушып тамырҙаш һүҙҙәр уйлау (игенсе, комбайнсы, тракторсы) .<br>Үҙ-фекерен әйтә белергә, дәлилләргә, башҡалар һүҙенә ҡолаҡ һалырға һәм яҡшы мөнәсәбәт булдырырға күнектереү.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Икмәктең өҫтәлгә килеү юлдары”, “Икмәк – тормош сығанағы”, “Әсәй икмәк бешерә”, “Ырҙында эш ҡыҙа” (мнемотаблицаға, модель - схемаға таянып)<br>Үҫтереүсе диалог: “Икмәк ҡәҙерен беләһеңме?”, “Игенде кем үҫтерә?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Орлоҡтан икмәккә тиклем”, “Был ҡайҙа үҫә?” “Нимә бешерҙем?”, ”Үҫемлектең үрсеү схемаһы“, Икмәк бешерер өсөн нимә кәрәк?”, “Икмәк нисек өҫтәлгә килә?”, “Үҫемлекте атап әйт”, “Өлөштәрен әйт”, “Был нидәй ашамлыҡ?”, “Тәме буйынса таны”, “Икмәк магазинында” һ.б. | Проект эше<br>“Икмәктең өҫтәлгә килеү юлдары”<br><br>Викторина<br><br>Йәрминкә ойоштороу |

| | | |
|---|---|---|
| | Сюжетлы – ролле уйындар: “Магазин”, “Транспорт”, “Элеватор”, “Икмәк магазины”, “Малсылыҡ”, “Ҡымыҙсылыҡ” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ - аллы уйын ойоштороrға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтеү).<br>Нәфис әҙәбиәт: “Еңел икмәк”, “Ырҙында” Ф. Мөхәмәтйәнов, “Сөсө икмәк” Р. Ураҡсина, “Әсәйем икмәк бешереүсе” Р. Ураҡсина, “Айыу менән бабай”, “Бойҙай бөртөгө”, “Әпәкәй” Г.Якупова һ.б.<br>Уйын - фантазия: “Әгәр мин игенсе булһам…” һ.б.<br>Тәжрибәләр үткәреү: “Бойҙайҙың үҫеше” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйын: “Боҙоҡ телефон”, “Ашай торған – ашамай торған” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Иген баҫыуҙары” һ.б.<br>Әүәләү: “Икмәк магазины кәштәһендә”, “Башаҡтар” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге:“Ауыл хужалығы техникаһы” (техно конструкторҙар, технологик карта буйынса).<br>Хәүефһеҙлек: “Ни өсөн юл билдәләре кәрәк?”, “Эҫе плита”, “Электроприборҙар”, “Яңғындан һаҡ бул!” һ.б. | |
| Ноябрь<br>1-2 аҙна<br>“Беҙ Рәсәйҙә йәшәйбеҙ”<br><br>«Дуҫлыҡ ептәре” | Рәсәй һәм уның составына ингән республикалар тураһында мәғлүмәт биреү.<br>Рәсәйҙә йәшәгән күп төрлө милләттәр хаҡында әңгәмәләшеү, удмурт, сыуаш, татар, рус, мари, мордва, башҡорт һ.б. халыҡтарының үҙ телдәрендә белем алыуы, мәҙәниәте, сәнғәте (аш-һыу, һауыт-һаба, йыр-моңо, милли кейеме) үҫешенә хоҡуҡтары булыуын, туған Башҡортостанды үҫтереүҙә үҙ өлөшөн индереүҙәре, бер - береһе менән дуҫ йәшәүҙәре тураһында төшөндөрөү. Балаға уның үҙ халҡының, милләтенең бер вәкиле булыуын аңлатыу.<br>Һәр бер халыҡтың теленә, мәҙәниәтенә, ғөрөф-ғәҙәттәренә хөрмәт, ихтирам тәрбиәләү.<br>Тыуған ил - Рәсәй тураһында төшөнсәне киңәйтеү. Уның баш ҡалаһы Мәскәүҙең тарихы, мәҙәни һәм тарихи ҡомартҡылары, башҡа ҙур ҡалалар менән таныштырыу. Рәсәй Федерацияһының дәүләт тамғалары (флаг, герб, гимн) тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Рәсәй Федерацияһының президенты һәм башҡа дәүләт башлыҡтары тураһында баланың ҡыҙыҡлауын үҫтереү. Халыҡ ижады, рус халҡының әҙәбиәте өлгөләре менән танышыу. Энциклопедиялар, бағышһүрәттәр ҡарау. Ҡала музейына маҡсатлы экскурссия.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Ер шарында башҡа дәүләттәр”, “Беҙ дуҫ йәшәйбеҙ” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Мәҡәлде дауам ит”, “Халыҡтарҙың биҙәү- ҡулланыу сәнғәте”, “Рәсәйҙә ниндәй халыҡтар йәшәй?”, “Нимә ул- тыуған ил?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: ”Был кемдең кейеме?”, “Дәүләт символикалары”, “Флагты айыр”, | Күңел асыу сараһы<br>“Беҙ дуҫ йәшәйбеҙ”<br><br>Ҡурсаҡтарҙан ижади күргәҙмә:<br>«Дуҫлыҡ ептәре”<br><br>Квест уйыны |

| | | |
|---|---|---|
| | “Был ниндәй халыҡтың орнаменты?”,“Башҡорт орнаментын һайла”,“Был ҡала ҡайҙа урынлашҡан?”, “Ниндәй илдәрҙе беләһең?”, “Картанан эҙләп тап”, “Нимәһе менән айырыла?” һ.б.,<br>Хәрәкәтле уйындар: “Йөҙөк йәшерәм”, “Тау батшаһы”, “Тупты тәгәрәтеү”, удмурт халыҡ уйыны “Һоро ҡуян” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Сәйәхәт”, “Транспорт”, “Элемтә бүлеге” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәргә, үҙ-аллы уйын ойошторорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтергә).<br>Һүрәт төшөрөү: “Минең яңы дуҫтарым” һ.б.<br>Әүәләү: “Дуҫлыҡ сәскәләре”, “Оҫта ҡулдар” һ.б.<br>Йәбештереү: “Рәсәй символикаһы” һ.б<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “”, “Телеүҙәк” һ.б. (лего конструкторҙар буйынса)<br>Нәфис әҙәбиәт:“Иң ҙур республика” С. Кәрим, “Ватан” Р. Ниғмәти, “Тыныслыҡ”<br>Э. Аҡбулатова һ.б. ”Пушкин имәне янында пьесаһы” А. Йәғәфәрова, “Ете ҡыҙ”, “Айыу һәм таш” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Йәшә дуҫлыҡ” У.Кинйәбулатов, “Тыуған телем” З. Биишева һүҙҙәре, “Ер шарын һаҡлағыҙ” һ.б.<br>Эҙләнеү- тикшеренеү эшмәкәрлеге: “Урал гәүһәрҙәре” (таштар, көмөш биҙәнеү әйберҙәре)<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, бала!”, “Ят кешеләр”, “Телефондан кем шылтырата?” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Әсә күңеле балала, бала күңеле далала” | Әсәйҙәрҙең һөнәрҙәре тураһында баланың белемен киңәйтеү (төҙөүсе, ташсы, тегенсе, китапханасы, модельер һ.б.). Уларҙың эш ҡоралдары, хеҙмәтенең әһәмиәте тураһында аңлатыу. Яңы төр һөнәрҙәр менән таныштырыу (менеджер, программист, косметолог, маркетолог, дизайнер һ.б.). Мәҙәниәт һәм көнкүреш учреждениялары менән таныштырыу (театр, кинотеатр, ателье һ.б.). Гендер тәрбиәһен биреүҙе дауам итеү. Баланы енси булмышына ҡарап үҙенең ғаиләлә, йәмғиәттә башҡарасаҡ роле тураһында аңлатыу: ҡыҙ – буласаҡ әсәй, ғаилә усағын һаҡлаусы һ.б. Әсәйҙәргә ҡарата һөйөү, хәстәрлекле ҡараш, малайҙарҙа ҡыҙҙарға ярҙам итеү теләге, урын биреү, үҙенән алда ишектән үткәреү, ҡыҙҙарҙа тыйнаҡлыҡ һыҙаттары тәрбиәләү. Тәрбиә буйынса мәҡәлдәр, халыҡ ижады ҡомартҡыларын үҙләштереү. Фотоһүрәттәр, слайдтар ҡарау, фотоальбомдар әҙерләү һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Минең әсәйем”, З.Ханнанова “Мин бәхетле-әсәйем бар” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог:“Әсәйең ҡайҙа һәм кем булып эшләй?”, “Тылсымлы һүҙҙәр беләһеңме?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был предмет кемгә кәрәк?”, “Буяусы булам тиһәң…”, “Айырып һал”, “Ярай- ярамай”, “Һүҙҙәр теҙмәһе”, “Наҙлы һүҙҙәр” , “Был кемдең эш ҡоралы?” һ.б. | Балаларҙың һүрәттәре күргәҙмәһе<br>“Минең әсәйем”<br><br>Проект эше<br><br>Викторина<br><br>Фестиваль<br><br>Концерт<br><br>Квест |

| | | |
|---|---|---|
| | Сюжетлы – ролле уйындар: “Әсәйҙәр - ҡыҙҙар”, “Театр”, “Магазин”, “Бөҙрәхәна”, “Поликлиника”, “Аптека”, “Ателье” һ.б. (бергәләп, кәңәшләшеп, тема һайлап алыу, тейешле уйын кәрәк- яраҡтарын һайлау, ролдәр бүлешеү, уйын ҡағиҙәләрен теүәл үтәү).<br>Йәбештереү: “Әсәйемә бүләккә минән ҙур гөлләмә”, “Ф.Исәнғоловтың “Урман ҡыҙыҡайы” хикәйәһе” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Әсәйем портреты” (ике төҫтө ҡушып) һ.б.<br>Ҡул эше: “Тәбиғәт материалдарынан әсәйҙәргә бүләккә һырға” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Әсә бәхете” А. Йәғәфәрова, “Саҡ менән суҡ”, “Әсә” З. Воскресенская, “Рәхмәт әсәйҙәргә” Т. Арслан, “Хат ташыусы” Р. Заһиҙуллин һ.б.<br>Констуктив - модель эшмәкәрлеге: “Әсәйемә бүләккә балаҫ” ( төрлө мозаика ҡулланып).<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Әсә менән һөйләшеү” А. Кәримов көйө.<br>Хәрәкәтле уйындар: ”Йәшерәм яулыҡ”, “Әбей, әбей ни ҡаҙаһың?”, “Ҡош һәм ҡошсоҡтар”, “Беҙ, беҙ, беҙ инек” һ.б.<br>Ситауциялы һөйләшеүҙәр: ”Әсәйем өйҙә булмаһа?”.<br>Видеояҙма төшөрөү: “Минең әсәйем” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ булығыҙ, электр приборҙары”, “Сит кешенән һаҡ бул!”, “Осло әйберҙәр” | |
| Декабрь<br>1-2 аҙна<br>“Ҡышҡы селлә” | Ҡыш миҙгеле менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ҡышҡы тәбиғәттең үҙенсәлектәре (көн һыуыҡ, ҡар яуа, йылға туңған һ.б.). Һыуҙың бер хәлдән икенсегә күсеүен тәжрибәләр аша нығытыу (ҡар-боҙ, һыу-пар), балаларҙың эҙләнеү-тикшеренеү эштәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Ҡалала һәм ауылда кешеләрҙең хеҙмәте, ҡышҡы хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре тураһында белемдәрен киңәйтеү. Арктика һәм Антарктида тәбиғәте һәм унда йәшәүсе хайуандар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ер шарының төрлө тарафтарындағы ҡыштың үҙенсәлектәре тураһында мәғлүмәт биреү.<br>Балаға ҡышҡы спорт уйындары тураһында әңгәмә үткәреү (биатлон, шорт-трек).<br>Ҡоштар һәм йәнлектәрҙең ҡышҡа яраҡлашыуы һәм кешеләрҙең уларҙың туҡланыуына ярҙам итеүе һәм ҡыш миҙгеленә, кеше тормошона йоғонтоһо тураһында белемен камиллаштырыу.<br>Рәссамдарҙың эшендә ҡыш миҙгеленең сағылышын баланың ижади эшмәкәрлегендә күрһәтеү.<br>Һауа торошо тураһында халыҡ һынамыштары менән таныштырыу. Көн һәм төн тураһында һөйләү (иң оҙон көн 22 июнь, иң ҡыҫҡа көн 22 декабрь). Нардуған байрамының тарихы тураһында тулы мәғлүмәт биреү, был байрамдың көн менән төн тигеҙләшкән ваҡытта булыуын аңлатыу. Мнемотаблица, моделдәр, сериялы, сюжетлы һүрәттәр буйынса эш.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?”, “Нардуған ниндәй байрам?” | Балалар ижады күргәҙмәһе:<br>«Беҙҙең яҡта ҡыш»<br><br>Проект эше:<br>“Нардуған – яңы йыл байрамы”<br><br>Квест- уйыны, викторина |

| | | |
|---|---|---|
| | һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Ниндәй спорт төрҙәрен беләһең?”, “Ауырымаҫ өсөн нимә эшләргә кәрәк?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Был ҡайсаҡ була?”, “Һүрәткә ҡарап һөйләйбеҙ”, “Ҡыш билдәләрен әйт”, ”Экологик пирамида”, “Туҡланыу сылбыры”, “Юл ҡағиҙәләре”, “Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре”, “Йыл миҙгелдәре”, “Был йәнлек ҡайҙа йәшәй?”, “Һөйләү буйынса таны”, “Был ниндәй спорт төрө?” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Ҡыш биҙәктәре”, “Тәүге ҡар”, “Тыштың һыуыҡ бурандары” (графика), һ.б.<br>Әүәләү: “Саңғысы”, “Коньки шыуыу” Г.Юнысова шиғыры һ.б.<br>Йәбештереү: “Ҡышҡы тәбиғәт” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Аэросаналар” (“тико”, “квадро”, “техно” конструкторҙары) һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Экологтар”, “Һунарсы”, “Полярниктар” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойошторорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтеү).<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ҡыш” Н. Нәжми, “Ҡышҡы урман” И. Шишкин, “Ун ике ай” рус халыҡ әкиәте, ”Ҡар яуғас”, “Февраль”, “Буран” Г. Юнысова, “Ҡар бөртөгө” Ф.Суфиянов, ”Снежинки” В. Никитина һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Өшөтәм”, “Ҡарҙан яһалған тир”, “Хоккей”, “Бер саңғыла йүгереү” һ.б.<br>Эҙләнеү – тикшеренеү эштәре: “Термометр нисек эшләй?” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Тышта ҡар яуа” К.Даян, “Нардуған”А. Ҡобағошов һ.б.<br>Ситуациялы хәл: “Нимә яҡшы, нимә насар” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Микробтар һәм вирустар”, “Хәүефһеҙ ҡышҡы уйындар” һ.б. | |
| 3-4аҙна<br>“Яңы йыл килә! | Баланың Яңы Йыл байрамы тураһында белемен киңәйтеү: байрамға әҙерләнеү, үҙ ҡулдары менән әҙерләнгән бүләктәрҙе тапшырып яҡындарын ҡыуандырыуҙан ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо алыу. Яңы йыл байрамы донъяның төрлө халыҡтар араһында төрлөсә үткәрелеүе тураһында төшөсә биреү. Ҡыш бабайҙың тыуған иле Лапландия тураһында мәғлүмәт биреү, ҡыш миҙгелдәре тураһында баланың белемен киңәйтеүҙе дауам итеү. Балаларҙы Яңы йыл байрамын әҙерләүгә актив йәлеп итеү. Төркөм бүлмәһен һәм уйын майҙансыҡтарын байрамса биҙәү.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “Яңы йыл”<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Яңы йыл килә беҙгә”, “Ҡыш бабай ҡайҙа йәшәй?”, “Һыуыҡ менән һалҡын” башҡорт халыҡ әкиәтен һөйләү һ.б. | Яңы йыл байрамы<br><br>Яңы йыл уйынсыҡтары күргәҙмәһе (ата-әсәләр менән берлектә) |

| | | |
|---|---|---|
| | Үҫтереүсе диалог: “Шыршы ҡайҙан беҙгә килгән?”, “Яңы йыл байрамын көтәһеңме?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Миҙгел байрамдары”, “Спорт уйындары”, “Һаулыҡ пирамидаһы”, “Көн - төн”, “Төрлө битлектәр” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “ Ҡыш бабай беҙҙә ҡунаҡта” (сюжетлы) һ.б.<br>Йәбештереү: “Ҡарһылыу”, “Шыршыға уйынсыҡтар” һ.б.<br>Әүәләү: “Ҡыш бабай, ҡарһылыу” һ.б.<br>Сюжетлы - ролле уйындар: бала инициативаһынан сығып уйыындар уйнау (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойошторорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт осталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтеү).<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ҡыш бабайға аэросана”, “Шыршы уйынсыҡтары” (лего конструкторҙары, технологик карта буйынса) һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Ике ҡыш бабай”, “Тау алыш”һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: ”Ҡыш бабай”, “Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу”, “Аҡ ҡар” П. Гоздеев эшкәртеүендә һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Йондоҙҙар бейей” К. Кинйәбулатова, “Ҡар бабай” Ф.Туғыҙбаева, “Ҡыш бабай” С.Әлибаев, “Ҡыш бабай” Р. Шәғәлиев, “Хат яҙам ҡыш бабайға”Н. Сәлимов, “Һаумы – һаумы ҡыш бабай”А. Йәғәфәрова, “Ҡарһылыуниңә һуңланы?” Ф. Туғыҙбаева һ.б.<br>Хәүефһеҙлек:”Пиротехника ҡурҡыныс янай”, “Һаҡ бул, гирлянда!” һ.б. | Балаларҙың һүрәттәр күргәҙмәһе<br>“Яңы йыл килә беҙгә” |
| Ғинуар<br>1-2 аҙна<br>Каникулдар<br><br>“Хайуандар һәм ҡоштар донъяһы” | Баланың хайуандар донъяһы тураһында белемен киңәйтеү һәм системаға һалыу. Уларҙы төрлө экосистемаға яраҡлашып үҫеш шарттары, тукланыуы бәйләнешен иҫбатлау.<br>Бөжәктәр, балыҡтар, ҡоштар, йыртҡыс һәм кимереүсе хайуандарҙы дөрөҫ итеп төркөмләргә өйрәтеү: хайуандар - ҡырағай һәм йорт; ҡоштар - йорт, урман, йыртҡыс һәм йыртҡыс булмаған. Төрлө илдә йорт хайуандары ла төрлөсә икәнен төшөндөрөү (Рәсәйҙә - һыйырҙар, Индияла - филдәр, Азияла - ишәктәр, Африкала- дөйәләр, Австрияла - страустар күберәк һ.б.).<br>Баланы сағыштырырға, анализларға, ҡыҙыҡһыныуын арттырырға һәм фекер йөрөтөргә өйрәтеү (Ни өсөн пингвин – ҡош?, Ни өсөн кит-балыҡ түгел? һ.б.).<br>Ҡыш миҙгеле ҡырағай хайуандар өсөн ауыр осор булыуын аңлатыу һәм хайуан, йәнлектең төрлөсә әҙерләнеүен асыҡлау, хайуандарҙың атамаларын белеү, уларҙың тәбиғәткә файҙаһын аңлау һәм ябай итеп иҫбатлай белеү.<br>Башҡортостандың “Ҡыҙыл китабына” ингән бөжәктәр: ер-һыу хайуандары, һөйрәлеүселәр, ҡоштар, үҫемлектәр тураһында белемдәрен киңәйтеү.<br>Беҙҙе уратып алған урман-ҡырҙарҙа үҫкән үҫемлектәр ҡош - йәнлектәр өсөн тукланыу, йәшәү һәм үрсеү шарттары икәнен аңлатыу. | Акция:<br>«Йәнлектәргә ҡыш миҙгелен сығырға ярҙам ит»<br><br>Сәхнәләштереү:<br>«Кәзә беҙҙә ҡунаҡта»<br><br>Экологик виртуаль сәйәхәт:<br>«Башҡортостан экосистемаһы» |

| | | |
|---|---|---|
| | Белем биреүсе ваҡиға: “Өләсәйем ихатаһында”, “Ҡырағай хайуандар” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрес: “Ҡыҙыл китапҡа ингән хайуандар”, “Ҡыш миҙгелендә нисек итеп йәнлектәргә ярҙам итеп була?”, “Башҡортостандың ҡыҙыл китабы” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Ниндәй ҡоштарҙы, хайуандарҙы беләһең?..”, “Хайуандарҙың кеше һаулығына файҙаһы”, “Ниндәй йәнһүрәттән”, “Ҡырағай хайуандарҙың кешегә файҙаһы һәм зыяны”, “Нимә, нисек хәрәкәтләнә?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Урманда ағас ни өсөн кәрәк?”, “Нисек хәрәкәт итә”, “Туҡланыу сылбыры”, “Рәссамдың хатаһын төҙәт”, ”Нимә ҡайҙа йәшәй?”, “Был ниндәй ҡош”, “Башҡортостандағы ҡышлаусы ҡоштарҙы таны” һ.б.<br>Эковикторина: “Һыуҙа, һаҙлыкта нимә йәшәй?”<br>Һүрәт төшөрөү: “Беҙҙең яңы дуҫтарыбыҙ”, “Минең яратҡан йәнлегем” , “Әкиәттә хайуандар,ҡоштар ”һ.б.<br>Әүәләү: “Ҡыҙыл китапҡа индерелгән хайуандар”, “Аҡбай, Ҡашҡар, Муйнаҡ- улар йортҡа күҙ-ҡолаҡ” һ.б.<br>Йәбештереү: “Тәбиғәт беҙҙең байлығыбыҙ” (коллектив ҡорама) һ.б.<br>Конструктив- модель эшмәкәрлеге: “Зооцирк”, “Урман хайуандары” , “Бүре”(оригами).<br>Ситуациялы хәл: “Кошсоҡҡа тышта һыуыҡ ...”, “Циркта булғаның бармы?”, “Айболитҡа нисек ярҙам итергә..” һ.б.<br>Һүҙле уйын: “Өнгә һүрәт һайла”, “Мин башлайым, ә һин дауам ит” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Экологтар”, “Тәбиғәт белермәндәре”, “Балыҡсы” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойоштороорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтеү).<br>Хәрәкәтле уйындар: “Ат сабышы”, “Балыҡ тотоу”,” Удмурт халыҡ уйыны “Һуҡыр тәкә”һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Ҡоштар ашханаһы” Ғ.Ғәлиева, “Тейен” Р. Ниғмәтуллин, “Айыу “А. Йәғәфәрова, “Ҡырмыҫҡа” Г. Йыһангирова, “Турғай” А. Йәғәфәрова әкиәте, “Кәкүк” ненец халыҡ әкиәте.<br>Уйын ситуация: “Әгәр мин урман хужаһы булһам...” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул, берәҙәк эттәр, бесәйҙәр” , “Тайғаҡ юл” һ.б. | Эковикторина<br><br>Кроссворд<br><br>Акция:<br>“Ҡоштарға тағараҡ” |
| Февраль<br>1-2 аҙна<br>“Халҡым биҙәктәре” | Башҡортостанда йәшәүсе халыҡтарҙың биҙәү-ҡулланма сәнғәте тураһында белемдәрен киңәйтеү. Халыҡтарҙың бер-береһе менән аралашыу һөҙөмтәһендә биҙәү-ҡулланма сәнғәтендәге уртаҡ оҡшаш яҡтарын һәм айырмалы яҡтарын күрһәтеү: бөтә халыҡтарҙың да биҙәгендә хайуандар (ҡош башы, мөгөҙ, тәпәй), үҫемлектәр һәм геометрик фигуралар, тура, һыныҡ һыҙыҡтар булыуын аңлатыу. Башҡорт халҡында биҙәктәрҙең айырым | Проект эше<br>“Халыҡ кәсебендә биҙәү-ҡулланма сәнғәте” |

| | | |
|---|---|---|
| | мәғәнәгә эйә булыуын (түңәрәк әүернә – ҡояш, ҡусҡар – ундырышлылыҡ һ.б.), төҫтәр (ҡыҙыл – йылылыҡ, ут, аҡ –тыныслыҡ, күк – азатлыҡ, йәшел –мәңгелек йәшеллек); ырыу тамғалары инаныуҙың һауыт-һаба, кейем биҙәктәрендә бирелеүен күрһәтеү.<br>Рус халҡының тәҙрә, ҡапҡа баштарының, туҙ һауыттарындағы биҙәктәр, рус матрешкаһы, Гжель, Хохлома, Дымков уйынсығы, Вологда селтәре; сыуаш халҡының ҡайын туҙынан эшләнгән өй кәрәк яраҡтары (кәрзин, диван, сәңгелдәк, ултырғыс); мал мөгөҙөнән эшләнгән тараҡтар, кейем-һалымдағы биҙәктәре менән таныштырыу.<br>Һүрәтләү эшмәкәрлегендә төрлө халыҡтың биҙәү-ҡулланма сәнғәте өлгөләрен ҡулланыу, айыра белеү, матурлығғын күрә белеү, был сәнғәткә һөйөү, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.<br>Һүрәт-иллюстрациялар, бағышһүрәттәр, картина ҡарау “Зәңгәр күлдәкле ҡыҙ” З.Дәүләткилдиев.<br>Ваҡиға: “Тыуған көн” (яҡшы кәйеф, дуҫлыҡ мөнәсәбәте булдырыу)<br>Үҫтереүсе дәрес: “Милли кейем”, “Төрлө халыҡ биҙәктәре”, “Дуҫлыҡ төйәге”<br>И. Кинйәбулатов шиғыры һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Әгәр мин рәссам булһам...”, “Әгәр мин модельер булһам...” , “Әгәр мин артхитектор булһам...”һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Кем нимә эшләй?”, “Биҙәкте йый”, “Домино”, һүҙле - дидактик уйын “Һөйләм төҙө”, “Дөрөҫ әйт”, “Башҡорт биҙәге”, “Башҡорт орнаменттары”, “Ҡырҡылған һүрәттәр”, “Балаҫты дөрөҫ йый”, “Халыҡ биҙәктәре”, “Балаҫты тап”, рус халыҡ уйыны “Шундай уҡ биҙәктәрҙе тап” һ.б.<br>Әүәләү: “Картатайым түбәтәйе” һ.б.<br>Йәбештереү: “Милли кейемдәр”, “Балаҫ һуғыу”, “Өләсәйҙең камзулы”, “Матур сағыу ситектәр” һ.б.<br>Һүрәт - иллюстрациялар ҡарау (түбәтәй, камзул, ҡашмау, күлдәк)<br>Һүрәт төшөрөү: “Ҡалабыҙ мәсете”, “Камзулды биҙә”, “Һауыт - һабаларҙы биҙәү”, “Алъяпҡысым биҙәкле”, “Мөғжизәле ҡалаҡ” (городец) һ.б.<br>Сюжетлы - ролле уйындар: “Ғаилә”, “Ҡунаҡ саҡырыу” (бергәләп уйнау, эшләү, этикет ҡағиҙәләре) һ.б.<br>Үҫтереүсе уйын: “Ҡурсаҡты кейендер” һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Конгресс-холл”, “Тылсымлы тирмән” һ.б. (ҡағыҙ, ҡатырға ҡулланып)<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул - ваҡ биҙәүестәр”, “Осло әйберҙәр” һ.б.<br>Уйын – ситуация: “Ҡурсағыма күлдәктәр” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Йөҙөк һалыш”, “Тирмә”, “Йәбешкәк түңгәк”, “Яулыҡ ҡайҙа?” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Беләҙегем – йөҙөгөм” һ.б. | Күргәҙмә:<br>«Алтын ҡулдар»<br>(ата-әсәләр менән ҡул эштәре)<br><br>Виртуаль сәйәхәт:<br>“Ағиҙел”<br>ижад берекмәһе |

| | | |
|---|---|---|
| | Нәфис әҙәбиәт: “Аҫалы балаҫ” Ф.Туғыҙбаева, “Өләсәйем һандығы” шиғырҙар йыйынтығы, “Әминбәк”,”Алпамыша батыр”, “Батша ҡыҙы” әкиәте. | |
| 3-4 аҙна<br>“Ил һаҡлаусылары” | Рәсәй Армияһы тураһында баланың белемен киңәйтеүҙе дауам итеү. Тыуған илде һаҡлау - ул ир – аттарҙың бурысы икәнен аңлатыу. Тыуған илгә ҡарата һөйөү тәрбиәләүҙе, гендер тәрбиәһе биреүҙе дауам итеү. Енси булмышына ҡарап, үҙенең ғаиләлә, йәмғиәттә башҡарасаҡ роле тураһында (малай – ул, ир, атай, ғаилә башлығы, ил һаҡсыһы) һәм буласаҡ ил һаҡсылары – көслө, ҡыйыу, тәүәккәл, намыҫсан, тоғро һалдат буласағын аңлатыу. Ҡыҙҙарҙа – буласаҡ һалдаттарға ихтирам тойғоһо үҫтереү.<br>Балаға башҡорт халҡының электән үк ғәскәр тотоп, Рәсәй сиктәрен һаҡлауы, рус ғәскәре составында күп тапҡырҙар һуғыштарҙа (төрөктәр, французлар, поляктар, японлар менән) походтарҙа ҡатнашып, батырлыҡтар күрһәтеүе, башҡорт халҡының бик күп поход йырҙары («Любезники-любизар», «Ерән ҡашҡа», «Порт-Артур») булыуын аңлатыу. Һүрәттәрҙә башҡорт атлыһын, гусар, казак һуғышсыһын айырыу. Ул алыштарҙа башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының да ҡатнашыуын билдәләү.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “Беҙ буласаҡ һалдаттар”<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы”, “Төньяҡ амурҙары”, “А.Матросов ҡаһарманлығы” Ғ.Мостафиндың картинаһы буйынса хикәйә төҙөү, “М. Гәрәев” Ф. Вәхитов хикәйәһен уҡыу,“Башҡортостандың дан паркы һәм музейы”, Ә.Лотфулллиндың «Оҙатыу” картинаһы буйынса, Р.Нурмөхәмәтовтың «Батыр тураһында легенда» картинаһы буйынса, “Яҡташ батырҙарыбыҙ» һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Илебеҙ тыныслығы хәрбиҙәр ҡулында”, “Һин ҙурайғас һалдат булаһыңмы?”, “Мин командир булһам...” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Ил һаҡсыһы”, “Осоусылар”, “Танкистар”, “Карап”, “Беҙ һалдаттар” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойошторорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтеү).<br>Ситуациялы хәл: “Ниндәй ғәскәрҙәрҙе беләһең?” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “В”,”Ф” өноҡшаш уйын, “Осоусы техниканы айырып һал”, “Хәрбиҙәр”, “Транспорт төрҙәре”, “Һүҙҙе тап”, “Моделенән таны”, “Ниндәй һөнәр эйәһенә тап килә?”, “Өлөштәренең атамаларын әйт”, “Карапты киҫәктәрҙән йый”, “Нимә һүрәтләп була?” (технологик карта) һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Олатайым ҡурайы” Г. Йыһангирова, “Егеткә” С.Юлаев, “Эх, батырҙар” Р.Ураҡсина, “Олатайҙың фотоһы” М.Ғәли, “Һәйкәл” Т.Ғәниева, “Муса Гәрәев” В.Вәхитов, “Батыр менән айыу” (башҡорт халыҡ легендаһы).“Батырлыҡ” тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү, һ.б.<br>Әүәләү: “Хәрби техника”, “Хәрбиҙәр” һ.б. | Виртуаль сәйәхәт:<br>«Дан паркы һәм музейы»<br><br>Уйын «Зарница»<br><br>Атайҙар ҡатнашлығында музыкаль – спорт байрамы “Ир – бала илгә терәк”<br><br>Фотокүргәҙмә:<br>“Атайым һалдат булған” |

| | | |
|---|---|---|
| | Һүрәт төшөрөү:” “Олатайым портреты”,“Ил сиге һағында”, “Самолеттар зәңгәр күктә”, “Атай-олатайҙарға таҫтамалдар бүләккә” h.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Космодром”, “Башҡортостан һауа юлдары” (“магформерс”, “тико” ағас һәм тимер конструкторҙар) h.б.<br>Оригами: “Буденовка”, “Кәмә”, “Самолет” h.б.<br>Йәбештереү: “Хәрби транспорт” h.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Марш”, “Осоусылар”, “Һалдаттар”, “Аттар ярышы”, милли уйындар “Атыусы” татар халыҡ уйыны, “Ҡош атыш”, “Ҡыҙыл флаг” башҡорт халыҡ уйыны h.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Яңғын бик ҡурҡыныс”, “Ҡурҡыныслы боролош”, “Үтергә тыйыла”, “Инеү юлы юҡ”, “Боҙҙа һаҡ бул!” h.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Любезники-любизар”, “Мәңгелек ут” С.Әлибай, “Һалдат булам “<br>В. Мәүлитов., “Һыбайлылар”, “Ағайым тора һаҡта” Д. Хәсәншин, “Олатайым миҙалдары” Ә.Зиннурова h.б. | |
| Март<br>1-2 аҙна<br>“Әсәләр нур сәсәләр” | 8 март байрамы тарихы менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәмғиәт үҫешенә йоғонтоһо, Башҡортостан, Рәсәй Федерацияһы һәм сит ил ҡатын-ҡыҙҙары ойошмаларының булыуы тураһында башланғыс төшөнсә биреү.<br>Төрлө тармаҡта эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың юғары баһаларға лайыҡ булыуы һәм ҡайһы-бер шәхестәр менән таныштырыу.<br>Башҡорт халыҡ ижадында (әкиәттәрендә, легендаларында, мәҡәл-әйтемдәрендә, йырҙарында) ҡатын-ҡыҙға һөйөү, ихтирам сағылыуын күрһәтеү.<br>Әсәйгә, өләсәйгә, тәрбиәсегә, ҡыҙҙарға ҡарата ҡәҙер – хөрмәт тәрбиәләү. Сериялы һүрәттәр, ситуациялы һүрәттәр, мнемотаблицалар, модель схемалар менән эш “Әсәйем һөнәре” h.б. Мәҡәлдәр, әйтемдәр, телтөҙәткестәр, йыуатҡыстар, үсекләгештәр өйрәнеү h.б<br>Гендер тәрбиәһе биреүҙе дауам итеү. Малайҙарға ҡыҙҙарға ярҙам итеү теләге, урын биреү, үҙенән алда ишектән үткәреү һәм әҙәпле булыуҙы күнектереү. Бүләктәр әҙерләүгә баланы йәлеп итеү. Туҡыма төрҙөрө менән таныштырыу (ситса, капрон, ебәк, атлас, трикотаж, йөн, синтепон h.б.).<br>Белем биреүсе ваҡиға: “ Ҡатын-ҡыҙҙар көнө”.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “8 март- ҡатын-ҡыҙҙар көнө”, “Башҡортостан арҙаҡлы ҡатын-ҡыҙҙары”<br>Үҫтереүсе диалог: “Әгәр әсәй өйҙә булмаһа?”, “Сит кеше ишек шаҡый” h.б.<br>Дидактик уйындар: “Айырып һал”, “Ниндәй һөнәр эйәһе”, “Кем күберәк наҙлы һүҙ әйтер?”, “Һөнәрҙең эш ҡоралдарын ата”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә”, Нимә артыҡ?”, “Кем тураһында һөйләнем?”,“Һөйләү буйынса әсәйеңде таны” h.б. | Байрам<br>“Ил биҙәге – ҡатын ҡыҙ”<br><br>Видео – интервью:<br>«Минең әсәйем»<br><br>Күргәҙмә:<br>(әсәйҙәрҙең ҡул эштәренән)<br><br>Фотокүргәҙмә:<br>“Минең әсәйем” |

| | | |
|---|---|---|
| | Сюжетлы – ролле уйындар: “Ғаилә”, “Әсәйҙәр һәм ҡыҙҙар”, “Магазин”, “Аптека”, “Ателье”, “Элемтә бүлеге”, “Бөҙрәхәна” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойоштороорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдң үҙенсәлекле һәләтенә ҡаерап бүлешергә өйрәтеү).<br>Нәфис әҙәбиәт: “Әсә рәхмәте” А.Ихсан, “Мин бәхетле, әсәйем бар” З.Ханнанова, “Өләсәйем ойоҡ бәйләй” Ғ.Ғәлиәскәрова, “Айоға”, “Батша ҡыҙы” әкиәте,“Тәтәй күлдәк ҡайҙа үҫә?”<br>В. Яҡупова һ.б.<br>Конструктив – модель эшмәкәрлеге: “Йорт йыһаздары” һ.б. (ағас , лего консрукторҙар)<br>Һүрәт төшөрөү: “Әсәйем портреты”, “Әсәйемә гөлләмә” һ.б.<br>Әүәләү: “Әсәйемә сәй сервизы”, “Өләсәйемә бүләк бал һауыты- батман” һ.б.<br>Йәбештереү: “Әсәйҙәргә сәскәләр” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Әсә менән һөйләшеү “ А. Кәримов музыкаһы, “Әсәйҙәр байрамы” Ю.Моратов, “Әсәйем ҡәҙерлем” Ә. Зиннурова һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Аҡ тирәк- күк тирәк”, “Көйәнтә менән һыу ташыу”, “Төйләгән” һ.б.<br>Һүҙле уйын: “Әсәйҙе иркәләп, яратып әйт” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Өйҙә яңғыҙ ҡалғанда”, “Урамдағы сит кешеләр” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Халҡым көнкүреше”<br><br>“Халҡым йолалары, ғөрөф – ғәҙәттәре” | Баланы башҡорт халыҡ шөғөлө – балыҡсылыҡ һәм кәсеп (металл эшкәртеү, тал үреү, балаҫ һуғыу, быйма баҫыу, сигеү, тире эшкәртеү, милли кейемдәр тегеү, ағастан һырлап эшләү һ.б.) тураһында мәғлүмәт биреү.<br>Башҡорт халҡының электән көнкүреш кәрәк-яраҡтарын ңҙ ҡулдары менән эшләүҙәрен: ағастан – юнып – һырлап төрлө һауыт-һаба, сәңгелдәк, кейем урҙаһы, һауыт-һаба кәштәһе, урындыҡ, һандыҡ; төҫлө металдан – ҡатын-ҡыҙҙарға биҙәүес әйберҙәре: ҡашмау, үрмес, һаҡал, алҡа, беләҙек, балдаҡ һуғыуҙы балаларға аңлатыу.<br>Хәҙерге көндә башҡорт кәсептәренең тергеҙелеүе тураһында һөйләү: Өфөләге “Ағиҙел” ижад берекмәһендә сығарылған һауыт - һаба, башҡорт сувенирҙары, зауыҡлы милли кейемдәр.<br>Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының кейем-һалымды үҙ ҡулдары менән етештереүе: киндерҙән туҡыма һуғып кейем тегеүҙәре, таҫтамал, күлдәк, ашъяулыҡтарҙы сигеп, биҙәкле кейемдәрҙе байрамда кейеүҙәрен күрһәтеү. Башҡортостанда йәшәгән төрлө милләт халыҡтарының кәсептәрен өйрәнеүгә балала ҡыҙыҡһыныу уятыу.<br>Балаларҙы башҡорт һәм Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыуҙы дауам итеү.<br>Йыл миҙгеленә бәйле йолаларҙың күмәкләп үткәреү, оҙон ҡыштан һуң көндәр йылыныуға, үләндәр һәм ағастар йәшәреүенә шатланыу һәм төрлө халыҡтарҙың йола | Проект эше<br>“Биҙәү – ҡулланма сәнғәте”<br><br>Ҡул эштәренән күргәҙмә<br><br>Квест уйыны |

| | | |
|---|---|---|
| | байрамдарының уртаҡ оҡшашлыҡтарын күрһәтеү. Ауыҙ – тел ижадын, мәҡәлдәр өйрәнеү, йомаҡтар сисеү.<br>Башҡорт халҡында яҙ көнө, ер ҡарҙан әрселгәс ир – аттар йыйылып, бура бурауҙары, татар халҡында һабанға төшөр алдынан «Зәрә ҡысҡырыу», Һамар яҡтарында - «Йыуа аҙнаһы», «Сәскә байрамы», «Еләк байрамы», «Сәғәт байрамы», башҡорттарҙа “Кәкүк сәйе”, “Ҡарға бутҡаһы” һ.б. үткәрелеүен, ҡатын-ҡыҙҙарҙың өмә менән киндер һуғыу, һөлгө, таҫтамал туҡыу, шәл бәйләү, кейеҙ баҫыу, кис ултырыу һ.б. ғәрәф-ғәҙәттәре менән таныштырыу.<br>Сибай ҡалаһының крайҙы өйрәнеү музейына маҡсатлы экскурсиялар.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: «Ҡарға бутҡаһы», “Башҡорт йолалары”, “Балаҫ һуғыу оҫталары”, “Ағас эшкәртеү” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Ҡымыҙ тураһында нимә беләһең?”, “Тиренән нимәләр эшләп була?” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Балыҡсы”, “Малсылыҡ”, “Ҡымыҙсылыҡ” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойоштороу, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланып, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешеп уйнау).<br>Дидактик уйындар: “Балыҡты таны“, “Ҡамыр аштары”,”Мин башлайым һин дауам ит”, “Йомаҡты әйтеп бөтөр”, “Балаҫты төҙө”, “Бер һүҙ менән әйт”, “Был һауыт – һаба нимәнән эшләнгән?”, Һөт аҙыҡтары”һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Әйләнәбеҙ”, ”Косилка - молотилка”, “Татар бейеүе” һ.б.<br>Конструктив-модель эшмәкәрлеге: “Балаҫ” һ.б. (төҫлө пластмасс мозаикалар, конструкторҙар).<br>Йәбештереү: “Ағас һауыт- һаба”, “Тәпән” һ.б.<br>Эҙләнеү – тикшеренеү эшмәкәрлеге :“Ағастың үҙенсәлектәре” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Яулыҡ һалыш”, “Аҡ тирәк - күк тирәк”, “Ебегән”, Буш урын” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Р.Ураҡсина “Йолалар белмәү яҙыҡ”, “Батша ҡыҙы”, “Байҙың нужаны күреүе”, ”Эшләп табылған бер һум” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Һаҡ бул- ваҡ биҙәүестәр”, “Осло әйберҙәр “ һ.б. | |
| Апрель<br>1 аҙна<br>“Яҙ килә!” | Яҙ миҙгеле билдәләре, күсер ҡоштарҙың әйләнеп ҡайтыуы һәм ҡош төрҙәре тураһында дөйөм төшөнсләр биреү (биҙәү өсөн – декоратив ҡош, йорт ҡоштары, күсер ҡоштар, ҡышлаусы ҡоштар). Уларҙы тышҡы күренештәре, холоҡтары, туҡланыу, үрсеү ысулдары менән таныштырыу. Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт араһындағы бәйләнеш тураһында баланың белемен системаға һалыу. Көн һәм төн тураһында баланың белемен киңәйтеү, һауа торошона һәм тәбиғәт миҙгеленә бәйләп асыҡларға өйрәтеү. Хайуандарҙың һәм | Күңел асыу сараһы<br>“Кояш нурҙарын һибә!”<br><br>Викторина |

| | | |
|---|---|---|
| | үҫемлектәрҙең тәбиғәттәге үҙгәрештәргә ҡарата яраҡлашыуын аңлатыу. Урман, болон, ялан, ҡыр, бөжәктәр тураһында күҙаллауҙарын киңәйтеү. Тәбиғәттәге үҫемлектәр – йыуа, балтырған, көпшә, һөтлөкәс, ҡуян тубылғыһы, ҡуҙғалаҡ, оҫҡон йыуаһы, был үҫемлектәрҙең витаминдарға бай булыуы тураһында мәғлүмәт биреү.<br>Башҡортостандың «Кыҙыл китабына» ингән үҫемлектәрҙе таныу, атамаларын әйтеү, уларға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.<br>Тәбиғәттә үҙ –үҙеңде тотоу, хәүефһеҙлек ҡағиҙәһен өйрәнеүҙе дауам итеү. Баҡсалағы яҙғы эштәр, ябай экологик тәрбиә тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү. Тәбиғәткә бәйле мәҡәлдәр, йомаҡтар, әйтемдәр өйрәнеү. Миҙгел байрамы Нәүрез тураһында мәғлүмәт биреүҙе камиллаштырыу.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: Р.Әхмәтшин “Яҙ күренештәре”картинаһы, “Яҙғы эштәр” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Яҙҙың тәүге сәскәһе - умырзая”, “Бөжәктәрҙе таны”,“Яҙ тураһында нимәләр беләһең?”, “Нимә ул экологик тамғалар?” һ.б.<br>Уйын-фантазия: “Әгәр мин агроном булһам...”, “Мин урман ҡарауылсыһы булһам...” һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Яҙ бүләге” А. Йәғәфәрова, “Аҡман – тоҡман” З. Исламова хикәйәһе, “Ағастар йоҡонан уяна” З. Исламова, “Нәҙекәйбил” А. Йәғәфәрова, “Весна” А. Бондаренко шиғырҙары, “Яҙ бүләге” А.Йәғәфәрова, “Ике ҡояш” Ә.Вәхитова, “Гөрләүектәр” Г.Юнысова, “Яҙ йыры” Г.Зарипов, “Өй артында” Ф. Рәхимғолова, “Умырзая” А. Йәғәфәрова, “Ҡаҙҙар ниңә ала булған?”, “Сәскә менән күбәләк ” М.Дилмөхәмәтов, Р. Ғәрипов “Сыйырсыҡ”, “Ҡояш көлә” Ғ.Ғәлиева“Яҙ” Д.Шәрәфетдинов, “Боҙ китә” Ә. Таһирова, “Яҙ “Ә.Әсәҙуллина, “Төлкө менән ҡуян” әкиәте һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Тыуған яҡымдың яҙы”, “Төрлө төҫтәге болон”, “Тәбиғәт уяна” һ.б.<br>Эҙләнеү-тикшеренеү эшмәкәрлеге: “Тылсымлы һауа”, “Һыуҙың өс сере”, “Төҫлө ҡомдар”, “Яҡтылыҡ серҙәре”, “Һуған үҫешен күҙәтеү” , “Аяҡ аҫтындағы үләндәр” һ.б.<br>Конструктив–модель эшмәкәрлеге: “Ауыл хужалығы техникаһы”, “Умарталыҡ” һ.б. (“техно”конструкторы, тәбиғәт ,ташландыҡ материалдарҙан).<br>Сюжетлы-ролле уйындар: “Баҡсасы”, “Дауаханала”, “Ғаилә”, “Беҙ экологтар” һ.б. (кәңәшләшеп бергә уйындың темаһын һайларға, тейешле атрибуттар һайларға, уйын ҡағиҙәләрен булдырып, ҡағиҙәне теүәл үтәргә күнектереү).<br>Дидактик уйындар: “Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт”, “Был үҫемлек ҡайҙа үҫә”, “Дүртенсе артыҡ”, “Тышҡы күренеше буйынса танып бел”, “Был нимәнең һабағы (сәскәһе, олоно, япрағы, ботағы)?”, “Хеҙмәт өсөн нимә кәрәк?”, “Көн - төн”, “Хайуандарҙы айыр”, “Тәбиғәт күренешен ата”, “Йыл миҙгеле һүрәттәрен хикәйә төҙө”, “Үҫемлекте таны”, “Был үҫемлек ҡайҙа үҫә?”, “Дүртенсе артыҡ”, “Был ҡайсаҡ була?”, “Үҫемлектәң | Квест уйыны<br><br><br>Акция<br>“Умырзаяны өҙмә!” |

| | | |
|---|---|---|
| | өлөштәрен тап”, “Үҫеш сылбыры”, “Ашарға ярай - ярамай”, “Үрсеү пирамидаһы”, “Туҡланыу пирамидаһы”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә”, “Был ниндәй бөжәк?”, “Төҫтәрҙе сиратлап һал”, “Нимә ҡайҙа йәшәй?” һ.б.<br>Әүәләү: “Боҙбармаҡтар”, “Бөжәктәр донъяһында” һ.б.<br>Модель - схемалар менән эш: “Тәбиғәт сере”, “Бәйләнеш сылбыры”, “Туҡланыу сылбыры”, “Нимә һыуһыҙ йәшәй ала” һ.б.<br>Йәбештереү: “ Яҙ сәскәһе - умырзая”, “Тәбиғәт уяна” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Бура һуғыу”, “Сылбыр”, “Сырмалсыҡ”, “Ҡаҙҙар, ҡаҙҙар ҡайтығыҙ”, “Осто - осто”, “Йәшерәм яулыҡ” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Яҙ килә” Р.Ғөбәйҙуллина, “Ҡоштар килә” С. Сәлмәнов, “Урманға барабыҙ” Р. Сәлмәнов, “ Ер уянды” Г. Шафиҡова, “Яҙ йыры“ К. Акбашев, “Ал таҫма”, “Нәүрез һәм балалар”, “Яҙ килә”, “Яҙ етә” Ф. Кәрим һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Сәскәләрҙе һаҡла!”, “Һаҡ бул, талпан!”, “Йылғала - боҙҙар китә” һ.б. | |
| 2- се аҙна<br>“Беҙ Йыһангирҙар” | Ерҙең Ҡояш һәм үҙе тирәләй әйләнеүенә бәйле булыуын аңлатыу. Йыһан, Ер шары һәм уның юлдашы Ай тураһында белемдәрен формалаштырыу. Глобус һәм карта, күренекле космонавтар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ҡояш системаһы планеталары һәм йондоҙҙар, йондоҙлоҡтар тураһында белемдәр биреү. Йондоҙнамә тамғалары буйынса үҙенең холоҡ – фиғел үҙенсәлектәрен таба, күрә, аңлай белергә өйрәтеү.<br>Ю.Гагарин, В.Терешкова тураһында белемдәрен киңәйтеү. Һауа есемдәре тураһында мәҡәл, әйтемдәр, йомаҡтар өйрәнеү.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “Космонавтар көнө”.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “12 апрель- космонавтика көнө”, “Йыһан киңлеге” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Минең хыялым йыһангир булыу”, “Йыһангир булам тиһәң, спортты дуҫ ит”,“Йондоҙҙар тураһында нимә беләһең?”, “Нисек космонавт булырға?” һ.б.<br>Сюжетлы–ролле уйындар: “Йыһангирҙар”, “Йыһан карабы”, “Космонавтар” һ.б. (уйын ҡағиҙәләрен үтәү, үҙ-аллы уйын ойошторорға, уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнау өсөн үҙ белемдәрен хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешергә өйрәтеү).<br>Һүрәт төшөрөү: “Йыһан нурҙары”, “НЛО беҙҙә ҡунаҡта”, “Йыһан киңлеге”.<br>Йәбештереү: “Йыһан мөғжизәһе”, “Ракета” һ.б.<br>Әүәләү: “Ракета”, “Космонавт”, “Планеталар” һ.б.<br>Ижади һөйләүҙәр: “Мин айға осһам…”, “Мин Йыһангир булһам…”.<br>Нәфис әҙәбиәт: “Осорбоҙ бейеккә” Ф. Рәхимғолова, “Мин осоп китәм” З. Әхмәтйәнова, “Мин осоусы” Ә. Вәхитова ,”Восток тыуған илебеҙ киңлектәре өҫтөндә” Ю. Гагарин, “Нимә яҡшы була?” В. Осеева, “Ҡош юлы” , “Зөһрә ҡыҙ”, “Етегән йондоҙ – ете ҡыҙ” башҡорт халыҡ легендаһы, ”Йәйғор һәм болот” С. Кәрим, “Астрономдар” А. Игебаев, | Байрам:<br>”12 апрель -<br>Космонавтар көнө”<br><br>Һүрәттәр күргәҙмәһе:<br>“Йыһан киңлеге”<br><br>Проект эше:<br>“Ҡояш макеты<br>системаһы”<br><br>Квест уйыны |

| | | |
|---|---|---|
| | “Ҡош юлы”, ”Аҡйондоҙ” А. Йәғәфәрова  һ.б.<br>Уйын – фантазия: “Әгәр космосҡа осһам?” һ.б.<br>Тәжрибә үткәреү: “Йәйғор ниндәй төҫтә?” һ.б.<br>Конструктив–модель эшмәкәрлеге: “Космодром”, “Ракета”, һ.б. (“Магформерс” конструкторы, схема буйынса).<br>Хәрәкәтле уйын: “Осто – осто”, “Ракета осорам”, “Йыһанға осабыҙ”, “Лава”,“Йәшен” “Йыһангирҙар”, “Ҡояш менән болот” һ.б.<br>Уйын-ситуация: “Ракета осороу” һ.б.<br>Дидактик уйындар: “Ҡояш системаһы”, “Нимә артыҡ?”, "Планеталар парады”, “Һүҙҙе алмаштырып әйт”, “Ниндәй һөнәргә кәрәк?”, “Һөйләмде тамамла” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек:  “Асыҡ тәҙрә”, “Өйҙә яңғыҙ булғанда…”, “Сит кеше ишек шаҡыһа…” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Китап - белем шишмәһе” | Программаға ярашлы күренекле башҡорт һәм рус яҙыусылары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Китапҡа ҡағылышлы һөнәрҙәр менән таныштырыу: хәреф йыйыусы, баҫыусы, дизайнер. Китап төрҙәре менән таныштырыу (әҙәби, ғилми, энциклопедик, балалар өсөн). Китап төҙөлөшө тураһында балаларға мәғлүмәттәр биреү (тышы, титул бите, биттәре, текст, иллюстрациялар һ.б.). Ҡағыҙ төрҙәре тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. “Ҡыҙыл китап” тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Китап мөйөшөн тулыландырыу, китаптар күргәҙмәһе, “Китаптар дауаханаһы” эшләү. Китапҡа ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Китап тураһында мәҡәлдәр, һанашмаҡтар, әйтемдәр өйрәнеү.<br>Уйын – драматизация: режиссер уйыны “Мин китапханасы” .<br>Хеҙмәт эшмәкәрлеге: “Китаптар дауаханаһы” (ҡушылған эште теүәл үтәргә, эш ҡоралдарын урынына ҡуйыуҙы күнектереү).<br>Эҙләнеү-тикшеренеү эшмәкәрлеге: “Тылсымлы ҡағыҙ”.<br>Схема- модель ҡулланып ижади һөйләү: “Китап нисек эшләнә?” һ.б.<br>Уйын – ситуация: “Мин китап баҫыусы”, “Мин – китап буяусы” һ.б.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Китап- белем шишмәһе”, Китап нимә һөйләй?”, “Китап тарихы” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Китапхана”, “Ғаилә”, ”Мәктәп”, “Типография”, “Китап магазины” һ.б. (үҙ-аллы уйын ойошторорға, уйын ҡағиҙәләрен үтәргә,  уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнарға,  үҙ белемдәрен, хеҙмәт оҫталығын ҡулланырға, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтенә ҡарап бүлешеп уйнау).<br>Үҫтереүсе диалогтар: “Китап нисек барлыҡҡа килә?”, “Китапҡа нисек ярҙам итергә була?” һ.б.<br>Конструктив – модель эшмәкәрлеге: “Китап кәштәһе”, “Китапхана” һ.б. (ҙур модулдәр, эре конструкторҙар).<br>Йәбештереү: “Минең яратҡан китабым”, “Китап белем шишмәһе” һ.б. | Коллекциялар әҙерләү “Яратҡан йәнһүрәт геройҙары”<br><br>Балалар энциклопедияларынан күргәҙмә ойоштороу<br><br>Тематик китап күргәҙмәләре китапсыҡтар эшләү<br><br>Балалар яҙыусыларына арналған тематик күргәҙмә |

| | | |
|---|---|---|
| | Нәфис әҙәбиәт: “Йәшә китап” Г. Юнысова, “Китап укыйбыҙ” Ғ. Ғәлиева һ.б.<br>Дидактик уйындар:“Китап нисек эшләнә?”, “Ҡағыҙ нисек эшләнә?”, “Аҡыллы китаптар ни өсөн кәрәк?”, “Уйлап тап, мин кем?”, “Яратҡан геройҙарҙың атрибуттарын дөрөҫ тап”, “Әкиәтте йый”, “Был ниндәй әкиәттән?”, “Дөрөҫ һүрәтлә”, “Һүрәтен дөрөҫ тап”, “Китап нисек эшләнә?” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Остолар, остолар”, Айыу, бүре”, “Хайуандар уйнай”, “Бесәй һәм сысҡандар”, “Энә, еп”, “Шаян балалар” һ.б.<br>Әүәләү: “Әкиәт геройҙары”, “Йәшәгән ти...” һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Мин китап баҫыусы”, “Минең тәүге китабым”, “Кулдан мисәт” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек: “Осло әйберҙәр”, “Светофор минең дуҫым” , “Асыҡ тәҙрә”, “Мин юлда”һ.б. | |
| Май 1-2 аҙна<br>Еңеү яҙы<br>“Батырҙар Ил күрке” | Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары, һуғышта еңеп сығыуҙары тураһында баланың белемен тулыландырыу. Патриотик тәрбиә биреү.<br>Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан геройҙар һәм уларға ҡуйылған һәйкәлдәр, бюстар, таҡтаташтар тураһында мәғлүмәт биреүҙе дауам итеү. Хәрби миҙал – ордендар тураһында белемен киңәйтеү. Төрлө ғәскәр төрҙәре, хәрби техника менән таныштырыуҙы дауам итеү (йәйәү, һыу, диңгеҙ, һауа, танк). Гендер тәрбиәһе биреү.<br>Бөйөк Ватан һуғышында Башҡорт атлы дивизияһы (Советтар Союзы геройы Т.Кусимов, И.Попов һ.б. тураһында мәғлүмәт биреү .<br>С.Юлаевтың батырлығы тураһында мәғлүмәт биреүҙе дауам итеү.<br>Башҡорт халҡының милли геройы С.Юлаевтың исемен мәңгеләштереүен: Салауат ҡалаһы, проспект- урам исемдәре, спорт һарайы, С.Юлаев хоккей клубы, С.Юлаев ордены, «Салауат йыйыны» булыуы тураһында аңлатыу.<br>Балала тыуған илде һаҡлау, яҡлау һәм малайҙарҙа ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, түҙемлек, етеҙлек, таһиллыҡ сифаттары тәрбиәләргә, төркөмдәге ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ үтәргә, башланған эште аҙағына еткерергә, иҫкәртеүһеҙ үтәүҙе ғәҙәткә индерергә, уйында ойоштороу һәләтен хупларға, ижади ҡарашын үҫтерергә.<br>Белем биреүсе ваҡиға: “9 май- Еңеү көнө”, “Салауат- милли батыр”.<br>Үҫтереүсе дәрестәр: “Герой ҡалалар”, “Башҡорт атлы дивизияһы” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Шайморатов генерал кем булған?”, “Кем ул - Муса Гәрәев ?” һ.б.<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Ил һаҡсыһы”, “Танкист”, “Моряк”, “Летчик” һ.б. (уйынды ҡағиҙәһе буйынса үтәргә, ролдәрҙе дөрөҫ бүлешергә, ярҙамсыл булырға, әңгәмәсене тыңлап бөткәс кенә һорау бирергә күнектереү).<br>Дидактик уйындар: “Был ниндәй ғәскәр?”, “Дүртенсе артыҡ”, “Сағыштыр”, “Уйлап тап” һ.б.<br>Хәрәкәтле уйындар: “Һыбайлылар”, “Өй алыш”, “Кем алдан өлгөрә?”, “Алыш”һ.б.<br>Нәфис әҙәбиәт: ”Олатайым фотоһы”, “Салауат батыр” М. Ғәли ,“Егеткә” С. Юлаев, | Байрам:<br>“Еңеү көнө”<br>Ветерандар менән осрашыу<br><br>Балалар эштәренән күргәҙмә<br><br>Проект эше:<br>“Халыҡ батырҙары”<br><br>Хәрби техника коллекциялары йыйыу<br><br>Музейға, иҫтәлекле урындарға маҡсатлы экскурсия<br><br>Фотоальбом әҙерләү |

| | | |
|---|---|---|
| | ”Ҡамыр батыр” башҡорт халыҡ әкиәте һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Салауат батыр” Ш.Ҡолбарисов муз. тыңлау, йырҙар өйрәнеү һ.б.<br>Һүрәт төшөрөү: “Еңеү салюты” (еүеш ҡағыҙ ҡулланып, граттаж) һ.б.<br>Конструктив - модель эшмәкәрлеге: “Ҡаламдың еңеү паркында” (ташландыҡ, тәбиғи, материалдарҙан, “Кликко”, “Квадро”, “Тико” конструкторҙарынан) һ.б.<br>Ҡорама йәбештереү: “С. Юлаев портреты” (Ҡағыҙ техникаһы, йомарлау ысулы менән)<br>Ситуатив һөйләшеүҙәр: “Халыҡ батыры Салауат ниндәй булған?”, “Еңеүҙе кемдәр яуланы?” .<br>Ҡул эше: “Һыбайлылар бейеүенә сыбыртҡы” һ.б.<br>Тәжрибәләр үткәреү: бала инициативаһынан сығып эш итеү, уй- фекерен, ниәтен тормошҡа ашырыу.<br>Ситуациалы хәл:. “Әгәр мин аҙашһам?” һ.б.<br>Хәүефһеҙлек:“Аҙашҡанда кемгә мөрәжәғәт итергә була?”, “Һаҡ бул, электроприборҙар”, “Сит кешенән һаҡ бул!”, “Юл билдәләре” һ.б. | |
| 3-4 аҙна<br>“Ер - йәшәгән урыныбыҙ” | Ер шары, ҡояш системаһы,күсер ҡоштарҙың, бөжәктәрҙең тышҡы күренештәре, холоҡтары, туҡланыу, үрсеү ысулдары тураһында белемдәрен киңәйтеү. Аквариум балыҡтарының йәшәү урыны, мөхите, менән таныштырыу. Ҡаҙылма байлыҡтар (алтын, баҡыр, тимер рудаһы), ҡоро ер һәм һыу яткылыҡтары тураһында белемен тулыландырыу.<br>Урман-ҡырҙарҙа үҫкән шифалы үләндәрҙе (бәпембә, үгәй–инә үләне, мәтрүшкә, андыҙ, ирәүән, меңъяпраҡ, әрем, кейәү үләне h.б.), шулай уҡ ағыулы үҫемлектәр (умырзая, ынйы сәскәһе, айыу ҡурайы, ҡарға күҙе); емеш ҡыуаҡлыҡтары (бүре емеше, айыу емеше h.б) тураһында һөйләү. Ағас-үҫемлектәрҙең һәр миҙгелгә ҡарата яраҡлашыуын, ҡыш көнө тынлыҡ хәлендә, япраҡһыҙ тороуын аңлатыу. Тәбиғәт биргән үҫемлектәр – әтмәкәс, йыуа, балтырған, көпшә, һөтләкәс, ҡуян тубылғыһы, ҡуҙғалаҡ, оҫҡон йыуаһы һ.б., был үҫемлектәрҙең витаминдарға бай булыуы тураһында мәғлүмәт биреү.<br>Балаға һаҙлыҡ, ундағы үҫемлектәр (һаҙ мүге, ҡамыш, томбойоҡ, күрән, ҡырҡ быуын), үҫеүе тураһында белем биреү. Йомаҡтар, мәҡәлдәр, әйтемдәр өйрәнеү. Һүрәткә ҡарап, уларҙы таныу, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.<br>«Ҡыҙыл китап»ка ингән үҫемлектәрҙе танырға өйрәтеү, атамаларын белеү һәм кешеләргә файҙаһын аңлатыу.<br>Тәбиғәт ҡомартҡылары (Талҡаҫ күле, Асылыкүл, Яҡтыкүл, Мораҙым тарлауығы), ҡурсаулыҡтарҙы (Шүлгән таш, Урал аръяғы, Башҡортостан дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы) танып белергә һәм тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.<br>Төркөмдә һәм тәбиғәттә үҙ-үҙеңде дөрөҫ тотоу, тәртип ойоштороу, бергә уйнау һәм дөйөм алынған ҡағиҙәне үтәүҙе камиллаштырыу. | Проект әҙерләү (макеттар, металл төрҙәре)<br><br>Энциклопедиялар менән танышыу<br><br>Уйын – эстафеталар |

| | | |
|---|---|---|
| | Үҫтереүсе дәрестәр: “Тәбиғәтте һаҡлайыҡ”, “Урман сере” һ.б.<br>Үҫтереүсе диалог: “Һыуһыҙ (ерһеҙ) йәшәп буламы?”,”Тәбиғәт стихиялары нимә ул?”, “Ниндәй тәбиғәт байлыҡтарын беләһең?”.<br>Дидактик уйындар: “Был ниндәй сәскә?”, “Ҡаҙылма байлыҡтарҙы айырып һал”, “Бөжәктәрҙе төркөмлә”, “Шифалы һәм ағыулы үҫемлектәрҙе айыр”, “Дөрөҫ әйт”, “Был ниндәй ҡурсаулыҡ?” һ.б.<br>Конструктив- модель эшмәкәрлеге: “Ф.Иҫәнғоловтың “Урман ҡыҙыҡайы” хикәйәһе”, “Әкиәт ҡошо самрау” һ.б. (тәбиғи, ташландыҡ материалдар)<br>Сюжетлы – ролле уйындар: “Сәйәхәт”, “Йәш экологтар” һ.б. (үҙ-аллы уйнарға өйрәтеүҙе дауам, баланың инициативаһын һәм ойоштороу һәләтен хуплау, һайлап алынған уйынға план төҙөү , фекер алышыу, үҙ-ара килешеп тормошҡа ашырыу юлдарын үҫтереү).<br>Нәфис әҙәбиәт: “Мин йәшәйем Уралда” Г. Ғәлиева, “Урал иле – Арҡайым” А. Йәғәфәрова “Ирәндек” , “Урмансы” А. Йәғәфәрова , “Елкәй” А. Йәғәфәрова, “Изгелек” А. Йәғәфәрова , “Ултыртайыҡ аҡ ҡайын” А. Игебаев, “Беҙ юнаттар” Ә. Кәримова- Әсәҙуллина, “Ирәндегем – Төйәләҫем” С. Ишморатова<br>Һүрәт төшөрөү: “Ҡояш системаһы”, “Тәбиғәт бүләге”, “Ер беҙҙең планета” һ.б.<br>Йәбештереү: “Яҙҙың тәүге сәскәләре” һ.б.<br>Музыкаль эшмәкәрлек: “Ер шарын һаҡлағыҙ” Р. Сәхәүитдинова музыкаһы. һ.б.<br>Эҙләнеү-тикшеренеү эшмәкәрлеге: “Һыуҙың, ҡомдоң серҙәре” һ.б.<br>Уйын сәйәхәт: “Хазиналар иленә”, “Ирәндеккә сәйәхәт”<br>Хәүефһеҙлек: “Урманда һаҡ бул!”, “ Һаҡ бул, талпан!” һ.б. | |